ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

26-1 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2020

№52 (938)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ғүмерҙе зая үткәрмәйек! 2



Табындарыбыҙ... үҙ ҡулдарыбыҙ менән әҙерләгән ризыҡтарҙан һығылып тора 8-9



Тамашасыларыбыҙ... беҙҙең хуплаусы ла, тәнҡитсе лә 11



Башҡорт теленә арналды 12-13



ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Етеп килгән 2021 йылды яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, изгелеккә, уңыштарға, именлеккә өмөттәр менән ҡаршы алайыҡ. Беҙҙең ихлас ҡотлауҙарыбыҙҙы ҡабул итегеҙ! Яңы йылда ла бер-беребеҙгә тоғролоҡ һаҡларға, беҙгә - уҡыусыларыбыҙ, беҙгә - беҙҙе ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, рухлы сығыштар, оптимистик һәм позитив хәбәрҙәр менән ҡыуандырыусы ижадсылар булырға яҙһын. Рәхмәт бар булғанығыҙға!***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Ғүмеребеҙҙең һәр йылы, ул нисек кенә килмәһен, ҡәҙерле. Быйылғы йыл, әлбиттә, Ер йөҙөн дер һелкетте, ә шулай ҙа тормош дауам итә: һабаҡ-ғибрәттәр менән бергә шатлыҡ-ҡыуаныстар ҙа булғандыр бит?***

***Гөлфиә МӨХӘМӘТДИНОВА, блогер, Белорет ҡалаһы:*** Быйылғы йылдың һуңғы айында миңә 39 йәш тулды - ҡотлағыҙ! Йәшем менән ҡәнәғәтмен. Быйыл бигерәк тә үҙем өсөн күп асыштар булды. Саңғыға баҫтым, ярыштарҙа ҡатнаштым, ГТО нормаларын тапшырып, алтын билдә яуланым, тауҙар гиҙҙем һәм, блогер буларaҡ, үҙ-үҙеңде камиллаштырыу, сәләмәтлек, матурлыҡ мәсьәләләре буйынса онлайн марафондар үткәрҙем. Коронавирус сиренән карантин, үҙкурсаланыу иғлан ителгән саҡта ла буш ятманым: ҡалабыҙҙың Дауыт Юлтый исемендәге башҡорт китапханаһы үткәргән сараларҙа әүҙем ҡатнаштым. Бына күптән түгел мине унда саҡыртып алдылар һәм Маҡтау ҡағыҙы тапшырып ҡайтарҙылар. Минең өсөн был да ҙур шатлыҡ, шуға һеҙҙең менән дә уртаҡлашам. Шатлыҡ, тигәс, йәмле йәй көндәре иҫкә төшөп китте. Кемдәрҙер, әлбиттә, өйҙә бикләнеп ултырҙы, ләкин был минең холҡома тап килеп бөтмәй, йәйҙәрен мин тәбиғәт ҡосағында, тауҙарҙа! Шул мәлдәрҙә тағы бер үрҙе яуланыҡ - Ҡыраҡа тауҙарына меңеп төштөк. Эйе, сәфәрҙәштәрем менән тау башына ҡыр кәзәләре кеүек менеп киттек. Ундағы хозурлыҡ! Һөйләп тә, көйләп тә аңлатырлыҡ түгел - үҙеңә барып күрергә кәрәк, шунда ғына аңларға мөмкин тауҙарҙа тыуған шатлыҡты. Тау башынан төшкәс тә әле тыуған төйәгемдең гүзәллектәренә һоҡланып, Шығайға тиклем 15 км атлағаныбыҙҙы ла һиҙмәгәнбеҙ. Ошо уҡ йәй Белорет ҡалаһына терәлеп тигәндәй күккә ашҡан Еләкташ (Малиновка) тауына ла артылыу бәхетенә ирештем. Ғүмер аҡҡан һыу кеүек үтә лә китә. 20 йыл хыялланып йөрөй торғас, ниһайәт, әлеге Еләкташҡа ла күтәрелеп, донъяға таң ҡалдым. Тағы бер шатлығым, тағы бер еңеүем ине был. Эйе, ғүмер үтә лә китә. Бушҡа үтмәһен ул, әй кешеләр, тауҙарға менегеҙ, төйәгебеҙ матурлығына һоҡланып йәшәгеҙ!

## ҠОТЛАЙБЫҘ!




### ҺЫЙЫР ЙЫЛЫНА

*Һөттәй ап-аҡ ҡарҙар яуа,*
*Көрттәй ҡалын был ҡышта:*
*Көйшәй-көйшәй һыйыр атлай,*
*Килә, тиҙәр, уңышҡа.*

*Аҡ бәхет, аҡ юлдар теләп*
*Киләм аҡ ҡар өҫтөнән.*
*Аҡ тәмдәре телебеҙгә*
*Күскән әсә һөтөнән.*

*Әсәйҙәр гел иртүк тороп,*
*Һәүкәшкәйен иркәләп,*
*Күнәгенә һөт зыңлатып*
*Уятһын һәр иртәлә!*

*Һөтһөҙ һыйыр аҫ(ы)раған*
*Уңғанмы бер ваҡытта?*
*Тик һөттән шул ҡаймаҡ була,*
*Була... әсе ҡатыҡ та.*

*Уңышҡа юраған йылым*
*Бушҡа үтеп китмәһен,*
*Һыйыр һөтө - телендә, тип*
*Уятһын һәр иртәһе...*

*Ойоҡһотоп ҡар яуғанда,*
*Ойоп йөрөү килешмәҫ.*
*Ҡытлыҡ йылда аҡ ҡотҡарған,*
*Билдәр әле бирешмәҫ.*

*Бирешмәҫ тә, йылдар имен*
*Үтһен, тиеп юраһаң -*
*Аттан яман була, тиҙәр,*
*Әгәр һыйыр тулаһа.*

*Ат шикелле тулаһын да...*
*Булмаҫ һымаҡ яманға,*
*Тик һыйыр ат урынына*
*Егелмәһен һабанға!*

*Дөлдөл һөйрәр йөктәр тартып,*
*Биртенмәһен билкәйе.*
*Юҡһа, һынын һуҙып-бөгөп,*
*Һыуалған һыйырҙы егеп*
*Килә төҫлө илкәйем...*

**Сафуан ӘЛИБАЙ.**

12+

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҒҮМЕРҘЕ ЗАЯ ҮТКӘРМӘЙЕК!

**Тиҙҙән Яңы 2021 йыл етә һәм миңә 40 йәш туласаҡ. Йыш ҡына үҙемә: "20 йыл элек бөгөнгө аҡылым булһа, тормошом ниндәйерәк булыр ине икән?" тигән һорауҙы бирәм.**

**"Эсмә, тартма, ҡалғанына ирешеп була!"** Ысынлап та, тап шулай. Наркотиктар тураһында уй бөтөнләйгә башыңа инеп тә сыҡмаһын.

**Сиктән тыш ауыр ваҡыттарҙан тыш, бер ҡасан да үтескә аҡса алма.** Шәхси эшҡыуарлыҡ башлауға ла, машинаға ла, телефонға ла, ҡыҙыңа бүләк эшләү өсөн дә. Аҡса юҡ икән - уны эшләп табыуҙың башҡа юлдарын эҙлә, йәки бөтөнләйгә ҡул һелтә. Кредит - хәйерселеккә илткән беренсе һәм иң ҙур аҙым. Сараһыҙҙан алғанда ла тиҙерәк кире ҡайтар һәм бүтән үтескә һорамаҫҡа тырыш.

**Һиңә берење лә бурыслы түгел,** быны ла хәтереңдә тот. Дәүләт тә, атай-әсәйең дә, йәмғиәт тә һине тәьмин итергә тейеш түгел. Үҙең эшләп тапмаһаң, бер нәмә лә ҡулыңа буштан төшмәҫ.

**Үҙеңде сикләй бел.** "Был ғүмерҙә бер тапҡыр йәшәйбеҙ!" тигәнгә оҡшаш бөтә һүҙҙәр ялған, улар артына хурлыҡ һәм унан да ауырыраҡ эҙемтәләрҙән башҡа бер ниндәй ҙә мәғәнә йәшерелмәгән. Кредитҡа алынған аҡсаға айфон һатып алмаһаң йәки Яңы йылда Парижға барып ҡайтмаһаң да бер ни булмаҫ. Ҡулланыусылар ҡарашынан баш тарт, аҡыллыраҡ бул.

**Үҙеңде ихтирам ит.** Был ялған ҡиммәттәргә алданма, маҡтанма, алдашма. Үҙ баһаңды белеү телефон маркаһына, ҡиммәтле кейем-һалымға йәки машинаға бәйле булмаһын. Шул осраҡта ғына ниндәй шарттарҙа ла һине хөрмәт итерҙәр.

**Намыҫ һәм абруй төшөнсәләрен бөрәү ҙә юҡҡа сығармаған.** Һәр осраҡта ла кеше булып ҡала бел, выжданыңды һатма. Хаҡлыҡ һинең яҡта икән - бер ниҙән дә ҡурҡма.

**Башҡа кешеләрҙе ихтирам ит.** Хатта кемдер быға лайыҡ түгел булып тойолһа ла, хөрмәт күрһәтеү - тәртипле кешегә хас һыҙат.

**Үҙеңде ҡулда тота бел.** Итәғәтле, тыныс һәм әҙәпле була белеү бөйөклөктөң төп билдәһе. Был сифаттар шәхси эшҡыуарлыҡта ла ярҙам итә.

**Кәрәкмәгән әйберҙәр һатып алыуҙан тыйыл,** аҡсаң әлегә артығы менән етһә лә йыйып бар. Был һаранлыҡты аңлатмай, ни бары ошо әйберҙе һатып алырға кәрәкме-юҡмы - шуны алдан уйла.

**Эшеңә яуаплы ҡара.** Бөйөк ҡаҙаныштар юлы хеҙмәттән башлана, йыш ҡына түбән эш хаҡынан. Быңдай эште илке-һалҡы ғына башҡарырға ярай, тип уйлама. Яуаплылыҡтан тыш, минән бер ниндәй артыҡ яғы булмаған кешеләрҙең юғарыға үрләүенә шаһит булғаным бар, үндайҙар бик аҙ, шуға юғары баһаланалар.



**Аҡсаңды нимәгәләр һалырға тырыш.** Пирамида һәм дуҫтарыңдың "стартап"тарына түгел. Күсемһеҙ милек, ҡиммәтле ҡағыҙҙар, банк депозитына, мәҫәлән. Тиҙ генә байып китеү юлдарын эҙләмә, улар хәйерселеккә йә төрмәгә илтеүе бар.

**Белем ал.** Интернет быңың өсөн уғата уңайлы. Аҡса телән аңларға өйрән (быңың өсөн бухгалтерҙар курсын үт), бизнес өлкәһен энәһенән ебенә тиклем төшөнөп өйрән. Хатта бөйөрәк һатырға ғына йыйынһаң да быңың кәрәге тейер. Күберәк белгән һайын мөмкинлектәрең дә артыуын иҫеңдә тот.

**Ялҡауланма.** Буш ваҡытыңды уйындар һәм интернетта үткәреүҙе туҡтат, берәй китап уҡы, балыҡ тоторға бар йә саф һауала йөрөргә сыҡ, бассейнға булһа ла барып кил. Бер ваҡытта ла ялҡауланма, юғиһә, 20 йылдан япа-яңғыҙ ҡалырға ҡурҡасаҡһың.

**Бер ваҡытта ла бизнесты "нулдән" башлама.** Бер нәмә лә белмәй тороп, фараздарға ғына нигеҙләнеп, тиеүем. Үҙең бер нисә йыл эшләгән һәм яҡшы белгән өлкәлә бизнес башлау иң отошлоһо. Әммә икенсе пунктта әйтелгәндәрҙе иҫтә тот: аҡсаң етмәйерәк тора икән - эшләп тап, быға ваҡытың бар әле.

**Ваҡыт - хазинаға тиң.** Йәштәргә өйрәнгәнсе, ғүмер үҙып та китә. Төп байлыҡ машиналар, фатирҙар, банктағы шәхси иҫәп тә түгел һәм улар 40 йәшкә еткәс мөһимлеген дә юғалта. Хобби, туғандарың өсөн ваҡытыңды йәлләмә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был ун биш кәңәште тулыһынса үтәп йәшәүгә ышаныуы ауыр, беләм. Әммә тормошҡа ашырыр ниәттәрең, сәмең бар икән - тырышлыҡ һалып ҡара. Кәңәштәремде тотҡан берәү ҙә үткән ғүмеренә зарланып ултырмаҫ, тип вәғәҙәләйем.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

***Ғүмеребеҙҙең һәр йылы, ул нисек кенә килмәһен, кәҙерле. Быйылғы йыл, әлбиттә, Ер йөҙөн дер һелкетте, ә шулай ҙа тормош дауам итә: һабаҡ-ғибрәттәр менән бергә шатлыҡ-ҡыуаныстар ҙа булғандыр бит?***

*Азамат ХӘМИҘУЛЛИН, менеджер, Өфө ҡалаһы:* Беҙ яңы йылдарға яҡты өмөттәр бағлап, унан матур мөғжизәләр генә көтөп, түлҡынланып ҡаршылайбыҙ. Һәр береһен, йыл һайын, сөнки уларҙың һәр береһе - ғүмеребеҙҙең яңы бите. Ошоға тиклем бер йыл эсендә өмөттәребеҙ, теләк-ниәттәребеҙ аҡланып бөтмәнә лә (ә ул мөмкин дә түгел!), барыбер ҡәнәғәт һәм сираттағы йылыбыҙға рәхмәтле булып ҡала инек, сөнки проблемаларыбыҙ күп һәм төрлө булған сүрәттә лә, донъябыҙ тыныс, күңелдәр көр һәм иң мөһиме - иҫән-һауҙар, сәләмәт инек. Быйылғы сысҡан йылы, үҙегеҙ әйтмешләй, бөтөн донъяны дер һелкетте: ҡарасы, бәләкәй генә мәхлүк шундай тауҙай бәлә килтерер тип башҡа ла инеп сыҡмай ине бит! Уйынсылап булһа ла, сысҡандан хатта фил дә ҡурҡа, тип, дөрөҫ әйтәләр икән шул.

Коронавирус хаҡында бик күп яҙыла, туҡтауһыҙ шул хаҡта һөйләйбеҙ, ә унын, күрәһегеҙме, сигенергә һис бер уйы юҡ. Ә ниңә уға шундай ҙур иғтибар биреп, телебеҙҙән дә төшөрмәйбеҙ әле? Һаҡлыҡ саралары күрәйек, ләкин гел генә шул хаҡта ла тылҡымайыҡ, яҡшы, изге, сәләмәт хәбәрҙәр һөйләүгә күсәйек. Бер ҡайҙа ла бара алмаҫ ул мөртәт тажҙәхмәт, сәнселер бер килеп. Ә беҙ бер-беребеҙ хаҡында һөйләшәйек, хәлдәребеҙҙе белешәйек - үҙ-үҙебеҙгә бикләнмәйек: тормош, бер нигә ҡарамаҫтан, дауам итә бит! Өләсәйем әйтмешләй, яҡшыны һөйләгән һайын яҡшырыр хәлдәребеҙ, иншалла.

Быңа әле үҙемдең, ғаиләбеҙҙең шатлығы менән уртаҡлашмаҡсымын. Бер ҙә коронавирустан ҡурҡып торманыҡ, шөкөр, фатирлы булдыҡ! Дәүләт программаһы буйынса түбән ставка менән ипотека ярҙамында һатып алдыҡ. Һәм шуныһы ҡыуаныслы булды: минең менән бергә тағы ла 20-нән ашыу ғаилә тап ошо программа буйынса фатирлы булды. Шуныһы мөһим: был программа киләһе йылдың йәйенә тиклем оҙайтылды, шуға күрә фатир мәсьәләһен хәл итеп ҡала алаһығыҙ. Был өлкәлә мин хәҙер белгес тиһәң дә була, күп сабырға, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итергә тура килде, ләкин һис үкенмәйем: яңы йорттан заманса фатир алыуға өлгәштек. Дөрөҫ, тәүге иғәнәне 15 процент итеп түләттеләр, ә аҙаҡ ставка кәметелә. Банктарҙа ул 5,85-тән алып 6,5 процентҡа тиклем тәшкил итә. Әгәр йәш ғаиләлә балалар булһа, бая әйткән тәүге иғәнә өсөн Әсәлек капиталын түләргә була, ә инде икенсе һәм унан һуңғы балаларығыҙ 2018 йылдан һуң тыуған булһа, Һаҡлыҡ банкы 4,7 процент ставка тәғәйенләй. Ҡул ҡаушырып, сиргә һылтаулап, көтөп ултырһаң, бер кем дә һиңә килтереп бирмәйәсәк, шуға беҙ ҙә үҙебеҙгә йүгермәләргә, әлеге сысҡандың, исмаһам, бер йүнле сифатын: йылғырлығын өлгә итеп, уны файҙаланып ҡалырға тырыштыҡ. Киләһе йыл, ниһайәт, тормошобоҙға именлек килер, тип өмөт итәйек.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 25 декабргә мәғлүмәттәре буйынса, тәүлек эсендә 162 кеше яңы коронавирус инфекцияһы йоҡторған. Пандемия башланғандан алып республикала ауырығандарҙың дөйөм һаны - 18 066, һауыҡҡандар - 14 162. Рәсми статистика буйынса, бөтәһе 131 кеше донъя ҡуйған. Дауаханалан тыш пневмония осраҡтары арткан, тәүлегенә - 418 кеше.

✓Башҡортостан Башлығының мөрәжәғәтнамәһен киләһе йылға күсерергә ҡарар ителде. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте. "Киләһе йылда нисек булыр, ҡарарбыҙ, мөрәжәғәтнамәне буш залда уҡып иштерергә теләмәҫ инем", - тине ул. Әгәр яҙға хәтлем ковид менән бәйле хәл үҙгәрмәһә, онлайн-мөрәжәғәтнамә форматы тураһында уйларбыҙ, тип өҫтәне республика етәксеһе.

✓Башҡортостандың Ковидҡа ҡаршы колл-үҙәге яңы йыл каникулдарында һәм унан һуң да эшләй, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров. Һәр кем колл-үҙәктең берҙәм 218-19-19 номерына шылтыратып, кәрәкле мәғлүмәт алырға мөмкин. Билдәләнеүенсә, 14 декабрҙән 20-һенә тиклем колл-үҙәккә 2,8 меңдән ашыу кеше мөрәжәғәт иткән. Шылтыратыусыларҙың 45 проценттан ашыуы амбулатор ярҙам, 13 проценты коронавирусҡа тест һөҙөмтәләре, 7,7 проценты дарыуҙар менән тәьмин итеүгә һәм стационар ярҙамға ҡағылышлы һорауҙар менән ҡыҙыҡһынған.

✓Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин хөкүмәттәге брифингта ведомствоның юғары уҡыу йорттары студенттарынан бер нисә тапҡыр "дистанционка" ваҡытында уҡыу өсөн түләүҙе кәметеүҙе һораған мөрәжәғәттәр алыуын хәбәр итте. "Рәсәй Президенты әйтҡәнсә, "байраҡ" вуздар уҡыу хаҡын кәметмәһә лә, мәҫәлән, ятаҡта йәшәү, өҫтәмә льгота, стипендия алыу йәһәтенән (айырыуса ишле, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге студенттар өсөн) ниндәйҙер ҡарарға килер, моғайын", - тине мәғариф министры.

✓Ғинуарҙа республикала йәшәүселәрҙе оҙайлы яңы йыл каникулдары көтә, тип хәбәр итте Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы. Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексына ярашлы, **1, 2, 3, 4, 5, 6** һәм **8** ғинуар - яңы йыл каникулдары, **7 ғинуар** - Христос Раштыуаһы - эшләмәгән байрам көндәре булып тора. Шулай итеп, Яңы йыл каникулдары унайынан 2021 йылдың **1 ғинуарынан 10 ғинуарына тиклем** байрам һәм ял көндәре булып иҫәпләнә.

✓ *Эсмәгән кеше бер ҡасан да эсмәй: байрам булһа ла, булмаһа ла. Байрамға ҡаршы көрәшкәнсе, наркоманияға, эскелеккә, терроризмға ҡаршы көрәшергә кәрәк. Кем Яңы йылды үткәрергә теләмәй, өйҙә ятһын, сәйәхәт ҡылһын йә ял итһен.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ғүмеребеҙҙең һәр йылы, ул нисек кенә килмәһен, ҡәҙерле. Быйылғы йыл, әлбиттә, Ер йөҙөн дер һелкетте, ә шулай ҙа тормош дауам итә: һабаҡ-ғибрәттәр менән бергә шатлыҡ-ҡыуаныстар ҙа булғандыр бит?***

***Сажидә ТЕЛӘҮЕМБӘТОВА, дарыухана хеҙмәткәре:*** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, сир тип донъябыҙ, шөкөр, туҡтап ҡалманы: кешеләр шатланыу, ҡыуаныу тигән йәшәткес шифаны онотманы. Бер нәмәгә ҡарамай, йәштәр ғашиҡ булыша, яратыу хистәренән иләҫләнә, өйләнешә, сабыйҙар тыуа тора, юбилей тантаналары билдәләнә, егеттәр хеҙмәт итеү осорон тултырып, тыуған йорттарына әйләнеп ҡайта... Хәйер, был донъяның шатлыҡ-һөйөнөстәрен дә, көйөнөстәрен дә һанап бөтөрөп буламы ни инде!

Мин дә шулай бынан 20 йыл элек тәүге мөхәббәтемә, яҡшы тормошҡа ҙур өмөттәр бағлап, кейәүгә сыҡҡайным. Тәүҙә бөтәһе лә һәйбәт булды. Ике ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Иремдең атаәсәһе , туғандары мине яратып, яҡын күрҙеләр, бер яман һүҙҙәрен ишетмәнем. Тик ирем генә ниңәлер мине тиң күрмәне, ғүмер буйы кәмһетте. Хатта ҡунаҡ мәжлестәренә бергә барғанда ла яныма ултырмай ине. Үҙенсә шаяртҡан булып, кеше алдында йөҙөмдө йыртыр ине. Аҙаҡҡа табан хатта ҡул күтәрә башланы. Тешемде ҡыҫтым, балалар хаҡына түҙҙем, сөнки миңә мөнәсәбәте ниндәй генә булмаһын, ирем ҡыҙҙарыбыҙҙы йәнен бирерҙәй булып ярат-ты, уларға һәйбәт атай булды. Балалар үҫеп, уҡып бөтөп, кейәүгә сығып, ситтә төпләнделәр, мин аталары менән, ләкин япа-яңғыҙ тор ҙа ҡал. Эскән килеш тә, айыҡ ваҡыттарында ла мине мыҫҡыллауҙары, йәберләүҙәре тағы ла ҡурҡыныСыраҡ, яһилыраҡ төҫ ала башланы, ҡасып сығып ҡотолоп ҡалыуҙар йышайҙы. Инде лә түҙемлегем бөткәс, шундай бер боланан һуң әйберҙәремде төйнәнем дә сығып киттем. Ауылдағы атайымдарҙан ҡалған өйҙө һатып, ары-бире туплап барған аҡсамды ҡушып (ҡыҙҙарым ярҙамы ла булды, рәхмәт уларға, мине аңланылар) ипотекаға бәләкәй генә булһа ла бер бүлмә һатып алдым. Эшемдән алыҫ булыуына ла ҡарап торманым хатта.

Эй рәхәтен белһәгеҙ ине, нисәмә йылдар буйына тәүгә бер иҫһеҙ булып йоҡлағанмын, әйтерһең дә, тау-тау йөк бушатҡанмын. Күңелем тыныс: бер кем, бер ниндәй ҡурҡыныс янамай, хатта бынауы коронавирус хаҡында ла хафаланыуҙарым кәмегәндәй булды, сөнки ирем әллә ҡайҙарҙа, әллә кемдәр менән йөрөп ҡайта ине: ниндәй генә сир эләктермәҫһең! Иртә һайын торам да миңә йән тыныслығы биргәне өсөн Хоҙай Тәғәләгә рәхмәттәремде уҡыйым. Бер ни кәрәк түгел! Ошо көндә иҙәндә йоҡлап йөрөйөм, ләкин ризамын: донъя малы йайлап йыйылыр ул, һаулыҡ кәрәк. Кемдәргәлер минең был яуабым көлкө йә меҫкен булып тойолор, йәнәһе, ирҙән ҡасҡан да бәхетен тапҡан, имеш, тип. Шулай тип әйтеүселәр әле лә булманы түгел. Әллә нимә тиһендәр, минең өсөн әлегә иң ҙур бәхет - үҙенде ихтирам итеү, үҙең булып йәшәү, көн дә иртән яҡшы кәйеф менән эшкә барыу, ҡурҡыуыңды, икеләнеүҙәреңде еңеп, һине кешегә лә һанамаған, туҡмаған әҙәмгә баш эйеүҙән, уны аҫрауҙан, уға хеҙмәт итеүҙән үҙеңде азат ҡылыу. Минең фекерем менән ризалашмаусылар бар икән, "Киске Өфө" биттәре аша уларҙы тыңларға һәм бәхетемде яҡларға әҙермен.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҺӘР МӘЛЕБЕҘҘЕҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛӘЙЕК!

**Быйылғы сысҡан йылы шулайтып үтеп китеп бара. Әле генә төймәләй күҙҙәрен йылтыратып, тормошобоҙға осло моронон тыҡҡайны, бер ҡараһаҡ, йылп, бер йылыбыҙ тарих "тишегенә" инеп тә киткән.**

Тарих битенә һеңдерә яҙырлыҡ та булды шул йылы ла. Һәр кемебеҙ сысҡан еҫен яратмай бит инде, хәс тә шуның кеүек, әллә күпме ғүмер үтһә лә, фуу, тип иҫкә алырлыҡ булды был йыл.

Күрер күҙгә күренмәҫ бер вирус бөтә ер шарын ҡалтыратты, бик күптәребеҙҙе арабыҙҙан мәңгелеккә тартып алды. Оло юғалтыуҙар, күҙ йәштәре аша үҙебеҙҙең Ер йөҙөндәге тәғәйенләнешебеҙҙе бергилке аңлай башлағандай булдыҡ. Бер ниндәй ҙә байлыҡ-мөлкәт һаулыҡты алыштыра алмағанына инандыҡ. Атай-әсәйҙең күҙҙәренә ҡарап һөйләшә, күкрәгенә һыйынып ҡосаҡлаша алмағанда, уларҙың ҡәҙерен нығыраҡ тойҙоҡ. Туғандарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ менән гаджеттар аша сәләмләшкәндә бер күрешеүҙең ысынлап та бер ғүмергә торошло икәнен төшөндөк. Тағымы? Тағы, сәләмәт тормош алып барыуҙың сәләмәт рухты ла уятыуын белдек. Ғөмүмән, кешелектең аңына килеү, уяныуға табан бер аҙым атлау йылы булды, тиһәк, бер ҙә арттырыу булмаҫ.

Шулай, дуҫтар, нисек кенә иҫкергән, тапалып таушалған кеүек булһа ла, һәр мәлебеҙҙең, көнөбөҙҙөң йәмен, тәмен күреп, именлектә-һаулыҡта, ҡәҙерле кешеләребеҙ, ғаиләләребеҙ менән гөр килешеп йәшәйек, тигән һүҙҙәр тормошобоҙ девизы булһын ине. Һаҡланғанды һаҡлармын, тигәнде лә инҡар итмәйек. Бына-бына етеп килгән Яңы йылда барығыҙға ла тик изге хәбәрҙәр, шатлыҡ-ҡыуаныстар, бәхет, бәрәкәтле, иманлы көндәр теләйем!

**Гүзәл МЫРҘАЕВА.
Баймаҡ ҡалаһы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЙРАМДАН ҒӘЙЕП ЭҘЛӘМӘЙЕК



**Йыл һайын декабрь айы башланғас, интернетта "Башҡорттар яңы йылды ҡаршы алмаған, ул мәжүси һәм кафырҙар байрамы" тигән постар сыға башлай. Бигерәк тә шөбһәгә һалғаны шул: үҙҙәрен дин юлында тип һанаған был кешеләр башҡорт байрамдарын да инҡар итәләр, музыкаға (ҡурайға) ҡаршы сығалар һ.б. радикаль ҡараштарын белдерәләр. Был күренеш, был кешеләр йөҙ йыл элекке башҡорт халҡын инҡар итеп, Иҙел-Уралда дөйөм мосолман халҡын ойошторорға теләүселәрҙе хәтерләтә. Ә хәҙер тарихҡа күҙ һалайыҡ.**

922 йылда ғәрәп сәйәхәтсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан яҙып ҡалдырыуы буйынса, боронғо башҡорттар биш төркөмгә бүленгән: бер төркөмө балыҡтарға табынған, икенсеһе - йыландарға, өсөнсөһө - торналарға. Дүртенсе төркөм Тәңре менән 12 тәбиғәт эйәһенә ышанған. Бишенсе төркөм- мосолмандар. Шулай булғас, боронғо башҡорттарҙа йолалар, байрамдар төрлө булған, тип фараз итеп була. Яңы йылды башҡорттар яҙ көнө Науруз (әмәл) байрамында ҡаршы алғандар. Ҡышҡы нардуған да булған, ул декабрь аҙағына тура килә.

Яңы йыл, беҙ теләһәк тә, теләмәһәк тә килә. Йыл һайын уны байрам итәбеҙ. Һижри йыл буйынса мосолмандарҙа ла яңы йыл килә. Ғәрәптәрҙе күҙ уңында тотһаҡ, улар, әлбиттә, шыршы ҡуйып, яңы йылды ҡаршы алмай. Ләкин мосолман булыу - ул яңы йылды инҡар итеү тигәнде аңлатмай. Сөнки Яңы йыл Еңеү көнө, 8 март, Ватанды һаҡлаусылар көнө менән бер рәттән дәүләт байрамы. Башҡорттар үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылған. Беҙ Рәсәй Федерацияһында йәшәйбеҙ һәм уның закондарын үтәргә бурыслыбыҙ, байрамдарын инҡар итә алмайбыҙ. Ҡайһы берәүҙәр был байрамды Петр I йә коммунистар индерҙе, тип яу һала. Беҙ, совет осоро балалары, коммунистарҙан тик насарлыҡҡа өйрәндекме? Шыршы эргәһендә шиғыр һөйләгән баланың иманы кәменеме? Юҡ, әлбиттә. Бер бала ла Ҡыш бабайға, шыршыға табынмай, ә Шыршы байрамын яраталар, бүләк көтәләр. Яҡындарға, туған-тыумасаға йөрөшөү, һаулыҡ, яҡшы теләк теләү, бүләк бирешеү бер ҙә насар түгел. Туғанлыҡ ептәрен нығытыр өсөн аралашырға, ата-әсәләрҙең хәлдәрен белешеп ҡайтырға тағы бер сәбәп кенә ул был байрам. Яңы йылды күпселек араҡы эсеп үткәрә, әллә нисә көн айнымай, бахмурҙан ыҙа сигәләр, тигән ғәйепләү ҙә бар. Эсергә теләгән кеше сәбәп табып, һәр көн эсә: берәйһе тыуһа ла, үлһә лә, хатта, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ҡорбан байрамында ла, Ураҙа ғәйетендә лә ауыҙына хәмер алыусылар бар. Эсмәгән кеше бер ҡасан да эсмәй: байрам булһа ла, булмаһа ла. Байрамға ҡаршы көрәшкәнсе, наркоманияға, эскелеккә, терроризмға ҡаршы көрәшергә кәрәк. Кем Яңы йылды үткәрергә теләмәй, өйҙә ятһын, сәйәхәт ҡылһын йә ял итһен. Һәр нәмәнән насарҙы эҙләмәйек!

Башҡорттар күп йылдар көрәштә үткәргән. Әлеге ваҡытта ла проблемаларыбыҙ етерлек. Проблемаларыбыҙҙы хәл иткәндә, халҡыбыҙ киләсәге өсөн көрәшкәндә лозунгыларыбыҙҙы дөрөҫ төҙөргә өйрәнәйек: беҙ бер кемгә лә, бер нәмәгә лә ҡаршы түгел, беҙ - яҡлы!

- Беҙ башҡорт телен һаҡлап ҡалыу яҡлы!
- Беҙ халыҡтар дуҫлығы яҡлы!
- Беҙ Ҡуштау һәм башҡа тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлап ҡалыу яҡлы!
- Беҙ айыҡ тормош яҡлы!
- Беҙ Яңы йылды айыҡ ҡаршылау яҡлы!

**Ҡаршы** һүҙен үҙебеҙгә ҡаршы йүнәлтмәһендәр өсөн, үҙебеҙҙе яҡларлыҡ **яҡлы** һүҙен ҡулланайыҡ!

Үҙемә килгәндә, Яңы йыл байрамын мин көтөп алам - каникул бит! Ошо көндәрҙе өйҙә ғаиләм, балаларым менән бергә үткәреүгә ҡыуанам, балыҡ ҡармаҡлайым, ял итәм. Һәр нәмәнән ҡыуаныс табып, араҡы эсмәй генә лә байрамдарҙы күңелле үткәреп була!

**Фәнүр ШАҺИЕВ.
Учалы районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2020 йылда Башҡортостан райондарына "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" программаһының социаль ҡурҙым килешеүе буйынса граждандарға биреү өсөн торлаҡ төҙөүгә 84,3 миллион һум субсидия бүленде. Шуның 67,2 миллион һумы - федераль бюджеттан. Был республикала йәшәгән 61 ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртырға мөмкинлек бирә, тип белдерҙеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Башстат быйыл Башҡортостанда донъяға килгән сабыйҙарҙың иң популяр исемдәрен иғлан итте. Малайҙарға йышыраҡ - Әмир, ә ҡыҙҙарға Арина тип исем ҡушҡандар. 2020 йылдың 10 айында республикала 34 408 бала тыуған, был 2019 йылдың ғинуар-октябренә ҡарағанда 2,9 процентҡа кәмерәк. Статистиктар мәғлүмәте буйынса, төбәктә, тотош илдәге кеүек үк, әсәлектең "өлкәнәйеү" тенденцияһы дауам итә. Әгәр элекке йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар күберәк 20-24 йәштә бала тапһа, 2019 йылда әсә булыу күпселек осраҡта 25-29 һәм 30-34 йәш төркөмдәренә тура килә.

✓Владимир Путин 17 декабрҙә уҙған матбуғат конференцияһында балалы ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү тураһында бик күп һорау биреүҙәрен билдәләне. "Быйыл сикләүҙәр арҡаһында балалар өсөн шыршылар булмай. Ә байрам киләсәккә өмөт, ышаныс менән бәйле. Беҙ дәүләт балаларға бүләк эшләй тип һөйләштек. Ете йәшкә тиклемге балалары булған бөтә ғаиләләргә бишәр мең һум түләйбеҙ, был аҡса ғаиләләге һәр балаға бирелә", - тип белдерҙе Рәсәй Президенты. Ғаиләләр ошо аҡсаны байрамға хәтлем алырға тейеш.

✓2021 йылдың башында Рәсәйҙә коронавирустан миллион доза вакцина була, тине Владимир Путин үҙенең матбуғат конференцияһында. Коронавирустан вакцина етештереү өсөн яңы заводтар төҙөргә һәм ҡеүәттәрҙе арттырырға кәрәк, тине ул. Уның һүҙҙәренсә, бөтәһенә лә прививка эшләү - коронавирус менән көрәшеү өсөн кәрәкле сара, тап вакцина коллектив иммунитет булдырырға тейеш.

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһының күсмә бригадаһы урындағы белгестәргә яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәштә ярҙам күрһәтеү өсөн Камчатка крайына юлланды. Бригада составында - ковид-госпиталдәрҙә эш тәжрибәһе булған анестезиолог-реаниматологтар, урта медицина персоналы, бөтәһе 11 кеше. Бригада Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һорауы буйынса төҙөлгән.

ҠЫҪҠАСА

# БАЙРАМ МӨҒЖИЗӘҺЕ

**"Теләктәр шыршыһы " Бөтә Рәсәй акцияһының маҡсаты - етем балаларҙың, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларҙың һәм һаулыҡ үҙенсәлектәре булған оло йәштәгеләрҙең Яңы йыл хыялдарын тормошҡа ашырыу. Акцияға быйыл 5 декабрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин старт бирҙе. Ғаризалар 16 ноябрҙән 15 декабргә тиклем ҡабул ителде.** Акцияға ҡушылып, Башҡортостан Башлығы "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ҡуйылған "Теләктәр шыршыһы"нан өс шар һайлап алып, ике үсмерҙең, хаҡлы ялдағы ханымдың хыялын тормошҡа ашырасаҡ. Туғыҙ йәшлек Михаил Манулин - электрон микроскоп, ә 15 йәшлек Роман Щекатуров өс тәгәрмәсле велосипед, 65 йәшлек Татьяна Буланина күптән ҙур экранлы планшет тураһында хыялланa.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Дәүләт Советының яңыртылған составына инде. Был турала Президент Владимир Путиндың указы баҫылып сыҡты.** Дәүләт советы составына 104 кеше инде һәм Президент үҙе уның рәйесе булды. Төбәк башлыҡтарынан тыш унда ил премьер-министры Михаил Мишустин, Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин, Федерация Советы спикеры Валентина Матвиенко, президент администрацияһы башлығы Антон Вайно һәм уның беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко, округтарҙағы тулы хоҡуҡлы вәкилдәр индерелде. Яңыртылған исемлектә шулай уҡ фирҡә етәкселәре Сергей Миронов, Владимир Жириновский, Геннадий Зюганов, Сергей Неверов һәм Рәсәйҙең Бойондороҡһоҙ профсоюздар федерацияһы рәйесе Михаил Шмаков, Рәсәй Сәнәғәтселәр һәм эшҡыуарҙар союзы президенты Александр Шохин бар. Законға ярашлы, Дәүләт советы - ул дәүләт етәксеһе тарафынан власть органдарының килешеп эшләүен тәьмин итеү, РФ тышҡы һәм эске сәйәсәтен, илдең социаль-иҡтисади үҫеш йүнәлештәрен билдәләү маҡсатында төҙөлгән конституцион дәүләт органы.

✓ **Башҡортостан мәктәптәре дөйөм хаҡы 10 миллион һумлыҡ техник ҡорамалдар менән йыһазландырыла.** Рус һәм башҡорт теле, әҙәбиәте кабинеттарына ноутбуктар, проекторҙар, интерактив таҡталар тапшырыла. Премьер-министр Андрей Назаров ҡул ҡуйған тейешле бойороҡ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Республика районларында (Әбйәлил, Әлшәй, Бөрйән, Белорет, Йылайыр, Яңауыл һәм башҡалар) һәм ҡалаларында (Ағиҙел, Нефтекама, Салауат, Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Өфө) урынлашҡан мәктәптәр техник ҡорамалдар менән тәьмин ителә. Исемлектә бөтәһе 50 мәктәп. Документҡа ярашлы, дәүләт милке муниципалитеттарға бушлай бирелә. Ҡорамалдарҙың дөйөм хаҡы - 10 миллион һум тиерлек. Һәр мәктәпкә 187 меңдән 196 мең һумға тиклем аҡса бүленә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СТӘРЛЕТАМАҠТА...

**19 декабрҙә Стәрлетамаҡта яңы клиника-диагностика үҙәге ишектәрен асты. Унда төҙөлөш 10 октябрҙә башланып, тәүлек әйләнәһенә алып барылды.**



Тантанала ҡатнашып, төҙөүселәрҙе һәм медицина персоналын Республика Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Евгений Камкин, Федерация Советының Социаль сәйәсәт буйынса комитет рәйесенең беренсе урынбаҫары Валерий Рязанский, БР Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров, БР Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин тәбрикләне. "Кешеләр ғүмеренә ниндәйҙер хәүеф янағанда беҙ тиҙ генә тупландың, компетентлы рәүештә, сифатлы һәм күркәм заманса дауаханалар төҙөй алабыҙ. Йыл ауыр булыуға һәм бюджет көсөргәнеш кисереүгә ҡарамаҫтан, бер ваҡытта ла был тиклем һаулыҡ һаҡлау объекттарын сафҡа индергәнебеҙ булманы: быйыл онкодиспансерҙың хирургия корпусын тапшырҙыҡ, кардиодиспансер төҙөлөшө әүҙем бара, Балалар гематологияһы һәм онкологияһы үҙәген, Республика клиник дауаханаһы поликлиникаһын һәм районда ике поликлиника төҙөй башланыҡ, 100 фельдшер-акушерлыҡ пункты төҙөнөк, хоспис төҙөйбөҙ. Был - һаулыҡ һаҡлау, тәү сиратта, бөгөн коронавирус менән көрәш фронтында алғы сафта торған табиптар алдындағы беҙҙең бурысыбыҙ. Алда тағы ла ҙурыраҡ пландар тора. Рәсәй Президенты һәм Республика Хөкүмәте ҡарары менән Башҡортостан 2025 йылға тиклем беренсел медицина звеноһын үҫтереүгә 16 миллиард һум саһаһы аҡса аласаҡ. Был һаулыҡ һаҡлау системаһын һиҙелерлек яҡшыртасаҡ. Беҙ пандемиянан көсһөҙләнеп түгел, киреһенсә, көслө һәм аяҡта ышаныслы баҫып тороп сығырға тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров һәм рәхмәт белдереп, бер төркөм медицина хеҙмәткәрҙәренә, төҙөүселәргә дәүләт наградалары тапшырҙы.

Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Евгений Камкин яңы инфекция үҙәгенең заман талаптарына яуап биреүен һәм был проект дауаханалар төҙөүҙә, бигерәк тә инфраструктура бөтөнләй булмаған урындарҙа, башҡалар өсөн өлгө проект булыу ихтималлығын белдерҙе. Әйткәндәй, әле төҙөлөш эштәре барған ваҡытта уҡ республика Башлығы Радий Хәбиров: "Беҙҙең өсөн был ҙур тәжрибә. Әгәр объектты әлекке ысулдар менән төҙөһәк, кәм тигәндә ике йыл ваҡыт китер ине. Был үҙәк технологик яҡтан ҡатмарлыраҡ, унда операция һәм бала табыу блоктары, балалар реанимацияһы бар. Проект менән 10 субъект ҡыҙыҡһына. Силәбеләр төҙөнө, ульяновскиҙар тәжрибә өйрәнергә килде. Беҙҙең ҡурай бөтә ил буйынса таралacaҡ, тип уйлайым", - тигәйне.

Яңы комплекста медицина персоналы өсөн ҡунаҡхана тибындағы ятаҡ төҙөлгән, ул 50 кешегә иҫәпләнгән. Ҡала хакимиәте табиптар өсөн 10 хеҙмәт фатиры әҙерләгән. Санитар авиацияһы өсөн вертолет майҙансығы бар, ул мотлаҡ сертификацияланырға тейеш. Госпиталдең дөйөм койка ҡеүәте - 60 бокс һәм 14 реанимация боксы (шул иҫәптән 3-һө - балалар, 9-ы - ололар, 1-һе - операциянан һуң). Инфекция бүлеге тура урамға сығыусы, 2 шлюз, йыуыныу бүлмәһе булған мельцер бокстары менән йыһазландырыла. Бында яңы коронавирус инфекцияһы менән зарарланған сирлеләргә хирургия һәм бала табыу ярҙамы күрһәтеләсәк. Үҙәк составына акушер-гинекология, операция, үҙәк стерилләү, ҡабул итеү-диагностика бүлектәре, бактериолог лаборатория һәм дарыуханa инә. Штат режимында эшләгәндә 120 койка-урын буласаҡ, шулай уҡ өҫтәмә рәүештә 260 урын булдырыу мөмкинлеге, ғәҙәттән тыш хәл шарттарында 100 процент кислородҡа тоташтырыу менән 312 койка-урынга тиклем арттырыу ҡаралған. Ярҙамсы биналар каркас технологияһы модуле буйынса йыйылған. Биналарҙың хеҙмәт мөҙҙәте - 50 йыл һәм унан да күберәк. 21 декабрҙә дауалау учреждениеһы үҙенең тәүге пациенттарын ҡабул итте.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# СПОРТ САРАЛАРЫ

**Яңы 2021 йыл алдынан һәм ғинуар байрамдарында Башҡортостанда спорт саралары үткәрелә. Республиканың Спорт министрлығы кәмендә туғыҙ сара, шул иҫәптән дүрт тематик көн ойошторорға ниәтләй.**

"Төп өлөшө тыштағы майҙансыҡтарҙа йәки 30-ға яҡын кеше ҡатнашҡан биналарҙа уҙғарыла", - тине Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов. 27 декабрҙә Өфө тәүге тапҡыр Эльбрус Ниғмәтуллиндың көс экстримы буйынса "Урал батыр" асыҡ республика турнирын ҡабул итә. Баш ҡалабыҙға Ҡурған, Мурманск, Силәбе, Липецк, Белгород, Пенза өлкәләренән, Мәскәүҙән, Ханты-Манси автономиялы округынан һәм Башҡортостандан 12 көслө спортсы килә. Ярыштар тура эфирҙа күрһәтелә. Ошо уҡ ваҡытта республиканың һәр районында "Батырҙар көнө" ойошторола. Ҡатнашыусыларҙы ҡар һуғышы, "Тау батшаһы" һәм башҡа уйындар көтә. 1 ғинуарҙа Өфөлә "Вәғәҙәләр йүгереүе" башлана. Арауыҡтар 100-ҙән алып 2021 метрға тиклем тәшкил итә. Шулай уҡ "Башҡорт (скандинав) йөрөшө көнө" уҙғарыла. 3 ғинуар - ҡышҡы уйындар көнө: хоккей, ҡышҡы футбол, саңғы ярыштары, ҡышҡы балыҡ тотоу, "Атай, әсәй, мин - спорт ғаиләһе", 13 ғинуарҙа онлайн форматта шахмат буйынса "Чемпиондар чемпионаты" асыҡ республика турниры була. Барлыҡ сараларҙа ла ковидҡа ҡаршы инспекторҙар эшләй, хәүефһеҙлек саралары күрелә.

# ТҮЛӘҮҺЕҘ ДАРЫУҘАР...

**Башҡортостанда COVID-19 һәм дауахананан тыш пневмонияны өйҙә дауалау өсөн түләүһеҙ йыйылмаға ингән дарыуҙар исемлеген иғлан иттеләр.**

Һаулыҡ һаҡлау министрлығында аҙна һайын үткән брифингта министр урынбаҫары Ирина Кононова хәбәр итеүенсә, был йыйылма "яңы коронавирус инфекцияһы" диагнозы раҫланған һәм булыуы ихтимал пациенттарға бирелә. Сирле кеше медикаменттарҙы медицина хеҙмәткәренә (врачҡа, фельдшерға) барған ваҡытта йәки барып ҡайтҡас 24 сәғәттән дә һуңға ҡалмай алырға тейеш. Шулай уҡ препараттарҙы ковид менән ауырыған һәм антиматдәләре булған ирекмәндәр килтерә ала. Препаратты, пациенттың йәшенә, ауырыу төрөнә һәм булған сирҙәрен иҫәпкә алып, дауалаусы врач тәғәйенләй. Ковидҡа ҡаршы йыйылма составына ошо дарыуҙар ингән: вирусҡа ҡаршы препараттарҙан "Умифеновир" (өс ҡап) йәки "Фавипиравир" (ике-өс ҡап), "Гидроксихлорохин" (бер ҡап), "Интерферон" (танауға тамыҙа торған). Ауырыуҙың хәле уртаса йәки ауыр булһа, "Ривароксабан", йә "Апиксабан". Айырым осраҡта унда глюкокортикоид кеүек гормональ препарат, температура булғанда "Парацетамол" тәғәйенләнә. Бактериаль инфекция барлыҡҡа килгәндә бактерияға ҡаршы препараттар билдәләнә. "Дарыуҙарҙың барыһы ла бик етди, шуға күрә медикаменттарҙы ҡабул иткәндән һуң күҙәтелгән һәр үҙгәреш тураһында медицина ойошмаһына йәки дауалаусы врачҡа әйтергә кәрәк", - тип иҫкәртә медиктар.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостандың баш ҡалаһында Яңы йыл сараларының интерактив картаһы эшләй башланы. Унда байрам уңайынан ойошторолған төрлө күңел асыуҙарҙың ваҡыты һәм уҙғарыу урыны күрһәтелгән. Өфө мэрияһынан хәбәр итеүҙәренсә, 25 декабрҙән 14 ғинуарға тиклем бөтәһе лә тематик көндәр форматында үткәрелә һәм календарҙа сағылдырыла.

✓ Өфөнөң В.И. Ленин, Салауат Юлаев һәм Совет майҙандарында төп шыршылар, шулай уҡ район майҙансыҡтарында боҙ ҡаласыҡтары асыҡ. Төп концерт 31 декабрҙә ҡала Советы алдындағы Ленин майҙанында ойошторола. Ә төнгә 2-лә майҙанда фейерверк була. Мэрияла билдәләүҙәренсә, быйыл барлыҡ саралар 2021#беҙһинекөттек слоганы менән уҙғарыла.

✓ 31 декабрҙән 2021 йылдың 1 ғинуарына ҡарай төндә Башҡортостандың баш ҡалаһында йәмәғәт транспорты таңғы 4-се яртыға тиклем эшләй. Транспорт һәм бәйләнеш идаралығы етәксеһе урынбаҫары Владимир Петров хәбәр итеүенсә, 31 декабрҙә киске сәғәт 10-дан 1 ғинуар таңғы 4-кә тиклем 20 минут ара менән 290-сы яңы йыл маршруты хәрәкәте ойошторола. Ҡала Советы алдындағы майҙанда байрам салюты була. Унан һуң өфөләрҙе "Кала Советы" һәм "Дәүләт цирҡы" туҡталыштарында автобустар көтә. Яңы йыл байрамдарында Өфөлә йәмәғәт транспорты ял көнө графигы буйынса йөрөй.

✓ Синоптиктар Яңы йыл төнөндә Башҡортостандың баш ҡалаһында һауа торошона яҡынса фараз менән таныштырҙы. "Гисметео" порталы мәғлүмәттәре буйынса, 2020 йылдың 31 декабренән 2021 йылдың 1 ғинуарына һауа температураһының түбәнәйеүе көтөлә. Термометр бағанаһы -22 градусҡа тиклем төшә. Ҡар көтөлмәй. 2021 йылдың беренсе көнөндә -10 градусҡаса йылыта. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, уҙған Яңы йыл төнө күпкә йылыраҡ булды: төндә -15, көндөҙ 0 градус.

✓ Өфөлә киноға төшөргә теләгән 8-13 йәшлек малайҙарҙы кастингҡа саҡыралар. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған "Рәми. Шағир көндәлеге" тулы метражлы нәфис фильмын билдәле Өфө режиссеры Булат Йософов төшөрә. Кастингтың беренсе этабы онлайн форматта уҙғарыла. Ғаризалар 10 ғинуарға тиклем ҡабул ителә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Өфөлә барлығы 2454 иҫәпсе һәм 350 инструкторҙың эшмәкәрлеген тәьмин итеү өсөн 350 иҫәп алыу участкаһын ойоштороу күҙаллана. Иҫәпселәр 49 188 торлаҡ йортто урап сығырға тейеш.*

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# БАЙРАМДАРҘА...

## янғындарҙан һаҡланайыҡ!



**Ҡала хакимиәтендә видеоконференция форматында үткән оператив кәңәшмәлә Өфө ҡәлғәһе ойошторолоуға 450 йыл тулыу, алда торған халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы менән бер рәттән, Яңы йыл байрамдарын хәүефһеҙ үткәреү мәсьәләләре лә ҡаралды.**

Тарихтан мәғлүм булыуынса, Өфө ҡалаһын бик күп этаптарға бүлеп ҡарарға мөмкин, ә инде уның тап Өфө ҡәлғәһе булып төҙөлөүенә 2024 йылда 450 йыл тула. Ошо осорҙа ул илдең Рәсәй иҡтисадына ҙур өлөш индереүсе эре сәнәғәт, эшлекле һәм спорт үҙәктәренең береһенә, эре халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй сараларын үткәреү урынына әүерелде. Әлеге ваҡытта ҡала хакимиәтендә Ойоштороу комитеты төҙөлгән һәм байрам сараларын әҙерләү һәм үткәреү буйынса эш төркөмө раҫланған, саралар планы проекты эшләнгән. Уға төҙөкләндереү, ҡаланың тышҡы йөҙөн камиллаштырыу, социаль һәм инфраструктура объекттары төҙөү, ҡала өсөн мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү, уның халҡы, тарихи урындары, объекттары һәм ваҡиғалар менән бәйле проекттарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән саралар инә. Пландың тәҡдим ителгән саралары республиканы социаль-иҡтисади үҫтереүҙең 2024 йылға тиклемге стратегик йүнәлештәре һәм милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу менән дә бәйле. 32 объект буйынса проект-смета документацияһы әҙер. Шулай уҡ инвесторҙар иҫәбенә төҙөү күҙалланған объекттар исемлеге лә бар, уларҙың һаны арта бара. Һәм, әлбиттә, күп һанлы Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге мәҙәни-спорт саралары ла планлаштырыла. Был хаҡта үҙенең докладында хакимиәт башлығы урынбаҫары Николай Фадеев белдерҙе. Әйткәндәй, Өфө ҡәлғә-ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейын үткәреү буйынса федераль кимәлдә лә ойоштороу комитеты төҙөлә, яҡын арала бындай ойошма республика кимәлендә лә булдырыласаҡ.

Ә әлегә ауыр һәм ҡатмарлы осорҙа алда торған байрамдарҙы иҫән-имен үткәреү мөһим, сөнки, тәжрибә күрһәтеүенсә, Яңы йыл байрамдарында янғын хәүефе арта. Шуға күрә ҡалала 25 ноябрҙән 10 ғинуарға тиклем "Яңы йыл" профилактика сараһы ойошторолған. Был хаҡта Өфө ҡалаһының Янғын һағы идаралығы начальнигы Шамил Тоҡомбәтов белдерҙе. Әлеге ваҡытта байрам үтәсәк 393 урында профилактика саралары үткәрелгән, 183 объект айырым иғтибарға алынған, объекттарҙың хеҙмәтләндереүсе персоналы менән 407 инструктаж, шул иҫәптән күнекмә эвакуацияһы, үткәрелгән. Янғын хәүефһеҙлеге саралары тураһында агитация материалдары таратылған.

Бигерәк тә пиротехника продукцияһын һаҡлау һәм һатыу урындарына иғтибар бирелә, был йүнәлештә тикшереү эше дауам итә. Баҡсалар, шәхси йорттар булған урындар иғтибар үҙәгендә тора. Барлыҡ йүнәлештәрҙәге эшмәкәрлекте көйләү өсөн штаб төҙөлгән.

Байрамдар - шулай уҡ кешеләр травмпункттарға йышыраҡ мөрәжәғәт иткән осор. Шуға ла улар Яңы йыл каникулдарында ғәҙәти режим буйынса эшләйәсәк (был хаҡта мәғлүмәтте хакимиәттең рәсми сайтында табырға мөмкин). Тик 31 декабрҙә поликлиникаларҙың бер сәғәткә иртәрәк ябылыуын да онотмағыҙ. Ә инде БР һаулыҡ һаҡлау министрының бойороғона ярашлы, 19 декабрҙән иртәнге сәғәт 8-ҙән алып 2021 йылдың 11 ғинуар иртәһенә тиклем министрлыҡтың һәм медицина ойошмаларының етәкселеге тәүлек әйләнәһенә дежурҙа буласаҡ, шулай уҡ тәүлек әйләнәһенә эшләүсе дарыуханалар ҙа эш режимын үҙгәртмәйәсәк. Әлбиттә, бөгөнгө шарттарҙа былай ҙа байрамды күп осраҡта эштә ҡаршылаған һәм үткәргән медицина хеҙмәткәрҙәре алғы һыҙыҡта ҡаласаҡ. Иң мөһиме - башҡалар байрамды улар эргәһендә үткәрмәһен һәм уларға өҫтәмә мәшәҡәт тыуҙырмаһын. Үҙебеҙҙең һәм яҡындарыбыҙҙың сәләмәтлеген һаҡлайыҡ, Яңы йылға яңы өмөттәр менән һау-сәләмәт булып аяҡ баҫайыҡ!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# МАШИНАҢ ҠАЙҘА ТОРА?

**Өфөнөң тарихи үҙәгендә түләүле парковка урындарының берҙәм системаһын булдырыу 63 миллион һумдан 125 миллион һумға тиклем сумма менән баһалана. Был билдәне ниндәй материалдан һалыуға (буяу йәки термопластик) һәм парковка өсөн ниндәй материал ҡулланыуға бәйле.**

БР транспорт һәм юл хужалығы министры Алан Мирзаев белдереүенсә, түләүле парковка урындары проектын тормошҡа ашырыуҙың оптималь варианты булып махсус муниципаль оператор булдырыу тора. Был финанстар ағымын контролләү һәм килемде ҡаланы үҫтереүгә йүнәлтеү мөмкинлеген бирәсәк.

Парковка ҡағиҙәләрен регламентлаусы яңы закон БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тарафынан быйыл 29 октябрҙә ҡабул ителгәйне. Уның төп бурысы - ҙур трафиклы автоюлдарҙы бушатыу, юлдарҙың беренсе һыҙатын көн буйы биләп ултырған машиналарҙан азат итеү. Документҡа ярашлы, көсөргәнешле территорияларҙа тәүге 20 минут парковка бушлай, әгәр территория спорт, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт ойошмалары, дәүләт хеҙмәте күрһәтеү, дәүләт власы һәм урындағы үҙидаралыҡ органдары учреждениелары эргәһендә икән, бер сәғәт бушлай парковкаланырға мөмкин. Парковка өсөн бары тик эш көнөндә генә түләнәсәк. Киске 9-ҙан иртәнге 7-гә тиклем, шулай уҡ ял, байрам көндәрендә үҙәктә парковка бушлай буласаҡ. Шулай уҡ айырым категорияға инеүсе граждандар ҙа транспорт сараларын бушлай ҡалдыра ала. Был категорияға тағы ла күп балалы ғаиләләр һәм электромобилдәр хужалары индерелеүе ихтимал.

*ҠЫҪҠАСА*

# КАНАТ ЮЛЫНАН...

✓ **Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүҙең 450 йыллығына баш ҡалала өс - туристик һәм алты транспорт канат юлдары эшләнәсәк.** Хөкүмәт премьер-министры Андрей Назаров белдереүенсә, фуникулерҙар Ағиҙел йылғаһы ярынан өс йүнәлештә хәрәкәт итәсәк: Салауат Юлаев һәйкәленә тиклем, Ленин урамы сатына һәм Салауат Юлаев баҡсаһына. Бер транспорт канат юлы үҙәкте Дим районы менән тоташтырасаҡ. Икенсе линия - Өфөнөң таулы өлөшөнән (К. Маркс урамы һәм Ибраһимов бульвары районы) тимер юлы вокзалы аша Затонғаса. Өсөнсөһө - Ғафури паркынан Ағиҙел йылғаһы аръяғына тиклем. Тағы ике канат юлы Коммунистик урамды Миловка, Романовка ауылдары районының рекреацион зонаһы, Инорс һәм Һупайлы биҫтәләре менән тоташтырасаҡ. Өсөнсө линия төҙөлөп ятҡан Көнсығыш юлы эргәһенән үтәсәк.

✓ **Бер аҙнала Башҡортостанда йәшелсә, йомортҡа, эремсек ҡиммәтләнгән, шәкәр арзанайған, тип хәбәр итте Башстат.** Мәғлүмәттәр буйынса, республикала айырыуса яңы өҙөлгән ҡыярға 20,5 процентҡа, помидорға 11 процентҡа, йомортҡаға 5,6 процентҡа тиерлек хаҡ артҡан. Ҡиммәтләнгән аҙыҡ-түлек исемлегендә шулай уҡ кишер, майлы эремсек, тоҙ, сосиска, сарделька, алма, дөгө, кәбеҫтә, башлы һуған, карамель, туңдырылған балыҡ, вермишель, үҫемлек майы, шоколад кәнфите, балалар өсөн йәшелсә һәм емеш-еләк консервалары, маргарин, ҡаймаҡ, һөт, тауыҡ, икмәк, ит консервалары, он, бешерелгән колбаса, макарон һәм печенье бар. Башҡортостанда күҙләнсек сырҙар арзанайған аҙыҡ-түлек исемлегендә беренсе урынды биләй. Ҡарабойҙай ярмаһы, аҡ май һәм шәкәр, сусҡа ите, ярым ыҫланған һәм бешерелгән-ыҫланған колбаса, картуф, балалар өсөн ит консервалары, тары ярмаһы һәм ҡара сәй арзанайған.

✓ **Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында баш ҡала нисек ҡатнашасаҡ?** Өфөлә барлығы 2454 иҫәпсе һәм 350 инструкторҙың эшмәкәрлеген тәьмин итеү өсөн 350 иҫәп алыу участкаһын ойоштороу күҙаллана. Иҫәпселәр 49 188 торлаҡ йортто урап сығырға тейеш. Шулай уҡ граждандар иҫәп алыуҙы үҙаллы үтә ала. Бының өсөн Госуслуги сайтына теркәлергә һәм иҫәп яҙмаһы булдырырға, йәғни фамилия, исем, кеҫә телефоны номеры, шулай уҡ паспорт һәм СНИЛС мәғлүмәттәрен индерергә кәрәк. Тултырылған мәғлүмәт РФ Пенсия Фонды һәм Федераль миграция хеҙмәте базаларында тикшерелә. Тикшереү үткәндән һуң, гражданин үҙенең шәхесен раҫларға тейеш. Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек сиктәрендә әле баш ҡалала иҫәп алыусы булып ҡатнашырға теләүселәрҙе йыялар. Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәтте 8-917-341-23-02 телефоны буйынса шылтыратып йәки Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың рәсми сайтында, социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәләрендә, Росстат һәм Башҡортостанстат сайттарында алырға мөмкин.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һалҡын тейеүҙән

❖ Ҡарағайҙың йәш үренделәре һәм имбирҙан торған ҡатышма ярҙам итә. Үренделәр яҙ айында йыйып алына, улар йомшаҡ, һығылмалы һәм тәме әскелтем була. Дауаны әҙерләү өсөн 300 грамм имбир тамырын яҡшылап йыуырға, ләкин ҡабығын әрсемәҫкә. Уны ит турағыс аша үткәрергә, йәки ваҡ ҡына итеп турарға. 2 ҡалаҡ бал өҫтәргә, яҡшылап болғатырға һәм банкаға һалырға. Ә ҡарағай үренделәрен йыуып, бер аҙ киптерергә һәм ит турағыстан ярты литр банка тулырлыҡ итеп үткәрергә. 3 ҡалаҡ бал йәки шәкәр өҫтәп, улар тулыһынса ирей бөткәнсе бүлмә температураһында торорға. Шунан ике ҡатышманы бергә ҡушып, банкаларға һалырға һәм һыуытҡысҡа һаҡларға ҡуйырға. Ошо рәүешле әҙерләнгән дауаны һыуыҡ тейеүҙең тәүге билдәләре һиҙелгәс тә, йүтәлләтә башлаһа, тамаҡ ҡымырйыһа көнөнә 2 тапҡыр берәр балғалаҡ ашап, аҙағынан һыу эсергә. Ауырыуҙарҙы иҫкәртеү өсөн иртәнсәк ас ҡарынға 1-әр балғалаҡ ашарға кәрәк. Ҡыш дауамында ҡулланғанда бигерәк тә һөҙөмтәле, иммунитетты нығыта.

## Ангина

❖ Йүкә сәскәһе һәм япраҡтарынан әҙерләмәнең 1,5 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтеп, һөҙөргә. Йоҡлар алдынан йылы көйөнсә эсергә. Ошо уҡ төнәтмәгә 5 грамм сода өҫтәп, тамаҡты мөмкин тиклем йыш сайҡатып торорға.

## Хәлһеҙлектән

❖ Ҡуянтубыҡ (пастернак) тамырын ваҡлап, 2 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт тотҡас, һөҙөргә. Дүрткә бүлеп, ашарҙан алда эсергә. Дауаланыу осоро - хәл яҡшырғанға тиклем.

❖ Бер тигеҙ күләмдә бал һәм әстерхан сәтләүеген бутап ашарға. Йәки ҡырғыстан үткәрелгән торма ашарға. Был файҙалы аҙыҡтарҙың береһен 3-4 көн рәттән иртәнге һәм төшкө аш мәлендә ашап, аҙағынан бер стакан һыу эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАҢДАН ЙӨН ТАП!*



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Бындай төр аппликация киземамыҡ һәм буҫтау туҡымаларҙа ғына түгел, тире әйберҙәрҙә лә ҡулланылған. Сәрмә һәм кәшендәрҙең өҫкө өлөшөн төрлө төҫлө өсмөйөш һәм ҡыя шаҡмаҡтарҙан торған бау биҙәгән. Улар туй йолаларында күстәнәс һәм бүләк итеп ҡулланылған.



*Аппликацияһы буҫтауҙан эшләнгән туй күстәнәстәре өсөн кәшен (БР, Бөрйән районы). 1976*

Барлыҡ, тип әйтерлек туҡылған әйберҙәрҙең ҡаймаһы, сите, төҫлө ҡаймаһы булған. Ике-өс рәт итеп тегелгән төрлө төҫтәге һыҙаттар һәм таҫмаларҙың тылсымлы мәғәнәһе булған, күрәһең. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, төрлө төҫлө ҡыйыҡтар һәм һыҙаттар кейемдә лә булған. Күлдәктең төрлө таҫмаларҙан тегелгән иҙеүе, итәгендәге ҡыршауҙар (сыҙыҡ, таҫма тип тә йөрөтәләр), ҡатын-ҡыҙҙарҙың һыҙатлы итеп тегелгән түшелдереге (күкрәксә) - бындай биҙәү алымының киң таралған миҫалдары. Улар араһына күлдәк төҫөнән айырылып торған ҡуша тегелгән билбау һәм кештәкте лә индереү урынлы. Көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының байрамса өҫ кейеменең (елән, сәкмән) еңдәре һәм салғыйҙары төҫлө буҫтау һәм уҡа менән киң итеп ҡаймаланған. Камзул һәм баш кейемдәрен уҡа менән биҙәү ҙә шул ғәҙәттән килә. Күн аяҡ кейеменең өҫкө өлөшөндәге тулаға ла төҫлө таҫма баҫҡандар. Һыҙатлы декор башҡарыу техникаһы буйынса аппликацияға ҡараған, әммә ҡырҡылған туҡыма киҫәктәрен ҡулланыу һәм сағыу күп төҫлөлөк уны ҡорама мозаикаһына яҡынайтҡан. XIX быуат аҙағы - XX быуат башында аппликацияның был төрө Урал аръяғының көнсығышында яҡшы үҫешкән, унда күлдәк һәм алъяпҡыстарҙың итәгенә ике ҡатлы кәкерсәктәр һәм уйымдарында оя биҙәкле үремдәр рәүешендәге эре нағышлы ҡыршауҙар тегелгән. Оя биҙәктәрҙең мәғәнәүи аңлатмаһына ҡарағанда ("бүре эҙе", "алма", "күбәләк"), был һынлы сәнғәттең башланғысы булған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ӘЙҘӘГЕҘ, УЙЛАНАЙЫҠ!*

# КҮҢЕЛ ТЫНЫСЛЫҒЫ НИМӘЛӘ?



**Был ваҡиғаға байтаҡ ваҡыт үтһә лә, йыл һайын Яңы йыл алдынан иҫкә төшмәй ҡалғаны юҡ.**

Байрам алды көндәре - һәр кемдең күңелле мәшәҡәтле осоро. Яҡындарға бүләк әҙерләү, табынға - һый, ҡунаҡтарға күстәнәс алыу кеүек хәстәр менән йүгергеләгән ваҡыт. Сиратта тороу күптән онотолһа ла, халыҡ артыҡ ығы-зығыһыҙ ғына ҡулындағы һатып алынасаҡ әйберҙәрҙең исемлеген барлай.

Шул саҡ сираттағыларҙың иғтибарын йәлеп итеп, ишекте шар асып, йылҡылдап торған ҡара төлкө тиреһенән тегелгән тун кейгән сибәр ханым килеп инде. Кешенең күплеген күреп, кире сығырға уҡталғайны, мине күреп, туҡталды. Күптәнге таныштарбыҙ беҙ. Бер ваҡытта институтта уҡыныҡ. Мәктәптә оҙаҡ тотҡарланманы ул. Тормош иптәше менән үҙ эшен асып, тиҙ арала алып-һатыу эшенең яйына төшөнөп, киң ҡолас йәйеп эшләне лә китте юғары белемле педагог. Ең һыҙғанып эшләргә бәләкәйерәк типме, бер нисә йылдан ҙурыраҡ ҡалаға күскәйнеләр. Әле әсәһен күрергә, байрам менән ҡотларға килеүе икән, магазинға күстәнәс алырға ғына һуғылған.

Тәүҙә ул бизнес өлкәһендәге уңыш-ҡаҙаныштары менән уртаҡлашты. Эшһөйәр, әүҙем, егәрле кешенең эше ҡайҙа ла алға бара инде: баш ҡалала бер нисә сауҙа нөктәһе асҡан, тиҫтәнән ашыу кешегә эш урыны булдырған.

- Тик үҙебеҙҙең милләттәштәрҙе генә эшкә алдым. Улар ышаныслы. Алдашыу, мутлашыуҙы ла белмәй, - ти ул. - Кеше менән дә ипле, итәғәтле.

Аҡса кешене боҙа, тиһәләр ҙә, танышымдың телһөйәр, илһөйәр булып ҡалыуы һоҡландырҙы. Бала-сағаһы имен, хәләле лә эшендә лә, өйөндә лә ярҙам итергә ашығынып тора. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтәһе лә ал да гөл! Шулай ҙа бизнес-вумендың күңелен ниҙер өйкәгән кеүек, үҙен тыныс һыҙ тота, һөйләгән һүҙе лә ашыҡ-бошоҡ...

- Әсәйегеҙ янында булаһығыҙҙыр әле, - тим магазиндан сыҡҡан ыңғайы.

- Дөрөҫөн әйткәндә, бер, күп тигәндә, ике сәғәткә генә килдем. Бынан бер нисә йыл элек йортҡа бурҙар төшкәйне. Шунан ҡурҡып ҡалдым шикелле. Ҡот ҡойҙормайынса булмаҫ, ахырыһы, - тип шаяртырға тырышты ул, әммә ысынтылап хафаланғаны асыҡ күренә ине. - Әсәйҙе генә түгел, ирҙе лә, балаларҙы ла күргән юҡ хәҙер. Һәр беребеҙ төрлө ерҙә сабабыҙ ҙа сабабыҙ. Шөкөр, теләгәнем бөтәһе лә алдыма килде: диңгеҙҙә лә ял иттем, сит илдә лә булдым, ике ҡатлы йортом да бар. Тик күңелгә нимәлер етмәй барыбер. Ҡартаям, ахыры, һуңғы ваҡытта ошолай йәшәү мәғәнәһе, тормош асылы тураһында уйға биреләм дә китәм...

Кинәт кенә урыҫ яҙыусыһы Лев Толстойҙың "Ильяс"ы иҫкә төштө. Бизнеследиҙың ваҡыты самалы булыуға ҡарамаҫтан, уның да хәтеренә төшөрөргә маташтым.

...Ҡасандыр етеш, мул тормошта йәшәгән герой ғүмер ҡояшы офоҡҡа яҡынлашҡан мәлдә байлығы юҡҡа сығып, башын ялсылыҡҡа һалғас ҡына бәхетен таба. Был бәхетте хикәйә геройы Ильяс һәм уның ҡатыны бына нимә тип аңлата: "Беҙ бай инек, әммә тынғылыҡ белмәнек. Һөйләшергә лә, намаҙ уҡырға ла, йән тураһында уйланырға ла ваҡытыбыҙ булманы. Берәй нәмәбеҙ юҡҡа сығып ҡуймаһын тип, йоҡо белмәнек, шик-шөбһәгә төшөп, гөнаһлы булдыҡ. Ә хәҙер һөйләшергә лә, йән тураһында уйланырға ла, ғибәҙәт ҡылырға ла ваҡыт бар".

Бәхет төшөнсәһен нисек аңлағандарын, ә иң мөһиме, был ике бәндәнең бәхетте нисек табыуҙарын аңлатырға тырышҡан яҙыусы. Һуңғы һүҙҙәремде танышым ишеттеме-юҡмы, һаубуллашыуын белдереп, ҡыҫып ҡосаҡланы ла, ашығыс аҙымдар менән машинаһына ыңғайланы...

**Лена БАРЫЕВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# КЕШЕЛЕК ЮЛДАН ЯҘА...



**Шайтан ендәрҙе саҡырып алған да: "Беҙ кешеләрҙе камиллашыуҙан тыя алмайбыҙ. Уларға уҡырға, белем эстәргә, атай-олатайҙары аҡылына таянырға ла ҡамасаулап булмай. Ырыу-ара бәйләнештәре барлыҡҡа килгәс, беҙ улар менән идара итә алмаясаҡбыҙ. Әммә беҙ уларҙың ваҡытын урлай алабыҙ. Бының өсөн улар һәр ваҡыт нимә менән булһа ла мәшғүл булырға тейеш. Шул ваҡытта улар артабан камиллаша алмаҫ", - тигән.**

- Бының өсөн нимә эшләргә тейешбеҙ? - тип һораған ендәр.

- Аңын, уйын, бар булмышын ваҡ-төйәк менән тултырыу өсөн төрлө ысул уйлап табығыҙ. Иң мөһиме, матди байлыҡҡа ынтылырға кәрәклегенә ышандырығыҙ. Кешене күп аҡса эшләргә, ҙур килем алыу хыялы менән йәшәргә, машина, фатир һатып алырға ҡотортоғоҙ. Ресторанға, кафеға йөрөр, ҡиммәтле кейем һатып алыр, йортона зиннәтле ремонт яһар, уны модалы мебель менән йыһазландырыр өсөн ҙур эш хаҡы алырға икәнлеккә инандырығыҙ. Матди байлыҡҡа ынтылыштары булғанда инде уларға атай-олатайҙар белеме лә кәрәкмәй, камиллашыу теләге лә булмаясаҡ.

Балаларын тәрбиәләргә ваҡыттары булмаһын өсөн ҡатындарын эшкә йөрөргә, ә ирҙәрен аҙнаһына 6-7 көн, көнөнә 10-12 сәғәт эшләргә кәрәклегенә ышандырығыҙ. Балаларының иртәнән кискә тиклем урамда насар компания менән йөрөүенә булышлыҡ итегеҙ. Шул саҡта уларҙың уҡығылары ла килмәҫ, изгелек көтөргә лә кәрәкмәҫ. Һөҙөмтәлә ғаилә тарҡалыр, ә беҙ уларға ҡайғыһын "йыуырға" булышлыҡ итербеҙ.

Телевизор, компьютер артында күберәк ултырһындар өсөн төрлө ысул уйлап табығыҙ, көнө буйы эшләп торһон улар. Һәр магазинда, ресторанда ныҡ тауышлы, мәғәнәһеҙ, һүҙе иҫтә ҡалмаҫлыҡ йырҙар яңғырап торһон. Был уларҙың аңына блок-кәртә ҡуйыр һәм ырыу менән берҙәмлеген емерер. Кафе өҫтәлдәренә күп итеп журнал-гәзит һалығыҙ. Тәүлек әйләнәһенә уларҙың мейеһенә һәр төрлө яңылыҡ һәм реклама менән һөжүм итегеҙ. Почта йәшниктәрен реклама, почта буйынса тауар яҙҙырып алыу өсөн каталогтар һәм бушлай тауар, хеҙмәт, ялған өмөт тәҡдим иткән башҡа төрлө мәғлүмәт менән тултырығыҙ.

Ирҙәрҙе тышҡы матурлыҡ - иң мөһиме, икәнлегенә ышандырыр, үҙ ҡатындарынан ҡәнәғәт булмаһын өсөн журналдарҙа, телевизорҙа ябыҡ, матур моделдәрҙе күрһәтегеҙ. Ирҙәрен яратырға ваҡыты ҡалмаһын өсөн ҡатындарының һәр ваҡыт арып йөрөүенә булышлыҡ итегеҙ. Әгәр улар иренә һөйөүен бүләк итмәһә, улар уны ситтән табасаҡ. Был инде ғаилә емерелеүгә килтерәсәк!

Дини байрамдарында уларҙы байрам мәшәҡәте менән арбағыҙ. Балаларына уларҙың әһәмиәтен аңлатмаһын өсөн телевидениенан концерттар, иҫерек мәжлестәр күрһәтегеҙ. Хатта отпускынан да арып ҡайтһындар... Тәбиғәткә сығып, уның матурлығын күрмәһен, ҡоштар, йылғалар тауышын тыңламаһын өсөн уларҙың иғтибарын һәр ваҡыт нимәгә булһа ла йәлеп итегеҙ. Күңел асыу урындарына, парkка, спорт сараларына, уйынға, концертҡа, киноға ебәрегеҙ! Йыһандан көс алырға ваҡыттары булмаһын өсөн уларҙың тормошон ығы-зығы менән тултырығыҙ. Тиҙҙән улар, аҡса һәм эше арҡаһында һаулығын, ғаиләһен юғалтып, тик үҙенә генә ышанып эш итә башлаясаҡ. Был мотлаҡ шулай буласаҡ!" - тип аңлатҡан шайтан.

Ендәр, ҡыуанышып, ҡушҡандарҙы үтәргә керешкән. Шайтандың ниәте бойомға аштымы икән? Был хаҡта үҙегеҙ уйланығыҙ!..

✓ ***Был документта күрһәтелгән Ремгул (Уранғол) буласаҡ Пугачёв полковнигы Арыҫлан Уранғоловтоң атаһы була. Шулай уҡ Аладдин Биктуғанов та Салауат Юлай улының тоғро яу башлығы була.***



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - ТАНЫП, СЫҒЫШЫБЫҘ - ҠАРА-ТАБЫН

XV быуаттың икенсе яртыһында Ҡара-Табын башҡорттарының бер өлөшө, Ибәк (Ибраһим) хан ҡыҫымынан ҡотолоу маҡсатында, элек биләгән ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр була. Улар, Урал һырттары аша сығып, Кесе Табын олоҫон барлыҡҡа килтерә. Уларҙың бөгөнгә вариҫтары Архангел, Ҡырмыҫҡалы һәм Ғафури районында йәшәй.

Әммә Себер ханлығының Шибан олоҫонда сәйәси низағтар дауам итә, был ваҡиғалар Урал арьяғында көн иткән ҡара-табындарҙың тағы ла бер ҙур төркөмөнөң күсеп китеүенә сәбәп була. Әммә улар, Кесе-Табын башҡорттарынан айырмалы, икенсе юлдан китә. Ғәли Соҡорой "Тазкират лиль-ихван ва-ль-ахбаб" исемле әҫәрендә үҙҙәренең Әхмәтшәйех тигән бабаларының Мейәстәге йорттарынан Чусовая йылғаһы үҙәне аша Кама (Сулман) йылғаһы буйындағы ерҙәргә барып етеүе хаҡында бәйән итә. Әхмәтшәйех бабаның яңы ерҙә тыуған ейәненә Сулман бей, тип исем ҡушалар. Улар тәүҙә гәйнә башҡорттары биләмәләренән төньяҡтараҡ, буласаҡ Уса һәм Оханск ҡәлғәләре ерҙәрендә көн итә. Шәжәрәлә раҫланыуынса, "Гәйнә-баба Сулман бейгә Барҙа йылғаһы үҙәнендә төпләнергә рөхсәт итә", ә был территория гәйнә башҡорттарының аҫаба биләмәләренә ҡарай. Тап ошо замандарҙан гәйнә һәм танып (ҡара-табын) башҡорттары араһында тығыҙ бәйләнеш хасил булып, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре урынлаша. Ошо хаҡта ғалим Р.Ғ. Кузеев былай тип яҙа: "Гәйнә башҡорттары, башҡа күршеләренән айырмалы рәүештә, таныптарҙы үҙҙәренең туғандары, тип иҫәпләй. Гәйнәләрҙең бер риүәйәтендә былай тип әйтелә: "Таныптар - беҙҙең туғандарыбыҙ. Гәйнәләрҙең ата-бабалары Таныпҡа үҙҙәренә нәҫелдәш булған таныптарҙы эҙләп, улар менән бергә йәшәр өсөн килдә". Гәйнәләрҙең икенсе бер атамаһы - аҫтанып - боронғо танып-гәйнә бәйләнештәрен раҫлай".

Күпмелер ваҡыттар үткәс, Гәйнә ерендә йәшәгән ҡара-табындар (буласаҡ танып ырыуы башҡорттары) көньяҡҡа табан, Танып, Төй һәм Байҡы йылғалары үҙәндәренә күсеп китеп, елдәк, гәрәй, таҙлар ырыуҙарына күршеләш булып йәшәп китә. Пермь крайының Барҙа районында хәҙер ҙә Танып ауылы бар: күрәһең, таныптарҙың бер ни тиклеме ошо ерҙәрҙә тороп ҡалған. Ә хәҙерге төньяҡ Башҡортостан ерҙәренә күсеп килгән, этник сығыштары менән ҡара-табындарҙан булған башҡорттар ошо яҡтарҙа Ирәкте, Балыҡсы һәм Танып олоҫтарына нигеҙ һала.



Балыҡсы ырыуы башҡорттары ла тәүҙә шул уҡ Танып олоҫоноң бер айырым түбәһен тәшкил иткән, был факт Ырымбур губернаһы хакимиәте чиновнигы, тарихсы П.И. Рычковтың "Разделение башкирского народа по волостям и родам" тип аталған исемлегендә сағылыш тапҡан. 1744 йылдан бирле Ырымбур провинциаль канцелярияһы етәксеһе вазифаһында хеҙмәт иткән ошо рус тарихсыһы Ҡайпан аймағының да шул уҡ Танып олоҫона ҡарауы хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған.

Башҡорт мәғрифәтселәре Ғәли Соҡорой һәм Ғарифулла Кейековтың әҫәрҙәрендә килтерелгән шәжәрәләрҙә Балыҡсы һәм Ҡайпан исемле ырыу башлыҡтары хаҡында ла мәғлүмәт бар. Ғәҙәттә бындай шәхестәрҙе легендар, йәғни халыҡ ижады тыуҙырған кешеләр иҫәбенә индерәләр. Әммә әлеге осраҡта Ҡайпан исеме менән бәйле тарихи документ барлығын да иҫәпкә алыу зарур. Алдараҡ Өфө воеводаһы И.И. Чичериндың Танып олоҫо башҡорттары Аҡбирҙе Сысҡанов һәм Йәнсуба Йәнбәковтың ергә хоҡуҡтары буйынса бәхәсе айҡанлы 1627 йылдың 8 авгусында төҙөлгән "наказная память" тип аталған документы хаҡында иҫкә алынған ине. Ошо уҡ документта Танып олоҫонда йәшәүсе аҫаба башҡорт Йәнйегет (Ензигит) Ҡайпановтың да исеме теркәлеп ҡалған. Тимәк, Ҡайпан ауылы һәм ошо уҡ исемдәге аймаҡҡа нигеҙ һалыусы Ҡайпан исемле башҡорт кешеһе булыуы, уның үҙ заманының арҙаҡлы ир-уҙамандары рәтенә инеүе тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә. Танып (Ҡара-Табын) башҡорто Ҡайпан XVI быуат аҙағында йәшәгән, урындағы шәжәрәләргә ярашлы, ул Балыҡсы бей улы, Ҡара-Табын ҡушаматлы Ҡара Ғәзиздең ейәне була. Балыҡсы, Танып, Ирәкте, Ҡара-Табындар бер үк тарихи шәхес - Майҡы бей, йәғни Сыңғыҙ хан сардары Байку вариҫтары, тип һанала.

Танып олоҫона ингән Ҡаҙансы түбәһе тарихы буйынса ла төрлө фараҙдар бар. Ошо хаҡта Ғарифулла Кейеков бына ниҙәр яҙа: "Ирәкте ҡәбиләһе өс олоҫҡа бүленде. Беренсеһе - Ялан Ирәкте, ул Минзәлә өйәҙендә, Ыҡ һәм Мелләүйылғаларында Ирәкте олоҫон хасил итеп, ҡырғыҙ ауылдары араһында (ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары. - **Авт. иҫк.**) урынлашҡан ине. Икенсеһе - Урман-Ирәкте, ә быныһы - беҙҙең илебеҙ. Өсөнсөһө - Танып-Ирәкте. Үрге Тәтешле, Ваныш-Алпауыт һәм Иҫке Ҡаҙансы олоҫтары сығыштары менән үрҙәрәк иҫкә алынған Әхмәтшәйех бейҙән".

Шулай итеп, шәжәрә буйынса ҡаҙансы аймағы башҡорттары ирәктеләргә нәҫелдәш булып сыға. Ҡайпан этнонимының ырыу башлығы исеме менән бәйле булыуы кеүек үк, ҡаҙансыларҙың да атамаһы уларҙың төп бабалары исеме менән бәйле булыуы мөмкин.

"Ҡаҙансылар иле" тип аталған китапта Иҫке Ҡаҙансы ауылы аҡһаҡалдарынан яҙып алынған мәғлүмәттәр килтерелгән. Йәнәһе, Сыңғыҙ хандың Ҡаҙансы бей тигән яу башлығы булған. Ҡаҙансы бейҙең Ҡиғазы һәм Ҡайпан исемле улдары ла булған икән. Ҡаҙансы бей Иҫке Ҡаҙансы (Асҡын районы), Елдәк (Борай районы), Оло Шаҙы (Мишкә районы) ауылдарына нигеҙ һалған, имеш.

Әммә Сыңғыҙ хандың Ҡаҙансы бей исемле сардары булыуы билдәле түгел. Ә бына Аҡһаҡ Тимерҙең Кавказдағы ғәскәрҙәренә ҡаршы Туҡтамыш хан тарафынан яуға ебәрелгән бейҙәр араһында Ҡаҙансы исемлеһе лә теркәлгән. XV быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы Шәрәф ад-дин Йезди яҙмаларында шундай мәғлүмәт бар: "В ту зиму (1385-1386 гг.) Токтамыш-хан через Дербент отправил к Тебризу огромную армию, приблизительно 9 туманов, большей частью язычников, все безжалостных и злобных, с 12 огланами во главе с Бек-Пуладом, с эмирами Иса-беком, Яглы-беком, Казанчи и другими нойонами..."

Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәләренең береһендә шулай уҡ ниндәйҙер Ҡаҙансы бей булыуы теркәлгән. "Ҡаҙансылар иле" китабындағы фараҙдар тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеевтың "Башҡорт халҡының килеп сығышы" исемле фундаменталь хеҙмәтендә сағылыш тапҡан фекерҙәргә тап килә. Билдәле башҡорт ғалимы ошо хаҡта былай тип яҙған: "Башҡортостандың иң төньяҡ тарафтарында ҡаҙансы һәм ҡайпан исемле танып ырыуҙарының йәшәй башлауы әүҙем ҡыпсаҡ миграцияһы дәүере менән бәйле". Алдараҡ ҡайпандарҙың танып - ҡара-табын сығышлы булыуы хаҡында етерлек кимәлдә мәғлүмәттәр булыуы хаҡында бәйән ителгәйне. Ә бына ҡаҙансыларҙың ҡыпсаҡ сығышлы булыу мөмкинлеге етди дәлилдәр менән нигеҙләнмәгән. Чингизидтар менән килгән, йәиһә Туҡтамыш хан әмире булған Ҡаҙансы бейҙең таныптар аймағы булған ҡаҙансыларҙың бабаһы булыуын әлегә билдәле булған сығанаҡтар аша раҫлап булмай. Бында ни барыһы бер үк исемле, әммә төрлө заманда йәшәгән шәхестәр хаҡында һүҙ барыуын инҡар итеп булмай. Ә шул уҡ Иҫке Ҡаҙансы ауылы тарихи документтарҙа тәү тапҡыр Себер даруғаһы Ҡаҙансы ауылы башҡорто Ҡошуҡ Арыҫланов эше менән бәйле 1710 йылда ғына теркәлгән. Шулай ҙа танып - ҡыпсаҡ бәйләнештәренең һуңғыларының тарихи Башҡортостан территорияһына килеп урынлаша башлаған замандарҙан уҡ барлыҡҡа килеүен дә фараҙлап була. Хәҙерге замандарға тиклем һаҡланып ҡалған топонимдар ошоға дәлил. Мәҫәлән, хәҙерге Мәләүез районының Арыҫлан ауылының (Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫона ҡарай) икенсе исеме Танып була. Шул уҡ ваҡытта Танып йылғаһы бассейнында ла "кыпсак" һүҙе ингән топонимдар осрай. Пермь крайының Көйәҙе районында Ҡыпсаҡ ауылы булыуын ҡыпсаҡтарҙың төньяҡҡа табан миграцияһы эҙемтәһе итеп ҡарарға кәрәктер.

Танып олоҫо башҡорттары XVII-XVIII быуаттарҙа береһе артынан береһе ҡабынып торған башҡорт ихтилалдарынан ситтә ҡалмай, әлбиттә. 1662-1664 йылдарҙағы барса башҡорт йорттары күтәрелешенә улар ҙа бик әүҙем ҡушылып китә. 1662 йылда Себер һәм Уса даруғалары башҡорттары Бөрө йылғаһындағы Архангельское ауылын яндыра, әммә батша властары, ошо төбәк башҡорттарын буйһондороп тотоу маҡсатында, шул уҡ урында 1663 йылда Бөрө ҡәлғәһенә нигеҙ һала. Шуға ҡарамайынса, таныптар, гәйнә башҡорттары хәрәкәтенә ҡушылып, Көнгөр ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. Тап ошо ваҡиғалар менән бәйле Өфө воеводаһы А.М. Волконский уларға бына ниндәй ғәйептәре хаҡында киҫәтеү белдергән: "... вы, башкирцы Танынских волостей и Осинской дороги Гайнинских волостей, великому государю изменили, к ним же айским башкирцам пристали, к Сюлтюку ж и Кучюку салтану подклонились, и приходили во многие места в Уфимской и в Казанской и Соликамской в уезды все вместе с Сибирскою дорогою войною, многие села и деревни повоевали, людей побили, в полон поимали многих и к Сюлтюку отдали, света вы отбыли, во тьму преклонились и на оной век".

Башҡорт йорттары тынысланһа биргәс, батша чиновниктары уларҙы рус армияһының көньяҡ походтарында ҡатнашырға саҡыра. Мәҫәлән, бер тарихи документта (1675 йылда хөкүмәттең башҡорттарҙы Ҡырым походына саҡырыуынан һуң) ошоға ризалыҡ биргән Танып олоҫо башҡорттарының исемдәре теркәлеп ҡалған: "Танынские волости разных деревень башкирцы Солтангин Дейдертякеев, Чюраш Аювчин, Чипчик Чюриков, Умир Чубаев, Бекбов Кулбаев, Козянгул Кузеев, да Назар Алиметев, да Токай Актуганов, Юлюмбет Чипчикаев сказали: мы де на ево службу ехать готовы, куды ево государское повеление будет".

Башҡорттар өсөн иң уңышлы тип һаналған 1704-1711 йылдарҙағы ихтилалда ла, иҫ китмәле ҡан ҡойош һәм ҡырылыш менән тамамланған 1735-1740 йылдарҙағы азатлыҡ хәрәкәтендә лә таныптар йән аямай алыша. Башҡорт илен ҡанға батырған яуыз полковник А.И. Тевкелев палачтарының Һөйәнтүҙ ауылындағы вәхшилегенән һуң күтәрелешкә Себер даруғаһының барса йорттары ла ҡушылып китә. Әсир алынған Балыҡсы олоҫо башҡорто Ялтыр Дусаев, каратељдәрҙең ғазаплауына түҙә алмайынса, ихтилалсылар ҡорған планды асып һала: "И как де команда ево выйдет из лесу к реке Аю до Мурзаларской волости, то иттить на лыжах и, соединясь с ворами башкирцами, которых де в собрании при показанной реке Аю человек з 2000 с начальными ворами с Юсупом да Тюлкучурою, да Танынской волости деревни Кайгазы Ремгулом, чей сын не знает же, напасть и разбить оную полковника Тевкелева команду". Был документта күрһәтелгән Ремгул (Уранғол) буласаҡ Пугачёв полковнигы Арыҫлан Уранғоловтоң атаһы була. Шулай уҡ Ҡыр-Танып олоҫоноң Ҡайпан түбәһе старшинаһы Аладдин Биктуғанов та Салауат Юлай улының тоғро яу башлығы була, ихтилалда аҙаҡҡаса ҡатнашып, әсир алына һәм Ҡаҙан төрмәһендә һәләк була.

Генетик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләренә ярашлы, танып, ҡаҙансы һәм ҡайпан башҡорттарының, табын, балыҡсы, ирәкте, унлар, көҙәй, әйле һәм башҡа төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш ырыуҙарына хас булғанса, R1a-M198 гаплотөркөмөнә ҡарауы асыҡланды.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 51-се һанда).**

# ТАБЫНДАРЫБЫҘ...

## үҙ ҡулдарыбыҙ менән әҙерләгән ризыҡтарҙан һығылып тора

**Яңы йылға аяҡ баҫыр алдынан ауылдарҙа, хатта ҡалаларҙа ла һуғым һуйыу, оҙон ҡышҡа ризыҡ хәстәрләү кеүек матур мәшәҡәттәр менән гөү килде халыҡ. Башҡа халыҡтарҙа нисектер, әммә беҙҙең башҡорт ғаиләләрендә был йола мотлаҡ атҡарыла торған йәшәйеш ҡағиҙәһенә әйләнгән. Һуғым осоро - етеш тормош, именлек, бәрәкәт, ҡот билдәһе, тигән боронғолар. Ниндәй ғаилә нисек ғәмәлгә ашырҙы икән был йоланы, Яңы йыл табыны ниндәй ризыҡтар менән биҙәлдә икән? Ошондай ҡыҙыҡһыныу менән республиканың көньяғына төбәнек һорауыбыҙҙы.**

***Фирүзә ТҮЛӘБАЕВА, Күгәрсен районы Үрге Санъяп ауылы:*** Был матур йола беҙҙең ғаиләлә йыл да еренә еткереп атҡарыла, әлбиттә. Сананды йәй, арбанды ҡыш әҙерлә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Ауылда йәшәүселәр ҡышты йәй үк хәстәрләй башлай. Быйыл йыл ҡоро килһә лә, баҡсабыҙ ишелеп уңды. Помидор, ҡыяр, боростан ҡышҡылыҡҡа төрлө әҙерләмәләр күп эшләнек. Балалар ҡайтһа, йәмле йәйҙең йәме итеп, өҫтәлгә сығарып ултыртабыҙ. Емеш-еләктән тыш, һөҙмәһен, ҡоротон, аҡ май, һары май кеүек һөт ризыҡтарын да тәмле итеп ҡуябыҙ. Эремсектең ағын да, ҡыҙылын да әҙерләйбеҙ. Ҡышын былай ашауға ла, төрлө бәлеш-ләүештәргә эслек итеү өсөн дә ярап ҡала.

Ҡош-ҡорт, мал итен, уларҙың эс-бауырын да эшкәртеп, туңдырғыста һаҡлайбыҙ. Ҡышҡа етерлек итеп тултырма тултырабыҙ. Беҙҙең яҡта ауыл ҡатын-ҡыҙҙары һуғым һуйғас, кисен бер-берейһенә йөрөп, күп итеп билмән яһарға ғәҙәтләнгән. Уны туңдырып, көн һыуыкта ҙур кәстрүлдә соланга ултыртабыҙ, йә туңдырғыска урынлаштырабыҙ. Ҡапыл ғына ҡунаҡ килеп төшһә, ҡул аҫтында әҙер ризығың бар, тигәндәй. Үҙебеҙгә лә ярап ҡала.

Малдың баш-тояғынан ҡойҡа яһайбыҙ. Ауыл кешеһенең эше йәйен дә, ҡышын да бөтөрлөк түгел инде ул, ял бик эләгеп бармай. Икенсе яктан, магазин-кибеттәргә килгән ризыҡты бар тип тә белмәйбеҙ, үҙебеҙҙең хәләл ризыҡ менән һыйланабыҙ, ҡалала йәшәгән балаларға, туғандарға күстәнәскә ебәреп торабыҙ.

Яңы йыл табыны ни тиклем бай булһа, йыл буйы бәрәкәт оҙатып йөрөй, тигән ырым йәшәй халыҡта. Шуға был байрамды лайыҡлы ҡаршы алырға, йыл хужаһын ҡыуандырырға тырышабыҙ. Бында ла өҫтәлдә тик үҙебеҙ әҙерләгән милли ризыҡтар, баҡсабыҙҙа үҫкән йәшелсә, емеш-еләк менән биҙәйбеҙ. Йыл һайын йә ҡаҡланған, йә алма, ҡара емеш тултырылған ҡаҙ менән һыйлайым ғаиләмде. Тәмле лә, әҙерләүе ҡатмарлы ла түгел.



**Гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашайым әле рецебым менән. Ҡаҙҙы һуйып эшкәртҡәс тә ҡаҡлаһаң, Яңы йылға әҙер була. Бының өсөн ҡаҙҙы таҙа һыу менән яҡшылап йыуаһың да, һыуын һарҡытып, ҡорғанһы таҫтамал менән һөртәһең. Аҙаҡ уны тоҙ менән ышҡыйһың. Ҡанат аҫтарын, эсен дә ныҡлап ыуаһың. Һыуыһүле ағып тормаһын. Һуңынан кәстрүлгә бер кило тирәһе, артығыраҡ булһа ла ярай, тоҙ һалып, ҡаҙҙы күмеп ҡуяһың. Бер ай тирәһе ваҡыт үткәс, ышҡып, тоҙонан таҙартаһың һәм элеп ҡуяһың. 20-30 көндән ашарға ярай. Бындай ысул менән ҡаҡланған ҡаҙ бик оҙаҡ һаҡланырға мөмкин.**

***Ильвира ЗАҺИҘУЛЛИНА, Көйөргәҙе районы Яңы Муса ауылы:*** Эйе, ауыл халҡы йәй етеү менән ҡышҡа әҙерләнә башлай. Сәскән-урғаны ла, аҫраған ҡош-ҡорто, малы - барыһы ла оҙон ҡыш буйы ғаилә менән бергәләп ашарға насип булһын тип туплана. Ҡаҙ өмәләре, һуғым аштары гөрләп үтте ауылда. Элекке кеүек, хәҙер халыҡ һалҡын көндәр килеп, ер туңдырғанын көтөп тормай. Кейек ҡаҙҙар йылы яҡҡа китергә йыйынып, һауала өйөрөлә башлау менән беҙҙең ауыл ҡатын-ҡыҙҙары ихаталағы ҡош-ҡортон урынлаштырыу хәстәрлеген күрә лә башлай. Борон ғына ул һыуыткыс шкафтар, һандыҡтар, камералар булмағанда һыуыҡ төшкәнен көтә инек. Был, билдәле инде, ҡош-ҡортто, малды һуйыу менән туңдырып ҡалыу ниәтендә эшләнә ине. Хәҙер йәтеш: көн йылы торғанда уҡ рәхәтләнеп ҡаҙ-өйрәкте тышта йолҡоп, эшкәртеп, туңдырғыстарға тултырып ҡуяһың. Быйыл да был күңелле эште күптән тәүәлләп ҡуйҙыҡ.

Беҙҙә ҡош-ҡорт тотмаған кеше бик һирәк. Олоһо ла, йәше лә берейһенән-берейһе уҙҙырып, сәмләнеп, күп итеп аҫрайҙар. Уларҙы тотоу өсөн ауыл да бик уңайлы. Ҡаҙ-өйрәккә ни, аҙыҡҡа ҡарағанда, күберәк йылғала йөҙөргә кәрәк бит инде - уныһы иһә әргәлә генә. Тик һуңғы йылдарҙа унаң ике яҡ ярын шырлыҡ баҫып алып бара, шуныһы ғына ҡаҙ-өйрәк аҫраусыларҙы борсоуға һала. Ҡырҡып та, бысып та алып бөтмәҫлек нәмә шул. Бәпкәләр бәләкәйерәк сағында ҡарауһыҙ һыуға төшөрөүе ҡурҡыныс булып тора. Өҫтәүенә, ни сәбәптәндер, ҡондоҙҙар ауылға яҡынайҙы. Улар ярҙың ике яғынан да ағастарҙы кимереп, йылғаны бер нисә урындан быуып ҡуя. Ҡош-ҡортҡа тейеүенән шикләнмәйбеҙ ҙә ул. Йылға һайығайып ҡалды. Әлегә ҡош-ҡорт йөҙөрлөк урындар бар әле, ҙурая биргәс, көн оҙонона шунда йөҙәләр.

Сепейҙе беҙҙә кемдер иртә яҙҙан уҡ ала ла, бер аҙ үҫкәнен көтөп, өйөндә, аласығында тота, икенселәр йәй башында көндәр йылына биргәс кенә алып ҡайта. Беҙ ҙә бер аҙ үлән йәшәргәс кенә алабыҙ ҙа, шунда уҡ урамға ла ебәрәбеҙ. Һуңырак алһаң, бик ауырымайҙар ҙа һымаҡ. Шулай ҙа тәүҙә бала һымаҡ ҡарарға кәрәк инде. Ҡараһаң, тәрбиәләһәң генә "мал" була улар.

Һәр ауылдың үҙенә генә хас йолаһы, ғөрөф-ғәҙәте бар. Ҡаҙ өмәләренә лә ҡағыла был үҙенсәлек. Ҡайһы бер яҡтарҙа ҡулалмаш йәки бер-берейһенә ярҙам итеп эшләйҙәр ҙә, йәғни, килеп, ҡош-ҡортто эшкәртергә булышалар ҙа, эш бөткәс тә таралышалар. Ә беҙҙә был ғәмәл боронғоса үтә. Күрше-тирә, туғандар менән алдан уҡ көн билдәләп ҡуябыҙ ҙа, бер көн - берәүҙә, икенсеһендә - икенсе күршебеҙҙә, шулай көн һайын йәки көн аша эшләйбеҙ. Аҙна-ун көнгә һуҙылып китә был күңелле мәшәҡәтебеҙ. Йыл һайын көтөп алабыҙ уны. Кәрәкле әйберҙәр, һауыт-һаба, бау кистән әҙерләп ҡуйыла, өмәгә саҡырылған ҡатын-ҡыҙ иртән иртүк килеп етә. Ҡаҙҙарҙы тотошоп, бәйләшеп биреүҙән башлап, бөтә эш йолаға ярашлы атҡарыла. Һәр ҡошто йолҡорға алған һайын "Бер башың икәүгә етһен!" йәғни, "Икенсе йыл тағы ла күберәк булһын!" тип теләктәр әйтеп эшләйһең. Кисен ирҙәре, балалары менән ашҡа киләләр. Хужалар уларҙы мунса яғып, табын әҙерләп ҡаршы ала. Ҡоштарҙы үстергән кешеләрҙе маҡтай-маҡтай, уларҙы иҫән-һау ашарға яҙһын тип, теләктәрен теләйтеләй, йырлап-бейеп бик күңелле ултыралар.

Һуғым һуйыу йолаһы ла теүәл үтәлә беҙҙә. Элекке кеүек, эске менән үтмәй хәҙер улар. Халыҡтың йылдан-йыл был насар ғәҙәттәренән арына барыуы айырыуса ҡыуаныслы. Оло мал һуйғас, шулай уҡ күмәкләп, һыйыр эсәгенән тултырма тултырабыҙ, йылҡыныҡынан ҡазы, ҡумаҡлап билмән яһайбыҙ. Өлкәндәрҙән үҙебеҙ өйрәнәбеҙ, йәштәргә өйрәтәбеҙ.

Ҡышҡылыҡҡа йыл да итте турағыс аша үткәреп, билмән, тефтель, кәтлит кеүек нәмәләрҙе алдан әҙерләп, туңдырып ҡуям. Балалар ҡайтып төшһә йә көтмәгәндә туғандар килеп тулһа ла, тиҙ генә бешереп, өҫтәлгә ҡуйырға бигерәк йәтеш. Быйыл тултырманы ла тултырып ҡуйҙыҡ әле. Халҡыбыҙҙың был милли ризығы йыл һайын беҙҙең Яңы йыл табынын биҙәй.

Көнсығыш календары буйынса киләһе йыл - Һыйыр (Үгеҙ) йылы. Шулай булғас, өҫтәлдә һыйыр малы итенән ризыҡ булырға тейеш түгел тиҙәр. Мин йондоҙнамәгә ышанып етмәйем. Шуға күрә яҡындарымды быйыл да үҙебеҙҙең таҙа һарайҙа, сифатлы аҙыҡ ашап ҡына һимертелгән хәләл малыбыҙҙың итенән бешерелгән милли аҙыҡтар, үҙ баҡсабыҙҙа үҫкән емеш-еләктән эшләнгән, бешерелгән компоттар, бәлештәр менән һыйлаясаҡмын.



**Тултырманы һәр төбәктә төрлөсә эшләйҙәр. Малдың үпкә-бауырынан да, баш итенән дә әҙерләйҙәр. Мин үҙемсә тултырам. Үпкә, бауыр, йөрәкте ит турағыс аша үткәреп, уға күп кенә итеп фарш ҡушам. Балалар бәләкәй саҡта үпкә-бауырҙан ғына булһа, ашамай ине. Тамаҡтарын һыйлайым тип, ит һалырға ғәҙәтләнеп киттем. Һуңынан үҙемә лә шулай тәмлерәк булып тойолдо ла, хәҙер һәр ваҡыт шулай эшләйем.**

**Әҙер иҙмәгә самалап тоҙ, ҡара борос, туралған һарымһаҡ, бер аҙ бөрттерелгән дөгө ярмаһы һалып, яҡшылап бутайым да, бер яҡ осо еп менән ныҡ итеп бәйләнгән эсәккә тултырам. Тығыҙ итеп һалмағыҙ, Бешкәндә ярылып китмәһен өсөн уны артыҡ тығыҙ итергә ярамай, бик үк бушаҡ та булмаһын, юғиһә, киҫәктәргә бүлгәндә эсе тараласаҡ. Тултырып бөткәс, эсәктең ике осон да ныҡ итеп бәйләп ҡуяның инде.**

**Бешергән ваҡытта тултырманы мотлаҡ ҡайнар һыуға һалығыҙ. Ҡайнап сыҡҡас, ярылмаһын өсөн, бер нисә урындан энә менән тишегеҙ. Артыҡ оҙаҡ бешермәйем, үпкә-бауыр ҙа, туралған ит тә тиҙ бешә, 1 сәғәт тигәндә уны иплән кенә һыуҙан алам. Алғас та киҫкеләй башламайым. Бер аҙ үҙенең бөсөнда тәмләнеп ултырырға бирәм дә, өҫтәлгә алып сығып, ҡунаҡтар алдында ҡырҡып, йәшел тәмләткес менән биҙәп, һәр кемдең алдына тәрилкә менән бирәм.**

***Нәфиә һәм Зәки ШӘРӘФЕТДИНОВТАР, Мәләүез ҡалаһы:*** Быйыл бик үҙенсәлекле йыл булды. Һағайып көтөп алған кәбисә йылы ла тамамлана. Боронғоларҙың һынамыштары буйынса, йыл ауыр булырға тейеш ине. Ысынлап та, башҡа йылдарҙан айырмалы ҡатмарлы ғына булды ул республика халҡы өсөн. Йәйен эҫе көндәр, ҡоролоҡ бәкәлгә һуҡты. Өҫтәүенә, тажзәхмәт таралыуына бәйле көндәлек тормошобоҙ тәртибе үҙгәрҙе. Бигерәк тә ҡалала, фатирҙа йәшәгәндәр өсөн ауырға тура килде.

Беҙ үҙ йортобоҙҙа йәшәйбеҙ. Шуға күрә яҙғы үҙҡурсаланыу режимында йәшәү улай уҡ ҡыйынға тура килмәне, һиҙмәнек тә, тип әйтергә лә мөмкин. Баҡсала эшләнек, йыл һайын һуғымға тип үгеҙ аҫрайбыҙ, шуны тәрбиәләнек, иш янына ҡуш тиеп, бройлер тауығын да алғайныҡ. Йәй буйы ейән-ейәнсәрҙәр менән ихатала мәж килдек.

Ғүмеребеҙҙең байтаҡ өлөшө Ейәнсура районында үтте. Хаҡлы ялға сығыр саҡта ғына ҡалаға күсеп килдек. Ерегеп китә алмай бер булдыҡ тәүҙә. Фатирҙы йортҡа алмаштырып, эргәһенә ҙур булмаған һарай төҙөп, һөт кәзәһе тота башлағайныҡ. Боронғолар, кәзәне маҡта ла һыйырҙы һау, тип, белмәй әйтмәгән икән. Һыйыр алғас ҡына тормошобоҙ йәм инде. Көтөү менән бәйле проблемалар була торғайны, әммә үҙең һаған һөт, яңы ҡаймаҡ менән сәй эсеү - үҙе бер ғүмер бит ул. Йыл һайын башмағын һуйып, ауылдағыса күрше-тирәне, дуҫтарҙы, туғандарҙы һуғым ашына йыйабыҙ. Быйыл да, йыл ҡатмарлы килеүенә ҡарамаҫтан, был байрамды, күп кеше йыймай ғына, дөрөҫөрәге, кем һуйырға, эсәген йыуышырға килгән, шуларҙы саҡырып, йоланы тулыһынса үтәп, үткәреп ебәрҙек.

Мал салғандағы бар йоланы күҙәтергә тырышабыҙ. Мәҫәлән, бысаҡты теләгән бер кешегә бирмәйбеҙ. "Ҡулы татлы" тигән исеме сыҡҡан кешегә генә был эште атҡара. Ир-егет тирейһен һыҙырып, ит бүлгән арала, беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, эсәген йыуабыҙ. Бында ла оҫталыҡ, таҙыллыҡ кәрәк. Йыуа белмәгән йәки йыуырға теләмәгән кешегә үпкә-бауырын, йөрәген биреп, ҡурҙаҡ ҡурырға индереп ебәрәбеҙ. Яңы ғына һуйылған малдыҡы бигерәк тәмле була. Һуғым һуйғас, иң беренсе муйын

**✓ Яҡынса 92 процент осраҡта беренсе рюмканы балаларға ата-әсәләре тоттора. Әйҙәгеҙ, балаларыбыҙға ыңғай өлгөнө үҙебеҙ күрһәтәйек, айыҡ тормошто йәшәү нормаһы итеп алайыҡ!**



итен алып бешерергә һалабыҙ, алай-былай иткәнсе, йомшаҡ ҡына булып бешеп тә сыға. Быйыл өмәселәрем тултырмаһын тултырып, туҡ эсәк-ҡарынын, деликатес тип әйтәбеҙ беҙ уны, бешекләп ҡайтып китте. Унан ҡыш буйы аҙлап бөйөрөк бешереп ашайбыҙ.

Элекке һымаҡ, табынға иҫерткес эсемлек ҡуймайбыҙ. Геркулестан буҙа ҡойорға ла өйрәнеп алдым. Уны даими рәүештә түгел, танһыҡҡа ғына эшләйем. Үҙебеҙҙең тәмле-татлы милли ризыҡтарыбыҙҙы әҙерләйбеҙ. Һуғым ашында мотлаҡ өҫтәлдә бишбармаҡ була. Һалманы ҙур шаҡмаҡтарға бүлеп, ҡайнар һурпала ғына бешереп, ҙур тәрилкәгә һөҙәбеҙ ҙә, өҫтөнә уртаса ҙурлыҡтағы киҫәктәргә бүленгән итте һалабыҙ. Уның өҫтөнә түңәрәкләп киҫелгән һуған, йәшел тәмләткес һибәбеҙ. Һурпаһын бәләкәй тәрилкәлә йәки кәсәлә ҡорот менән генә бирәбеҙ, туҡмас һалмайбыҙ.

Йәшерәк саҡта ҡышҡылыҡҡа тип аҙыҡ-түлек туплағанда мотлаҡ Яңы йыл табынын күҙаллай торғайныҡ, ә хәҙер йәй башынан ошо һуғым ашы тураһында уйлайбыҙ. Был көндә йәй әҙерләнгән ҡайнатманың, йәшелсә салаттарының иң тәмлеһе өҫтәлгә сығып ултыра.



**Хәҙер күптәр, бешереүе оҙаҡ тип, магазиндан әҙер баурһаҡ, сәк-сәк ала. Һирәк бешерһәң генә мәшәҡәтле һымаҡ ул. Йыш тотонһаң, оҫтараһың. Мин үҙем бик ҡыҫҡа ваҡытта әллә күпме өлгөртәм. Һыуыҡтыҫта туңдырып иретелгән 5 йомортҡаны (күп кеше булһа, 10 йомортҡа) блендерҙа оҙаҡ ҡына әйләндерәм. Элегерәк ҡул менән туҡығанда ағын, һарыһын айырым туҡый инем. Шулай иткәндә, ҡамыр айырым матур була торғайны. Был масса ҡуҙланып, күпереп торорға тейеш. Уға бысаҡ осонда ғына тоҙ, он һалып, тиҙ-тиҙ хәрәкәттәр менән ныҡ итеп баҫығыҙ. Йомшаҡ ҡына булырға тейеш ҡамыр. Ваҡытығыҙ булһа, уны бер аҙ "ял" итергә һалып торороғоҙ. Самалы булһа, шунда уҡ йәйеп, үҙегеҙ теләгән ҙурлыҡта киҫеп бешерегеҙ. Баурһаҡ ярылмаһын өсөн ҡаҙаныгыҙҙағы майҙы бер аҙ һыуытып алығыҙ. Ҡайһы бер кеше һыуытыр өсөн һыу өҫтәй. Әммә ул бик хәүефле. Бер шулай ҡабаланған ваҡытта һыу һалғайным, түбәгә тиклем май сәсрәне. Баурһаҡты мин балламайым. Теләгән кеше сәй эскәндә бал ҡушып ашай. Бер бешергәндә сәк-сәк, баурһаҡты күп итеп бешереп ҡуям, ул оҙаҡ һаҡлана, тәме үҙгәрмәй.**

Ғөмүмән, беҙ бөтә нәмәне алдан йәтешләп, әҙерләп ҡуйырға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Быйыл һуғымдың ике артҡы ботон тулыһынса ит турағыс аша үткәреп, ярымфабрикаттар эшләп ҡуйҙыҡ. Яңы йылға, һуңынан ашарға ла тип, 18 килограмм билмән, 10-ар килолап бәрҙәр, манты, голубцы, кәтлит яһап, туңдырып ҡуйҙыҡ. Балалар, ейән-ейәнсәрҙәр килеүенә тиҙ генә әҙерләргә хәтәр унайлы. Бешеренеп ваҡыт үткәрмәйбеҙ, күберәк аралашабыҙ. Картуф, һуған туңһа, тәме, төҫө үҙгәрә, шуға күрә мантыға, кәтлиткә был йәшелсәләрҙе күп һалмайбыҙ, ҡайһы берҙә бөтөнләй өҫтәмәйбеҙ. Улар урынына күп итеп ҡара борос һибәм, мантыға бер аҙ дөгө өҫтәргә лә була. Майлы ит булһа, һеңеп, тәмле генә булып бешә. Оҙаҡ һаҡлана торған булһа, билмәндең дә, мантының да ҡамырын ҡалын итмәҫкә кәрәк.

Шул ҡәҙәр аҙыҡты ҡасан ашап бөтөрәләр икән, тип аптыраусылар булыр. Беҙҙең йорт юл ыңғайында ғына ултыра. Балаларҙан тыш, яҡташтар, туғандар тегеләй үтһәләр ҙә инәләр, былай үтһәләр ҙә. Беҙҙең ишек һәр кемгә асыҡ. Ҡунаҡ менән бәрәкәт килә бит. Быйыл коронавирус инфекцияһы таралыу менән бәйле ҡайһы берҙә һуғылмай үтеп китһәләр, яманһыу булып ҡала хатта. Алла бирһә, Яңы йыл беҙҙең барыбыҙға ла яңы ҡыуаныстар, яңы уңыштар ғына алып килһен инде. Һәр кемдең үҙенә тип әҙерләгән ризыҡы үҙенә, яҡындарына, ҡунаҡтарына насип булһын! Матур йылдар килһен, һәр кемебеҙҙең ниәте, хыялы бойомға ашһын!

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ИЗГЕЛЕКТӘР ЭШЛӘП ЯРЫШАЙЫҠ!



**Тормошта рәхмәтле изгелектәрҙең, миһырбанлыҡтың төрлө өлгөләре менән осрашырға тура килә. Изгелек төшөнсәһен һәр кем үҙенсә аңлағанын, үҙенең күңел торошонан, эске халәтенән, тормош тәжрибәһенән сығып баһалауын да беләм. Мәҫәлән, ҡасандыр үҙе финанс ауырлығын кисергән кеше мохтаждарға бағыусы ярҙамын күрһәтеүҙе иң изге ғәмәл тип иҫәпләй. Ә ҡасандыр ҡаты ауырып түшәктә ятҡан кеше үҙен аяҡҡа баҫтырырға бөтә көсөн һалған медицина хеҙмәткәрҙәрен изге фәрештәләргә тиңләй. Бер ниндәй сәбәпһеҙ яҡынына бүләк тәҡдим итеүҙе лә, автобуста оло йәштәгеләргә урын биреүҙе лә, белмәгән кешегә юл өйрәтеп ебәреүҙе лә, әсә-атаһына ярҙам итеүҙе лә изге эштәр рәтенә индерәләр.**

Бер саҡ бер йәш егет менән ошо темаға әңгәмә ҡорорға тура килгәйне. Уның яуабы бик тә оҡшаны миңә: "Кемгәләр ярҙам иткәне өсөн кеше аҡса һорамаһа йәки башҡа төрлө иғтибар, бүләк, хатта рәхмәт һүҙе өмөт итмәһә - шул изгелек була. Юғиһә, йыш ҡына, хатта рәхмәт тә әйтмәне, тигәнде ишетергә тура килә. Тимәк, ул ярҙамы өсөн ниҙер көткән булып сыға. Быңдай әҙәмдәр рәхмәт һүҙенең ни тиклем ҙур көскә, оло мәғәнәгә эйә булғанын белмәй ҙә булһа кәрәк. Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара, тип, атай-олатайҙарыбыҙ юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. Ысынлап та, ябай ғына ошо һүҙҙе ишетһәң, күңел яҡтырып, донъя нурланып, еңел булып киткән һымаҡ, ошо ваҡытта ихлас әйтелгән рәхмәт ҡабул булалыр, тип уйлайым", - тигәйне ул.

Кеше мөнәсәбәттәре лә баҙар иҡтисадына күсеп барған мәлдә йәшәйбеҙ шул. Бәләкәй генә йомош өсөн дә бүләк өмөт итәбеҙ, кемдер ярҙам иткәне өсөн үҙебеҙ ҙә аҡса һонорға әҙербеҙ. Яңыраҡ күҙәткән бер ваҡиға: автобусҡа ингәндә сумкаларын мендерергә ярҙам иткән үҫмергә оло йәштәрҙәге ханым аҡса һуҙҙы. Егет эргә-тирәһендәгеләрҙең ғәжәпле ҡарашын тойһа ла, ҡағыҙ киҫәген йомарлап кеҫәһенә тыҡты. Ҡатын да, үҫмер ҙә ҡәнәғәт ҡалды, әммә иң мөһим ғәмәл башҡарылманы - рәхмәт һүҙе әйтелмәне. "Изгелектең әжере - изгелек бит, ярҙамы өсөн аҡса түләп, егетте шунан мәхрүм иттегеҙ ", - тинем. "Бирһен, бирергә ҡулымдан килә, бер түгел, ике пенсия алам. Минең рәхмәтте кеҫәһенә һала алмай бит ул", - тине ханым эре генә ҡиәфәттә.

Күптән түгел бер таксист та: "Күптәр хәҙер рәхмәт һүҙен ҡулланмай. Аҡсаһын ҡулға тотторалар ҙа ишекте "шап" ябып сығып китәләр. Ҡайһы берҙә түләмәйенсә ысын күңелдән рәхмәт әйтһендәр ине, тип уйлап ҡуям. Шуғамы икән, эшемдән киңәнес ала алмайым", - тип торғайны.

Һәр кемебеҙҙең йыл һайын иҫке йылды оҙатҡанда, яңы йылдан яңыса йәшәй башлайым, тигән йәшерен ниәте була. Унда беҙ төрлө теләктәребеҙҙе, маҡсаттарыбыҙҙы иҫкә төшөрәбеҙ. Мәҫәлән, яңы йылдан спорт менән даими шөғөлләнәсәкмен, ваҡытымды төрлө сериалдарға бүлмәйәсәкмен йәки тренажерҙарға йөрөйәсәкмен, туғандарыма ваҡытты күберәк бүләсәкмен һ.б. Ошондай уйҙарыбыҙ араһында яңы йылда изге эштәр күберәк ҡыласаҡмын, тигән маҡсатыбыҙ ҙа урын алһын ине.

Әйҙәгеҙ, ысынлап та, бер-беребеҙгә мәрхәмәтлерәк булайыҡ, бер-беребеҙгә эскерһеҙ ярҙам итәйек. Тирә-йүнебеҙҙәгеләргә яғымлыраҡ, ихласыраҡ булайыҡ. Зарланмайыҡ, шөкөр итәйек. Күркәм сифаттарыбыҙ менән бер-беребеҙҙең тормошон биҙәйек, ярышып-уҙышып хәйерле эштәр башҡарайыҡ. Беҙҙең арабыҙҙа һәр беребеҙҙең йылы ҡарашына, яҡшы һүҙенә, ярҙамыбыҙға, иғтибарыбыҙға, яратыуыбыҙға мохтаждар бик күп. Бәйғәмбәребеҙ, ярҙам итер өсөн зәғифтәрҙе (ауырыуҙарҙы) эҙләп кенә йөрөгөҙ, арағыҙҙа шундайҙар булып тороуы сәбәпле, һеҙгә ярҙам да, йәшәр өсөн ризыҡ та бирелеп тора, тигән. Ул шулай уҡ, әҙәм балаһы саң бөртөгө тиклем йәки унан да кесерәк изгелек ҡылған булһа ла, ул юғалмай; кем дә кем кескәй генә насарлыҡ эшләй икән, ул да онотолмаясаҡ, уның да яҙаһы буласаҡ, тигән һәм кешеләргә күберәк изгелек эшләргә бойорған. "Изгелектәрҙә, хәйерле эштәрҙә бер-берегеҙ менән уҙышығыҙ, ярышып йәшәгеҙ", - тигән. Әйҙәгеҙ, шулай итәйек, изгелектәр эшләп ярышайыҡ!

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЛАЛАРҒА АЙЫҠЛЫҠ ӨЛГӨҺӨ КҮРҺӘТӘЙЕК



**Етеп килгән Яңы йыл менән ҡотлар алдынан милләттәштәргә тап ошо ваҡытта әйтә торған һүҙебеҙ бар. Иҫке йылды оҙатҡан, ә яңыһын ҡаршылаған тылсымлы миҙгелде әле һыҙланмай көтөп алғаныбыҙ юҡ. Ниңә? Бер уйлаһаң, ялтырауыҡлы, күңелле, ап-аҡ был миҙгелде ҡырылған күңел менән ҡаршыларлыҡ сәбәп тә юҡ һымаҡ. Икенсе яҡтан ҡараһаң - бар икән шул!**

Белгестәр билдәләүенсә, ошо матур байрамда ҡулланылған алкоголле эсемлек-наркотиктар шауҡымы, шандауы арҡаһында төрлө зыян күргән, хатта һәләк булған граждандарҙың һаны йыл да йөҙәр меңгә етә икән. Быға өҫтәп, халыҡтың һаулығына ниндәй зыян янауын, эскелек арҡаһында күпме ғаиләнең ыҙғышыуын һәм башҡа күренештәрҙе иҫәпкә алғанда, Яңы йыл байрамдарын айыҡ үткәреү зарурлығы аңлашыла төшә, буғай.

Иғтибар итһәгеҙ, Яңы йыл байрамдарында телевизорҙа күрһәтелгән тапшырыу-фильмдарҙа әүҙем, йәки һиҙҙермәй генә "Яңы йылда шампан шарабы булһа ла эсеү кәрәк" тигән фекер үткәрелә. Шулай булғас, телевизор ҡараусылар, телевизор геройҙарынан күрмәксе, бокал сәкәштереп, эсеп ебәреүҙе әллә ни күрә. Бөтөн тәртипһеҙлектәр ошо беренсе бокалдан башлана ла инде.

Урам тәьҫиренән бигерәк, балаларыбыҙ беҙҙең тәрбиәгә еңелерәк бирелә. Яҡынса 92 процент осраҡта беренсе рюмканы балаларға ата-әсәләре тоттора. Әйҙәгеҙ, балаларыбыҙға ыңғай өлгөнө үҙебеҙ күрһәтәйек, айыҡ тормошто йәшәү нормаһы итеп алайыҡ! Ул ваҡытта бер ниндәй телевизор ҙа, төнгө урам да ғәзиздәребеҙгә ҡурҡыныс-хәүеф менән янамаҫ.

Яңы йылдан һин үҙең нимәләр өмөт итәһең, милләттәш? Моғайын, һаулыҡ, ғаилә, донъялар именлеге һәм бәхеттер. Бәхет өмөт итәһең икән, Яңы йыл байрамын бар ғаиләгеҙ, дуҫтарығыҙ, туғандарығыҙ, хатта күршеләрегеҙ менән айыҡ үткәрегеҙ!

**Марат АБДУЛЛИН.**

***✓ Әсәһе йәшендәге күпме яңғыҙаҡ ҡатындар бар, уларҙың һәр береһе бәхет тураһында хыяллана. Бына шуны белеп, бик оҫта файҙалана бәғзе боҙоҡ әҙәмдәр. Күпме ханымдар аҡса күсерәләр, күпмеһе йортһоҙ тороп ҡала.***



**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**

# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

**Повесть**

Сара терт итеп ҡалды. Ул иптәш ҡыҙҙарының хәрбиҙәр менән хатлашҡанын белә. Тегеләр, йәнәһе, Американан, йә Сириянан яҙалар. Матур-матур фотолар ҡуялар. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ҡыҙҙарҙың документтары менән ҡыҙыҡһына башлайҙар. Ҡайһы берәүҙәренең Рәсәйгә килер өсөн аҡса һорағандары булды, шуға ла әсәһенең хәбәре Сараны һағайтты ғына.

- Әле ул Өфөнән ситтә йорт һала. Осрашайыҡ тип өгөтләгәне юҡ. Хат ҡына алышабыҙ. Минең менән бер йылғы, хатта бер көндә тыуғанбыҙ. Шуныһы ҡыҙыҡ, - тип дауам итте Линиза ханым.

Аҙаҡҡы һүҙҙәре ышанмау тойғоһон көсәйтте генә.

- Аҡса һорамаймы?

- Юҡсы, - Линиза апайҙың тауышы үҙгәрҙе.

- Әсәй, интернетта аферистар етерлек. Аҡса һала күрмә.

- Нимә, мин аферист менән нормаль кешене айырмай тиһеңме? Үҙе өс йөҙ мең аҡсаһын минең аша бер кешегә ебәрҙе. Тимәк, хәлле. Карточка аша эш итәләр, һалымдан ҡотҡарыу юлы тинеме...

- Уның бер тинен дә алма, үҙең дә тотторма. Бөтөнләй белмәгән кеше бит.

- Бөтөнләй үк түгел. Бер мәртәбә осрашыуға килергә тейеш ине, командировкаға ҡапылғара китергә тура килгән. Шуға ҡарамаҫтан, ғәфү үтенеп, үҙенең иптәше аша бер ҡосаҡ гөлләмә ебәрҙе. "Ҡул аҫтындағы ярҙамсым", тине. Бер яҡ күҙе тартышҡан, бәләкәй генә ирекәй килеп, сәскә тотторҙо, сәләм тапшырҙы һәм шуның менән вәссәләм, китеп тә барҙы.

- Әсәй, ғүмер буйы беләм тигән кеше лә ҡай саҡ көтөлмәгән яғын күрһәтә...

- Бына шуға ла әйтәм бит, ҡыҙым, ҡыҫылма кеше донъяһына. Бер аферист ҡыҙға ярҙамлашып, үҙең саҡ янмай ҡалдың. Ярар, ағайың бар, һине йәһәт ҡотҡарҙы, юғиһә, ошо көнгә тиклем артыңдан журналистар ҡалмаҫ ине. Үҙеңдең эшең-ашың бар, шулай булғас, ҡалғаны ни бысағыма кәрәк һиңә? Төпсөнмә.

Әсәһе менән бәхәсләшеүҙең файҙаһыҙ икәнен белеп бөткән Сара бүтән был турала һүҙ ҡуҙғатманы. Линиза апай тынысланып, аш бүлмәһенә инеп китте, ул сәй ултыртҡансы, Сара йәнә ноутбукка күҙ һалды, яңы таныштың сәхифәһендә алама ғына бер фото бар, ниндәйҙер яҙыу күҙенә сағылды, тырыша торғас, "Мең ыуаҡ-төйәк" тигән вывеска икәнен аңланы. Эшләгән предприятиеһы шулай аталамы, әллә торған йорто шул тирәләме? Йәнә лә телефонына Ганстың аваһын төшөрөп алды.

Бәлки, һеңлеһенә барып сығырғалыр? Юҡ һеңлеһенең кәйефен ҡырырға ярамай. Ул үҙенең өс улы менән бәхетле. Нисек шундай саҡта уның өҫтөнә йөк һалырға? Сара ҡайтырға сыҡты, подъезы төбөнә килеп еткәйне генә, эргәһендә сағыу тауыш яңғыраны.

- Дуҫҡай, Сара, һин ни хәлдә?

Риана! Нисек ҡапыл пәйҙә булды ул? Күрмәй ҙә ҡалаһың, өҫкә килә лә ябырыла, һис ҡотолоу юҡ. Ҡарауыллап тормағандыр бит?

- Сара, әйҙә, ресторанға алып барып һыйлайым үҙеңде! Һинең кеҫәгә төшөр тип ҡурҡаһыңмы әллә? Алина һыйлай.

- Ҡайҙа үҙе?

- Хәҙер килеп етә. Бөгөн арыу ғына аҡса эшләгән! Анау барға инәйек. Мин унда үҙ кеше.

Үҙ хәсрәтең эсендә ҡалып, аҡылдан яҙырға була. Сараға ауыр уйҙарҙан арынырға, төшөнкөлөктән нисек тә ҡотолорға кәрәк. Нишләп әле ул күңел асмаҫҡа тейеш? Шулай тине лә, күршеһененең артынан эйәрҙе. Эйе, Риана был барға йыш инәлер, бармен тегене күреү менән баш ҡағып иҫәнләште. Бейек бүкәнгә менеп ҡунаҡланылар.

- Альберт, ике "Астерикс"! Наилевна, һиңә, бәлки, икенсе төрлө коктейль кәрәктер?

Сара, "Миңә барыбер" тигәнде аңлатып, яурынын ғына һикертте.

Рианаңың теле сиселде. Ул үҙенең әхирәттәре менән ҡала буйлап ниндәй ресторанда, барҙа булғандарын, ниндәй мажараларға тарығандарын, кемде төп башына ултыртҡандарын кинәнеп һөйләй. Ә Сараның мейеһен тик бер төрлө уйҙар сүкей. Рауил Әлфиәне рестораңдар буйлап йөрөтмәйме икән? Шундай татлы хат яҙырлыҡ булғас... Нисек үҙ ирем мине ошоға тиклем алдап йәшәгән? Күптәнме хыянаты?

Ваҡыт үтә бирҙе, Алина күренмәне, түҙемлеген юйған Риана дуҫына туҡтауһыҙ шылтыратырға кереште.

- Сволочь, телефонды алмай! Көтәйек, килер ул.

- Һиңә лә етте, Риана! Артыҡ була башланы...

- Ҡайҙан артыҡ булһын, таман ғына! Артығына аҡса кәрәк! Аҡсалы ир табып булманы... Уй, һин белһәң, Мәскәүҙең, Санкт-Петербургтың бөтөн фәхишәләре хәҙер Себерҙә ти бит. Унда вахтовиктарға арыу түләйҙәр. Ә фәхишәләр ҡайҙа аҡса, шунда йыйыла.

Был хәбәре бөтөнләй кәйефте төшөрҙө.

- Миңә ҡайтырға ваҡыт, - тине Сара ҡаты тауыш менән.

Риана уны ишетмәне лә, йәнә барменға ҡысҡырҙы.

- Альберт, миңә виски!

Бармен ҡыбырламаны:

- Былары өсөн түләгеҙ, - тине.

- Хәҙер Алина килә, түләр.

Бармен баш сайҡаны. Риана тегегә аҡайҙы.

- Беҙ бында йыш байрам итәбеҙ. Һиңә күпме "сәйлек аҡса" ҡалдырып китәбеҙ, мейеһеҙ. Нисек минән түләү талап итәһең? Үҙеңдең даими клиентыңды таламаҡсыһыңмы! - Һөйләнә-һөйләнә Альберт ҡаршыһына килеп баҫты. Кофтаһын күтәрҙе. - Бына, ҡара. Йә, күрҙеңме матур түштең ҡалай икәнен! Бушлай бер нәмә лә юҡ! Иҫәп-хисапты өҙҙөкмө?

Ауыҙын асҡан бармен ҡатып ҡалды. Сара Риананы барып тотоп алды.

- Һеҙ ғәфү итегеҙ, ғәфү итегеҙ, - тине барменға ғәйепле ҡараш менән. Риана сайҡала-сайҡала ишеккә йүнәлде.

- Нимә ғәфү үтенәһең? Ул ҡарун. Беҙҙән "сәйлек аҡса" алғанда бер ҙә тартынмай.

Сара һуҡмыш ҡатынға нимә тип өндәшһен инде, ҡултыҡлап алды ла, фатирына тиклем илтеп ҡуйҙы. Әллә Рианаңың ҡыланышы күңел торошон үҙгәрттеме, эстәге хәсрәт бүҫкәрә төштө. Рауилы Себерҙә эшләй торһон, мал да ашаған еренә кире ҡайта. Ире алдаша белмәй, Сара һығып алаҫаҡ унан дөрөҫлөктө!

Хәҙер бына Ганс-манс исеме тынғылыҡ бирмәй уға. "Гангстер" тигән һүҙгә оҡшап тора бит әле. Ҡушаматмы ул, әллә исемме? Сара ноутбукты тоҡандырҙы һәм селтәрҙән Ганстың фотоларын эҙләргә тотондо. Һиҙемләүе дөрөҫ, бер танышыу сайтында ошо уҡ фотоны күрҙе, тик унда исеме бүтән. Шул уҡ сайтта бер таныш ҡатындың исем-фамилияһын күрҙе. Ҡыҙыҡһыныу еңде, Сара уға сәләм хаты ебәрҙе. Яуап оҙаҡ көттөрмәне. Римма исемле ханым уға Ганс менән танышҡанлығы, тик уның сәйер ҡыланышынан шикләнеп, бәйләнеште өҙөүен яҙҙы.

Әсәһе йәшендәге күпме яңғыҙаҡ ҡатындар бар, уларҙың һәр береһе бәхет тураһында хыяллана. Бына шуны белеп, бик оҫта файҙалана бәғзе боҙоҡ әҙәмдәр. Күпме ханымдар аҡса күсерәләр, күпме йортһоҙ тороп ҡалалар - ундай хәбәрҙәр менән интернет тулған. Тик башы әйләнгән ҡатын-ҡыҙ быға иғтибар итмәй, һәр береһе үҙен берҙән-бер һәм уны берәү ҙә алдамай, тип ышана. Сара атаһын иҫкә төшөрөп, илап алды. Әсәһе бәхет эҙләй... Әгәр ҙә әсәһе әйткәндәр дөрөҫ булһа, Гансты Черниковка тирәһендә белешергә кәрәк. Ә ниңә эҙләп ҡарамаҫҡа? Сара ҡараңғылыҡ эсендә һәрмәнеп йөрөмәй, уның ҡулында әҙ генә мәғлүмәт тә бар.

Еңеү урамын табыр өсөн Себер китәһе түгел, ул Черниковкалағы билдәле урамдарҙың береһе. Дөрөҫ, Сараның был биҫтәлә булғаны юҡ тиерлек, күп урындары уға таныш түгел, шуға ашыҡмай, машинаһын әкрен генә йөрөттө. Арттан килгән йөрөтмәндәр ризаһыҙ пипелдәтеп алһалар ҙа, әллә ни иҫе китмәне. Бында иҫке ике ҡатлы йорттар байтаҡ икән әле. "Мең ыуаҡ-төйәк" тигәне ҡай тирәлә? Сараға бәхет йылмайҙы. Ике сағыу һары өй алдына килеп туҡтаны ул. Юлда барғанда уҡ план ҡорғайны, шуға туп-тура бер өйҙөң подъезына барып инде һәм күҙгә иң элек сағылған ишектең төймәһенә баҫты. Эстән тауыш ишетелде: "Кем унда?"

- Миңә Ганс Гасанович кәрәк!

Ишек асылды. Танауын сырыштырып, күҙлек кейә-кейә тумалаҡ бер әбей уға тексәйҙе.

- Кем ул Ганс? - тип һораны.

- Ну, ул... - Сара нимә тип әйтергә белмәне. - Хәйер, үҙем менән башта таныштырайым. Мин социаль хеҙмәткәр. Пенсионерҙарҙы барлап йөрөйөм. Шундай ҡарт барлығын әйткәйнеләр. Нисәнсе фатирҙа торғанын яҙып алмағанмын.

- Белмәйем ундай кешене. Етәксегеҙ алмашыныу менән һеҙ ҙә үҙгәрҙегеҙ. Һуңғы арала бер хәл белешкәнегеҙ юҡ, хамелеон шикеллеһегеҙ. - Әбей һуҡранырға тотондо. - Аҙыҡ-түлегем бөтөп китте. Миңә яңы йәшелсә кәрәк. Нимә ҡарап ҡаттың, үт!

Фатирҙан күптән йыуылмаған иҫке түшәк-ҡаралдының еҫе аңҡый. Бер заман әбей күнәк менән сепрәк килтереп һалды. Иҙәнгә ымланы. "Был да социаль хеҙмәткәр эшенә инәме икән?" Һорашыу урынһыҙ. Сара йәһәтләп һыу алып, иҙәнде йыуа башланы. Әбей уның артынса ҡарап тикшереп йөрөнө. Ҡайһы бер урындарын ҡабат һөртөргә тура килде. "Өйөмдөң иҙәнен бер аҙна йыуған юҡ ине, кеше бысрағын таҙартып йөрө инде..." тип эстән һуҡранды Сара. Ләкин, ҡалайтһын, бөгөнгө "вазифа"һы уға ошоно эшләргә ҡуша. Эшен тамалағас, ҡарсыҡ:

- Күрше подъезда Трофимыч тигән ҡарт тора. Беләһеңдер уны? Белмәһәң, һиндәге исемлектә барҙыр. Ул Өфөлә тыуған кеше, ғүмер буйы ошонда йәшәне. Дөрөҫөн әйткәндә, мин уны күрә алмайым. Сволочь булды ул. Ғүмер буйы бур булып ҡалды. Хәҙер генә аяҡтары бик эшкинмәй, юғиһә... Ну, Черниковканы ташлап китмәне. Хатта төрмәлә ултырып сыҡҡас та, кире ошо Черниковкаға ҡайтты. Бына ул ҡарт бүренең белмәгән кешеһе юҡ! Өфөнөң бөтөн тарихын һөйләр.

Сара йәһәтләп сығыу яғына ыңғайланы. Мыжыҡ ҡарсыҡтан ҡотолоуына ҡыуанып, иркен тын алды. "Социаль работник" тигәнде ҡалай йәтеш уйлап сығарҙы! Һәр кем уға ишек асасаҡ. Уға хәҙер Трофимычты күрергә кәрәк! Сара күрше подъезға ингәс, был юлы ишек төймәһенә һаҡ ҡына баҫты. Бер заман ишек киң асылып китте. Яңаҡтары эскә, күҙҙәре төпкә батҡан ҡарт күренде. Трофимыч! Бәлийерәп бөткән ҡарт. Уны ышандырыр өсөн нимә әйтерен алдан уйлаған Сара ҡыйыу ғына өндәште.

- Мин "Архяҡлау" берләшмәһе ағзаһы. Беҙ Өфөнөң боронғолоғон һаҡлау, мөмкин булғандарын кире тергеҙеү, архитектура матурлығын юҡҡа сығармаҫ өсөн көрәш алып барабыҙ. Чиновниктар менән көрәшеүе ауыр. Тарихи, боронғо урындар хәүеф аҫтында, сөнки Мәскәүҙең аҡса моҡсайҙары үҙәк урындарҙа йорттар һалырға тырышлыҡ итә.

- Ох, тәтелдәйһең генә, автоматтан атаһыңмы ни!

- Ғәфү итегеҙ, беҙ әлеге мәлдә ҡала халҡынан һорау алыу үткәрәбеҙ. Төп һорауҙар - ҡайһы урындар боронғо һәм улар нимәһе менән иҫтәлекле? Һеҙҙең кеүек Өфө тарихын белгән кешеләрҙе эҙләйбеҙ. Һеҙҙең ярҙам кәрәк, Трофимыч!

- Бик ҡыҙыҡ, - ҡарт бүкәнгә барып ултырҙы, яңағы эскә батҡансы тәмәке һурҙы, Сараға ҡарап, борлатып өрҙө. Ҡатын ҡымшанманы, күҙҙәрен ҙур асҡан килеш тора бирҙе. Алда торған бурысты үтәү хаҡына Сара был һаҫыҡҡа ла түҙергә тейеш. Ҡарттың күҙҙәре хәйләкәр төлкөләй ҡыҫылды, ул көтмәгән һорау бирҙе. - Әҙерәк һуғабыҙмы?

- Мин эш мәлендә ауыҙыма алмайым. Тик эш буйынса йөрөйөм. Черниковкала һеҙҙе яҡшы беләләр.

Хәйләкәр ҡарашлы ҡарт унан күҙен алманы. "Әллә минең алдағанды белеп тора инде, шайтан..."

- Нисә тапҡыр төрмәлә ултырып сығырға тура килгәнен әйтмәнеләрме? Был кибеп бөткән бәлйерәгән ҡартлас зиндандарҙа ултырырлыҡ нимә эшләне икән, тип уйлайһыңдыр, ә? Тышҡы ҡиәфәт алдаусан була. Бына әле беҙҙе тажзәхмәт тигән бер сир дер ҡалтырата бит? Үҙе күҙгә күренмәй, ә донъяны ҡотҡара торған бөтөн сурепгеройҙарыбыҙ - сәйәсмәндәр, атлеттар, көрәшселәр - бөтәһе лә әллә ҡайҙа булды ла ҡуйҙылар. Тауыш-тындары ла сыҡмай, юҡ булдылар. Мин ҡай берәүҙәр өсөн бына шундай вирус булдым. Төҙәлдеме икән был ҡарт тип уйлайһыңдыр? Ә нимә төҙәлеү? Мин йәшәү өсөн үҙемсә көрәштем. Әгәр ҙә минең көрәш алымы хоҡуҡ һаҡлау органдарының ҡарашына тура килмәй икән... Был ғына мине бик алама, бөткән әҙәм тигәнде аңлатмай. Хәйер, миңә барыбер. Нимә кәрәк һиңә? Архитектура? Юҡ, йорттар өсөн көрәшмәнем. Черниковкала улар булманы ла. Үҙәктә бар ине шәп боронғо өйҙәр, күпселеген емерҙеләр. Үҙең әйтмешләй, Мәскәүҙең аҡса тоҡсайҙары улар урынына ҙур-ҙур йорттар һалды. Берәүҙән дә һорап торманылар. Дөрөҫөн әйт, һиңә нимә кәрәк?

Яуап урынына Сара Трофимычтың алдына Ганстың фотоһүрәтен һалды.

**(Дауамы бар).**



**Республика карантин сиктәрендә лә халыҡты сәнғәттән айырмау юлдарын табып килә. Барлыҡ мәҙәниәт усаҡтары кеүек үк, Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры ла тәғәйен шарттарҙа тамашасыларын хеҙмәтләндереүен дауам итә. Асылда, коллектив эсендә артыҡ үҙгәрештәр юҡ: актерҙар шулай уҡ репетициялар үткәрә, һөйләшеүҙәр ойоштора, әҫәрҙәр өйрәнә, яңы пьесалар менән таныша. Был ижади процесс онлайн да, оффлайн да булырға мөмкин, әммә ул туҡталмай. Театр һынлы театрға ошондай шарттарҙа эшләү нисегерәк йоғонто яһай? Был хаҡта Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт театрының художество етәксеһе Айҙар ЗАРИПОВ менән һөйләштек.**

# ТАМАШАСЫЛАРЫБЫҘ...

## беҙҙең хуплаусы ла, тәнҡитсе лә

➔ **Бөгөнгө заман эш алымдары театр, кинотеатр, филармония кеүек сәнғәт-мәҙәниәт учреждениеларының йәшәйешен ҡатмарлаштырҙы. Һеҙҙә был проблема нисегерәк хәл ителде? Йыл ни рәүешле үтте? Ниндәй эштәр башҡарылды?**

- Барыһы кеүек, беҙ ҙә үҙизоляцияла булып алдыҡ. Әммә был театр ябылып торҙо тигәнде аңлатмай. Үҙизоляция ваҡытында ла бер нисә проект эшләнек. Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршы алыуға ла шундай шарттарҙа әҙерләндек һәм "Утлы йылдар ауазы" тип аталған үҙенсәлекле программа менән сығыш яһаныҡ. Һуғыш йылдарында фронттан килгән һәм тылдағылар тарафынан фронтҡа яҙылған хаттарҙы йыйҙыҡ. Быны өсөн әллә күпме фронтовик ғаиләләре менән аралашырға тура килде. Бөгөнгө көндә ветерандарҙың ҡатындары ла, үҙҙәре лә юҡ иҫәбендә, шунлыҡтан, ейәндәре инәйолатайҙарынан ҡалған архивтарҙы ҡутарып, эҙләп табышып бирҙеләр. Хаттар башлыса ғәрәп шрифты, латин хәрефтәре менән яҙылғайны. Актерҙар шуларҙы тәржемәләп, хәтирәләрҙе тергеҙеп, күнелдәргә үтеп инерлек хаттар аша һөйләшеү, хаттар аша аралашыу, хис-тойғоларҙы белдереү нигеҙендәге проектты тәҡдим итте. Был алым тамашасыға бик оҡшаны, күптәр уй-теләктәрен яҙҙы, кемдәрҙер кемдәрҙелер таныны, иҫенә төшөрҙө... Ысын тарих булды был.

Унан тағы "Хикәйәләр эстафетаһы" үткәреп, Айлибаныу Ҡаһарманованың хикәйәләрен уҡыныҡ. Актерҙар эстафетаны бер-береһенә тапшыра-тапшыра тотош бер аудио-китап барлыҡҡа килтерҙе. Бында ла комментарийҙар аша фекерҙәр яҙылды, тыңлаусылар үҙ һүҙен әйтә торҙо, йәғни аралашыу йәнле һәм хатта бәхәсле лә барҙы.

"Өс режиссер конференцияһы" тигән проект та ҡыҙыҡлы булды. Мин - Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының художество етәксеһе, Республиканың заманса режиссура һәм драматургия үҙәгенең художество етәксеһе Зиннур Сөләймәнов һәм Өфө сәнғәт институты уҡытыусыһы, доцент Римма Харисова менән бергәләп бөгөнгө театр мәсьәләләре тураһында һөйләштек. Мәҫәлән, онлайн театр кәрәкме ул, уның тамашасыға йоғонтоһо ни саҡлы, тигәнерәк һорауҙар күтәрелде. Саҡырылған ҡунаҡтарыбыҙ Зөһрә Бураҡаева, Айнур Ғайсаровтар менән дә әңгәмәгә индек. Һәм был проект беҙҙә әлегә тиклем дә дауам итә, һәр конференцияла театрға ҡағылышлы ниндәйҙер һорауҙар уртаға һалып һөйләшелә, төрлө ҡунаҡтар саҡырыла, белгестәр йәлеп ителә.

Үҙизоляция ваҡытында шулай уҡ яңы әҫәрҙәр өйрәнеп, ролдәр бүлеп, репетициялар ҙа үткәрҙек. "Урланған кейәү"ҙе, мәҫәлән, шулай ситтән тороп әҙерләнек. Быларға өҫтәп, балалар өсөн әкиәт кистәре ойоштороҙоҡ, аудио әкиәт китаптары донъяһын байыттыҡ. Мостай Кәримдең шиғырҙар циклын тематик форматта тәҡдим иттек. Был яҙмаларҙы мәктәп уҡыусылары өсөн дә, институттар өсөн дә, мәҙәниәт усаҡтары өсөн дә сара, дәрес ҡулланмалары итеп рәхәтләнеп тотонорға буласаҡ. Бына шундай ижади эштәр менән мәшғүл булды театр актерҙары "өйҙә ултырғанда".

Үҙизоляциянан сыҡҡас та ихласлап эшкә тотондоҡ, сөнки һәр кем был мөхитте, аралашып хеҙмәт итеүҙе һағынғайны. Шул илһам һәм дәрт шауҡымында бер-бер артлы өс премьера сығарҙыҡ. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй Ватан мәҙәниәте" проектында Әнғәм Атнабаевтың "Хушығыҙ, хыялдарым" пьесаһын ҡуйҙыҡ. Уның режиссеры Азат Йыһаншин булды. Икенсе премьера Рәфис Ҡуйбағаровтың "Минең йөрәк һиндә тибә" тип аталған әҫәре буйынса сәхнәләштерелде. Өсөнсө премьера Зиннур Сөләймәнов ҡулы аҫтында Аманулланың "Әлепле әртистәре" булды.







➔ **Нисек уйлайһығыҙ, халыҡ бөгөн ниндәйерәк жанрҙарҙы яҡшыраҡ ҡабул итә, тематик төрләлөктө нисек һайлай? Тамашасы ихтыяжын ҡайһылайыраҡ билдәләргә була был өлкәлә?**

- Был һорау беҙҙе лә һәр ваҡыт борсой һәм беҙ ҙә уға яуап эҙләйбеҙ. Шул маҡсатта түнәрәк ҡорҙар ҙа йыйғаныбыҙ булды, интернет аша ла һорауҙар ҡуйбыҙ, халыҡ фекерен ишетергә теләйбеҙ. Һәм, ысынлап та, яуаптар төрлөсә була. Кемдәрҙер, ауыр эш көнөнән һуң драма ҡарап ултырыу ауыр, ти. Икенселәр, мин театрға кисерештәр артынан киләм, ти. Өсөнсөләр, тормош мәшәҡәттәрен онотоп, көлөп ҡайтҡым килә, юмор күберәк булһын, ти. Әммә, нисек кенә булғанда ла, тамашасы беҙгә эмоциялар эҙләп килә. Һәм беҙ уларҙың был ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерергә тейешбеҙ. Унан тыш, был тамашасы төрлө йәштә, төрлө ҡараштағы һәм төрлө ниәттә лә бит. Ошо яҡтарҙы ла күҙ уңында тоторға тура килә. Әммә театр тамашасы теләгенә эйәреп кенә китергә лә тейеш түгел. Театр ул үҙе мәҙәни мөхит тәрбиә итеүсе, ул үҙе әҫәрҙәр аша тәрбиә йоғонтоһо яһауҙы, уй-фекерҙәргә этәреүҙе, хис-тойғолар уятыуҙы маҡсат итеп ҡуя.

Бөгөн барлыҡ халыҡ йомолоп интернет эсендә йәшәй. Интернет киңлектәрендә бер-береһен әрләйҙәр, кәмһетәләр, шунда уҡ танышалар ҙа, өйләнешәләр ҙә. Бына шул темаға арнап, "Кира, прости Артема" тигән әҫәр сәхнәләштергәйнек. Йылы ҡабул ителде, сөнки был бөгөн актуаль тема.

Театрҙа үтеп торған йәш режиссерҙар семинарҙары, режиссер мәктәптәре лабораториялар ҙа үҙ һөҙөмтәһен биреп килә. Тамашасыға ҡыҙыҡлы булырҙай темалар ана шул аралашып һөйләшкән мәлдә, бәхәс эсендә тыуа, ғәҙәттә. Үрҙә телгә алған "Минең йөрәк һиндә тибә" лә яңылыҡ, яңы һулыш алып килде театр сәхнәһенә. Сөнки ул режиссерҙар семинары һөҙөмтәһендә тыуған әҫәр булды.

➔ **Драматургтар юҡ, тиҙәр, драма әҫәрҙәренә ҡытлыҡ, тиҙәр... Ә яңынан-яңы әҫәрҙәр ҡуйыла, премьералар сығарыла. Нисек былай?**

- Драматургтар бар ул һәм әҫәрҙәр ҙә бар. Миҫалдарҙан күреп торабыҙ. Бары драматургтар ҙа эҙләнеү өҫтөндә. Улар ҙа үҙ темаларын, геройҙарын, режиссерҙарын, театрҙарын табырға тейеш. Драма әҫәре ижад итеүселәр театрҙы тамашасы менән бәйләүсе, ул халыҡтан алып килгән күренеште театрҙа эшкәртеп, кире халыҡҡа сығарыусы. Уларҙың киң даирәле, интеллектуаль кимәлле, белемле, шармлы, үҙенсәлекле булыуы зарур.

➔ **Театр ирекле ижадсымы ул? Мәҫәлән, режиссер үҙе нимә теләй, шуны ҡуя аламы? Әҫәрҙәр, репертуар өлкәһендә сикләү булырға мөмкинме?**

- Бөгөн театрҙың мөмкинлектәре киңәйҙе. Бөгөн ул ниндәй теманы ла күтәрә ала. Был сәйәсәт тә, экологик һорауҙар ҙа, тарихи ысынбарлыҡ та, милли геройҙар, шәхестәр яҙмышы ла булырға мөмкин. Шунлыҡтан беҙ, заман режиссерҙары, драма әҫәрҙәре сиктәрендә генә түгел, ә проза жанрындағы романдарға ла мөрәжәғәт итә алабыҙ хәҙер. Шулай уҡ театр өлкәһендә әҫәрҙең яҙмышын ниндәйҙер сикләү-сикләмәү түгел, ә тамашасының ҡабул итеү-итмәүе хәл итә. Ҡайһы бер пьесаларҙы ҡарап, был бөгөн беҙгә кәрәкме ул, тигән һорау ҙа тыуа. Ошо һорау тыумаҫлыҡ, тема тамашасы күнеленә инеп ултырырлыҡ булһа, театрҙың да, режиссерҙың да хеҙмәте аҡлана.

➔ **Беҙҙең заман тамашаһын нисек баһалайһығыҙ?**

- Тамашасының мөмкинлектәре киң хәҙер. Ул интернет, телевидение аша ла төрлө ил театрҙарындағы теләһә ниндәй әҫәрҙе ҡарай ала. Шул арҡала талаптары ла артты. Бик көйәҙ бөгөнгө тамашасы. Театрҙы мәҙәни усаҡ итеп түгел, ә хеҙмәтләндереү үҙәге итеп тә ҡарап ҡуя. Үкенескә ҡаршы, күптәр спектаклгә килеүҙе күңел асыу сараһына ла әйләндереп ебәрә. Әлегерәк халыҡ парад кейемендә, туфлийҙарҙа, байрамса төҫтә килә ине театрға, бөгөн былар артҡы планға күсте, театрҙың талаптары ла йомшарҙы, тамашасы ла үҙенә ҡарата бушаҡланды.

Шулай ҙа тамашасы беҙҙең иң ҙур ҡунаҡ та, тәнҡитсе лә һәм беҙ уны хөрмәт итәбеҙ. Заманалар нисек кенә үҙгәреп, тамашасы ниндәй кенә талаптар ҡуйғанда ла, театр үҙ маҡсатына ярашлы, йәғни халыҡтың мәҙәниәтен, тарихын, телен, фольклорын, ауыҙ-тел ижадын йәшәтеүсе донъя булып ҡала килә.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҢДЫ КӘМҺЕТМӘ

■ Плимут университеты психологтары яман шеш менән ауырыусы өлкәндәрҙе тикшереп, уларҙың барыһын да бер нәмә берләштереүен асыҡлаған. Тикшеренеү барышында уларҙың яуаптарын астма, диабет, йөрәк ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙың яуаптары менән сағыштырғандар. Һөҙөмтәлә яман шеш менән ауырыусыларҙың 79 проценты бала саҡта физик яҙаларға дусар ителеүе билдәле булған. Бындай стрестан һуң организмда яйлап онкологик сир барлыҡҡа килгән. Астма менән ауырыусыларҙың яртыһын ғаиләләрендә кәмһеткәндәр. Тимәк, бала саҡта алған стресс өлкәнәйгәс яман шеш, астма, йөрәк сирҙәренә алып килеүе ихтимал.

■ Киҫкен респираторлы вирусլы инфекция эләктереү хәүефе кешенең физик әүҙемлеге арткан һайын кәмей бара. Дания ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, был бактериаль инфекцияларға ла ҡағыла. Ғалимдар 3 йыл дауамында 18 мең кешенең йәшәү рәүешен тикшергән. Хатта түбән физик әүҙемлек тә бөтөнләй хәрәкәтһеҙ йәшәүгә ҡарағанда бактериаль инфекция эләктереү ҡурҡынысын 10 процентҡа кәметә. Был бигерәк тә гүзәл затҡа ҡағыла.

■ Әсә менән бала араһындағы бәйләнеш уларҙың беренсе тапҡыр бер-береһен күргәс түгел, ә ауырға ҡалғас та нығына. Ошо мәлдә әсә менән бала араһындағы эмоциональ контакт ни тиклем нығыраҡ булыуынан баланың физик һәм аҡыл үҫеше тора. Квинсленд университеты ғалимдары пренаталь бәйләнеш мәсьәләләренә ҡағылған тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң ошондай һығымтаға килгән. Буласаҡ әсәнең тыуасаҡ сабыйына эҫенеү процесы боҙолһа, бала аҙаҡтан насар һөйләшеүе, насар атлап китеүе бар, психик үҫеше лә аҡһауы ихтимал.

■ Йомортҡаның ҡабығы сәләмәтлек өсөн файҙалы. Бәктиһән, ул үҙенең составы буйынса һөйәк тукымаһына оҡшаған һәм унда эремсек һәм йомортҡаның үҙенә ҡарағанда кальций күберәк. Венгрия тикшеренеүселәре үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, йомортҡа ҡабығында организм өсөн кәрәкле бөтөн элементтар бар. Бынан тыш, ул рахит һәм анемия менән яфаланыусы балаларға файҙалы.

■ "Быуындар һыҙлай, көн боҙолор, ахыры", тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Ғалимдар хроник ауырыу менән һауа шарттары араһындағы бәйләнеште тикшереп ҡараған. "Болотло, ауырытыуы ихтимал" тип аталған уникаль проект идеяһы Манчестер университеты ғалимдарыныҡы, улар уҡ уны тормошҡа ашырған. Ғалимдар смартфон өсөн махсус аппликация булдырған, унын ярҙамында һәр кем ауырыуы хаҡында көндәлек алып бара ала, ә программа яҙмаларҙы һауа шарттары менән сағыштырып барған. Проектта 9 мең кеше ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, һауа боҙолоуы менән хроник ауырыуҙар араһында бәйләнеш бар. Был асыш табиптарға ауырыуҙарҙы яҡшыраҡ аңларға ярҙам итәсәк. Проект әлеге көндә лә эшләй.

ЙЫЛ ЙОМҒАҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘ АРНАЛДЫ

## Бер кисәлә…

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы указы менән 2020 йыл Башҡорт теле йылы тип иғлан ителгәйне. Ошо айҡанлы тотош республикала һәм милләттәштәр күпләп йәшәгән төбәктәрҙә йыл дауамында башҡорт телен популярлаштырыу, һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән төрлө саралар ойошторолдо. Тематик йылға йомғаҡлау 14 декабрь - Башҡорт теле көнөндә, Өфөлә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ла үтте.**

Сара Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышынан башланды. Кәңәшмәлә Тарих һәм башҡорт халҡын үҫтереү мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе Азат Ярмуллин 2021 йылды Башҡорт тарихы йылы тип үткәрергә тәҡдим итте. Артабан сара "Тамыр" телеканалы әҙерләгән концерт һәм Ҡоролтай уҙғарған бәйгеләрҙә еңеүселәрҙе билдәләү тантанаһы менән дауам итте. Республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев йыйылыусыларҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров исеменән ҡотлап, тамырҙарҙы, тарихты һәм туған телдәрҙе онотмаҫҡа саҡырҙы. Был юҫыҡта алып барылған эштәрҙең Башҡорт теле йылы менән генә тамамланмауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Артабан Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы иғлан иткән бәйге еңеүселәре дипломдар һәм статуэткалар менән билдәләнде. Улар иң әүҙем ҡала һәм район хакимиәттәре һәм ҡоролтайҙарына, Рәсәй төбәктәрендәге башҡорт йәмәғәт ойошмаларына, хатаһыҙ ҡала һәм райондарға, башҡорт баҫмаларына иң күп яҙылыуҙы ойоштороусыларға, иң яҡшы 10 дөйөм белем биреү мәктәбе директорҙарына, Ҡоролтай эшмәкәрлеген әүҙем яҡтыртыусы журналистарға тапшырылды. Сара Башҡортостан юлдаш телеканалында тура эфирҙа күрһәтелде.

## Оҫталар табылды…

**Ошо уҡ кисәлә БР Мәҙәниәт министрлығы I "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсы еңеүселәрен тантаналы рәүештә ҡотланы. Гран-приға "Мәргән уҡсы" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошма етәксеһе Юлай Ғәлиуллин лайыҡ булды.**

Еңеүсегә төп награда - 300 мең һумлыҡ сертификатты Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова тапшырҙы. Конкурста Юлай Рәфҡәт улы "Башҡорт милли костюмы - реконструкция" номинацияһында улус старшинаһы образын күрһәтте. Һыбайлы костюмын автор музей архивтары документтары буйынса тергеҙгән. "Заманса авторлыҡ костюмы" номинацияһында беренсе урынға Роза Юлдашбаева лайыҡ булды (Өфө ҡалаһы), "Башҡорт милли биҙәүестәре" номинацияһында - Рөстәм Дәүләтов (Өфө ҡалаһы), "Башҡорт милли костюмы - реконструкция" номинацияһында - Роберт Хәмиҙуллин (Өфө ҡалаһы), "Традицион башҡорт костюмы аксессуарҙары" номинацияһында - Гөлдәр Шабиева (Салауат районы) еңеүсе тип табылды. Уларға 100-әр мең һум күләмендәге аҡсалата сертификаттар тапшырылды.

## Ҡоролтайҙар баһаланды

**Республика район һәм ҡалаларында башҡорт теленә булған иғтибар урындағы ҡоролтайҙар эшмәкәрлегенә туранан-тура бәйле.**

Шуға ла Башҡорт теле йылына йомғаҡ яһағанда муниципалитет хакимиәттәре менән берлектә әүҙем эшләгән ҡоролтайҙарҙың эше баһаланыуы аңлашыла ла. Һөҙөмтәлә ҡалалар араһында беренсе урынды Күмертау ҡалаһы хакимиәте һәм урындағы башҡорттар ҡоролтайы, икенсене - Стәрлетамаҡ, өсөнсөнө - Өфө ҡалаһы яуланы. Башҡорт телен үҫтереүгә тос өлөш индергән иң яҡшы райондар һәм унда эшләп килгән йәмәғәт ойошмалары исемлегенә дүрт район инде. Стәрлетамаҡ районы хакимиәте һәм башҡорттары ҡоролтайына - I, Миәкә районына - II, Борай һәм Асҡын райондарына III урын бирелде.

## Күркәм бәйгеләр

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы социаль селтәрҙәрҙә өс йүнәлеш буйынса ижади бәйгеләр иғлан иткәйне. Башҡорт теле көнөнә арналған интернет-конкурстарҙа бөтәһе 100-ҙән ашыу эш ҡаралған, ҡатнашыусылар һаны тағы ла күберәк.**

Мәҫәлән, "Әсәм теле - сәсән теле" конкурсына 60-тан ашыу эш килгән. Һөҙөмтәлә "Башҡорт теле - туған телем" номинацияһында Салауат районынан Светлана Вәлиева, "Башҡорт теле - дәүләт теле" номинацияһында Өфө ҡалаһы 52-се лицейҙан Маргарита Гейт еңеүсе тип табылды. Светлана Вәлиева Ф.Туғыҙбаеваның "Башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто..." шиғырын, Гейт Маргарита К.Кинйәбулатованың "Туған телем" шиғырын яттан һөйләне. Ҡатнашыусыларҙың күбеһе Р. Ғарипов, З. Биишева, М. Ғафури, К. Кинйәбулатова, З. Ханнанова ижадына мөрәжәғәт иткән.

Ә бына йүнселдәр өсөн "Тырыш!" конкурсында ҡатнашырға шәхси эшҡыуарҙар, яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәр, крәҫтиән-фермер хужалыҡтары, шәхси хужалыҡтар, үҙмәшғүлдәр (шул иҫәптән һөнәрселәр) саҡырылғайны. Ойоштороусылар 9 ғариза ҡабул иткән. Балтас районынан мебель оҫтаһы Садыҡов Рәфис еңеүсе тип табылған.

Йәштәрҙә тарихҡа, мәҙәниәткә, тыуған яҡ тәбиғәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу маҡсатында үткәрелгән "Матур донъя" видеояҙмалар конкурсында 21 кеше ҡатнашҡан. Иглин районынан Алһыу Кәримованың яҙмаһы иң юғары баһаға лайыҡ булды.

## Шиғыр һөйләнеләр…

**Башҡортостанда шиғыр һөйләүселәрҙең "Башҡорт шагирҙарының шиғырҙары туған телдә" республика онлайн-конкурсына йомғаҡ яһалды. Конкурсҡа башҡорт, урыҫ, сыуаш, удмурт, мари, татар телдәрендә барлығы 163 видеояҙма ҡабул ителгән.**

Ярышта республиканан ғына түгел, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән һәм Ка-


"Тамға" еңеүсеһе.


Өфө башҡорттары ҡоролтайы баһаланды.

✓ *Ата-әсә балаһын үҙ көсөнә таянырға өйрәтеп, үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләһә, был бик ҙур бүләк булыр ине. Бойондороҡһоҙ булғанда ғына бала үҙен аяғында ныҡ баҫып тороусы кеше итеп тоя, шатлана, ғорурлана ала.*



наданан да ҡатнашыусылар булған. Шиғри һүҙ һөйләүсе оҫталар йышыраҡ Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева һәм Мостай Кәрим ижадына мөрәжәғәт иткән. Конкурс йомғаҡтары буйынса Гран-призы Миләүшә Әбүбәкирова яуланы. "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында 25 йәштән өлкәндәр араһында Гөлфирә Зөлҡәрнәева еңеүсе тип табылды. Ә бына "Ғаилә традицияларын һаҡлаған өсөн" номинацияһында Килмөхәмәтовтар һәм Вәлиевтарҙың ғаиләләре, "Сит илдә традицияларҙы һаҡлаған һәм тапшырған өсөн" номинацияһында Канаданан Сәрүәр Хәмзина еңеүсе булды. Еңеүселәрҙең тулы исемлеге менән Башҡортостан Халыҡтар дуҫлығы йорто сайтында танышырға мөмкин.

## Стипендиаттар аталды

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Башҡорт теле көнөнә һәм шағир иҫтәлегенә арнап, тантаналы саралар, эшлекле һөйләшеүҙәр ойошторолдо. Ошо сараларҙы йомғаҡлау байрамында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башҡорт халҡының мәғрифәтсе шағиры һәйкәленә сәскәләр һалды һәм М. Аҡмулла исемендәге стипендияға лайыҡ булған студенттарҙы ҡотланы.**

Быйылғы 2020-2021 уҡыу йылында махсус стипендияға республиканың юғары уҡыу йорттары һәм урта һөнәри белем биреү учреждениеларының 15 студенты лайыҡ булды. Шулай уҡ университеттың педагогия коллективы республикала төҙөләсәк Евразия фәннибелем биреү үҙәге нигеҙендә тормошҡа ашырырға теләгән проекттарын да күрһәтте. Ауыл хужалығы, нанотехнологиялар, генетика, уҡытыусы кадрҙар әҙерләү йүнәлешен хеҙмәттәшлек итеүҙән тыш, улар Үҙәк менән берлектә башҡорт телен уҡытыуҙың халыҡ-ара системаһы проектын булдырырға иҫәпләй. Был сит илдәрҙә йәшәгән яҡташтарға башҡорт теленең һөйләү һәм яҙма телдәрен башлап өйрәнергә, Башҡортостан Республикаһының тарихи һәм мәҙәни үҙенсәлектәре менән танышырға ярҙам итәсәк.



Башлыҡ студенттарҙы бүләкләне.

## Бикбай уҡыуҙары

**Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһында Башҡортостандың халыҡ шағиры тыуыуға 84 йыл һәм Башҡорт теле көнөнә арнап, "Бикбай уҡыуҙары" төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы үтте.**

Сараны БР Мәғариф һәм фән министрлығы, БР Мәғарифты үҫтереү институты, Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы, БР Яҙыусылар союзы, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ һәм Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһы ойоштороҙо. Конференцияла республиканың төрлө мәғариф учреждениеларынан 400 уҡыусы һәм уҡытыусылар ҡатнашты. Уларҙың эштәре "Башҡорт балаһы мин..." һәм "Шағир - милләтенең йөрәге" номинациялары буйынса башҡорт һәм рус телдәрендә айырым баһаланды, һәр йәш категорияһында айырым еңеүселәр һәм призерҙар билдәләнде. Ҡатнашыусылар араһында Баймаҡ, Бөрйән, Шаран, Ишембай, Салауат, Бүздәк, Хәйбулла райондары һәм Күмертау, Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай, Бөрө, Нефтекама, Туймазы, Өфө ҡалалары, Ырымбур өлкәһе уҡыусылары һәм педагогтары юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән.

## Башҡорт ғаиләләре

**Өфө ҡалаһының 140-сы Башҡорт гимназияһы Калинин районы башҡорттары ҡоролтайы менән берлектә "Башҡорт ғаиләһе" конкурсы ойоштороҙо.**



"Башҡорт ғаиләһе" еңеүселәре Мәхмүтовтар.

Конкурста Өфө ҡалаһының төрлө райондарынан бәйге положениеһы талаптарына яуап биреүҙәй 14 ғаилә ҡатнашты. Ә талаптар ысынлап та бик етди ине: башҡорт ғаиләһендә тыуған телде, тарихты, шәжәрәне яҡшы белергә, башҡортса йырларға, бейергә, шиғыр һөйләргә, бер-береһе менән әңгәмә ҡора белергә лә тейештәр. Ошоларҙы үҙ ғаиләһендә төп шарт, ҡағиҙә итеп алған, икешәр-өсәр бала үҫтергән Кәримовтар, Дилмөхәмәтовтар, Рафиҡовтар, Мәхмүтовтар, Йәнтуриндар, Хәсәновтар, Сафиндар, Хәйруллиндар, Нуриевтар, Фазыловтар, Хәбибуллиндар ғаиләләре һөҡландырҙы. Улар, әлбиттә, башҡорт ғаиләһенең ысын өлгөһө, милләтте дауам итеү, тиндәр араһында тиң итеү ҡанунын тормошҡа ашырыусылар. Был ғаиләләрҙе беҙ артабан республика кимәлендәге төрлө бәйгеләрҙә милләтте күтәрмәләүселәр сафында күрәсәкбеҙ әле, тигән ышаныс бар.

## Бишек - ҙур донъяға ишек…

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы "Әсә йөрәге" төбәк ойошмаһы менән берлектә "Бишек" бәйгеһе ойоштороҙо. Онотолоп барған боронғо бишек йырҙарын, халҡыбыҙҙың рухи хазинаһын киләсәк быуындарға еткереүҙә, туған телебеҙҙе үҫтереүҙә был проекттың әһәмиәте ҙур, тип баһаланды.**

Бишек йырын ишетеп үҫкән балалар, туған моңдарҙы сәңгелдәктән үк бала рухына һеңдергән атай-әсәйҙәр, олатай-өләсәйҙәр бәйгелә сәмләнеп һәм дәртләнеп ҡатнашты. Конкурсҡа 100-ҙән ашыу эш ҡабул ителгән. Билдәле этнографтар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, күп балалы ата-әсәләрҙән торған баһалама ағзалары уларҙы ҡарап сыҡҡандан һуң финалға 24 ҡатнашыусыны һайлап алған. Конкурста еңеүселәр "Бала башҡарған бишек йыры", "Бала һәм өлкән кеше башҡарған бишек йыры", "Бишек эшләү оҫтаһы" номинацияларында билдәләнде. Баһалама комиссияһы ағзалары сараның бәләкәс балаларҙың фекерләү ҡеүәһен, ижади хыялын үҫтереүҙә, милли рух тәрбиәләүҙәге ролен баһаланы. "Бишек"те киләһе йылда бөтә Рәсәй кимәленә сығарырға тәҡдим иттеләр. "Бишек" бәйгеһенең йомғаҡлау сығарылышын Башҡортостан юлдаш телевидениеһында 30 декабрҙә ҡарарға мөмкин буласаҡ.



"Бишек" бәйгеһе еңеүселәре.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЯРҘАМ ИТ, ЛӘКИН САМАНАН АШТЫРМА

Бала саҡта кеше тирә-йүндә нимәләр барыуы менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай. Һинең иң беренсе хәстәрең - үҙ имленгең. Ярҙамға мохтажлыҡ һине башҡаларға буйһоноулы итә. Һине ашатһалар, иркәләһәләр һәм яратһалар - һин бәхетле; һинең төп бурысың - күберәк иғтибар йәлеп итеү. Илап, эргәнә өлкәндәрҙе саҡырып алып булыуын да яҡшы беләһең. Йылмайыу ҙа бик яҡшы сара икән; шуға күрә һине ҡулға алһалар, йылмайып ебәрәһең, ә кире һалһалар, иларға тотонаһың. Был ябай манипуляция һинең артабанғы тормош барышын билдәләй. Бөтә бала саҡ өлкәндәргә нимә яҡшы тәьҫир итеүен һәм нисек иғтибарҙы йәлеп итергә икәнен өйрәнеүгә арнала.

Шулай итеп, бәләкәйҙән һин үҙеңде сит кешеләрҙең маҡтауына бәйле итеп программалаштыраһың һәм, әгәр хупламаһалар, үҙеңде ситләтелгән итеп тояһың. Бала саҡтың бындай ҡылыҡтарын ғәфү итеп була, әммә өлкәнәйгәс инде был - деградация билдәһе.

Әгәр һин, элеккесә, башҡаларҙы үҙеңә ҡулай булған нәмәләрҙе эшләргә мәжбүр итергә маташһаң, үҙеңде эмоциональ яҡтан өлгөргән кеше тип иҫәпләй алмайһың.

Мәҙәниәтебеҙҙә балалар өсөн торған һайын күберәк эшләү, ә уларҙан аҙыраҡ талап итеү ғәҙәткә инеп бара. Быға ата-әсәләр гәйепле: үҙҙәре өйрәнергә тейешле нәмәнән мәхрүм итеп, балаһын бойондороҡло яһағанын һиҙмәй ҙә ҡала улар. Тәүге ун һигеҙ йылын шулай үткәреп, балалар әсир роленә инә. Был тик кешегә генә хас феномен. Башҡа бөтә хайуандар тыуғас күп тә тормай балаһын айырып сығара, уны этеп сығара, шулай уны үҙаллылыҡҡа өйрәтә.

Ата-әсә балаһын үҙ көсөнә таянырға өйрәтеп, үҙ-үҙенә ышаныс тәрбиәләһә, был бик ҙур бүләк булыр ине. Бәләкәйҙән үк балала үҙаллылыҡ тойғоһо тәрбиәләргә кәрәк. Бойондороҡһоҙ булғанда ғына бала үҙен аяғында ныҡ баҫып тороусы кеше итеп тоя, шатлана, ғорурлана ала.

Ата-әсәнең бурысы - бойондороҡлолоҡтан һалмаҡ ҡына үҙаллылыҡҡа күсергә ярҙам итеү. Бында балаға хаталаныу хоҡуғы ла бирергә кәрәк. Сиктән тыш өпөкәйләү зыянлы. Әгәр бала йығылырға йыйына икән, әйҙә йығылһын. Бынан ул тәжрибә генә туплаясаҡ. Стакандағы һыуҙы түгеп ебәрһә лә - ҙур юғалтыу түгел. Кире осраҡта, һуңыраҡ балаң үҙ көсө менән нимәгәлер өлгәшергә кәрәк булғанда, "Минән бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ!" тип илауласа, ғәжәпләнмә. Хәстәрлекле ата-әсәһе юл ярыр әле, тип күнеккән бала бер нәмәгә лә үҙ аллы тотонмаясаҡ.

Мин балаға, яҡын кешеңә ярҙам итмәгеҙ, тимәйем, ярҙам итергә кәрәк, әлбиттә. Тик үҙе ынтылғанына өлгәшһен өсөн ирек бирергә тейешбеҙ. Беҙҙең бурыс - уға булышлыҡ итеү. Матди яҡтан ярҙам иткәндә, аҙаҡтан бурысын мотлаҡ ҡайтарырға тейешлеге тураһында алдан килешергә кәрәк. Сит ярҙам менән файҙаланып, күп нәмәгә нәҡ үҙең теләгәнсә өлгәшеп булмай.

Шуны иҫеңдән сығарма: әгәр һин атай йәки әсәй икәнһең, балаңың үҫешен тотҡарлаусы ҡылыҡтарҙы ентекле күҙәтеп бар, юҡһа, аҙаҡтан улар өсөн бик ҡиммәт түләргә тура киләсәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 28 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
7.30 Хоккей. Сборная России - сборная Чехии. Молодежный чемпионат мира-2021. Прямой эфир из Канады.
10.00 Жить здорово! [16+]
11.00 Модный приговор. [6+]
12.00, 3.00 Новости.
12.10, 1.00 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Новогоднее телевидение" с Максимом Галкиным". [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]
2.35, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 Х/ф "Тайны следствия. Прошлый век". [12+]
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**22.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**23.15 Кустәнәс. [12+]**
**23.45 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.15 Х/ф "Маленький Будда". [12+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**5.00 Память сердца. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 29 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 0.55 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Новогоднее телевидение" с Максимом Галкиным". [16+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 На ночь глядя. [16+]
2.30, 3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 Х/ф "Большой артист". [12+]
4.10 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Двойной праздник". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Зятек". [12+]**
**5.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 30 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
7.30 Хоккей. Сборная России - сборная Австрии. Молодежный чемпионат мира-2021. Прямой эфир из Канады.
10.00 "Жить здорово!" Новогодний выпуск. [16+]
11.00 "Модный приговор". Новогодний выпуск. [6+]
12.00 Новости.
12.10, 15.15 "Точь-в-точь". Новогодний выпуск. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.50 Сегодня вечером. [16+]
18.40 Д/ф Премьера. "Ирония судьбы. "С любимыми не расставайтесь..." К 45-летию фильма. [12+]
19.45 "Поле чудес". Новогодний выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Что? Где? Когда?" Финал года. [16+]
23.30 "Голос". Финал. Прямой эфир.
1.30 Вечерний Ургант. [16+]
2.45 Х/ф "Жизнь Пи". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40 Х/ф "Мисс Полиция". [12+]
17.15 "Привет, Андрей!" [12+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-20". [16+]
23.40 Т/с "Дневник свекрови". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Замерзшие в любви". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.15 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 31 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
7.45 Х/ф "По семейным обстоятельствам". [0+]
10.00 Новости.
10.20 Х/ф "Золушка". Кино в цвете. [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Х/ф "Девчата". [0+]
14.00 "Голос". Финал. [12+]
15.55 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
17.35 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
19.20 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [6+]
22.30 Новогодний маскарад на Первом. [16+]
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
0.00 Новогодняя ночь на Первом. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Дневник свекрови". [12+]
7.10 "Золушка".
9.25 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
11.00, 14.00 Вести.
11.10 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
14.10 "Короли смеха". [16+]
16.50 Х/ф "Служебный роман". [0+]
19.25 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
20.45 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
22.20 "Новогодний парад звёзд".
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
0.00 Новогодний Голубой огонёк-2021.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 20.00 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 "Сәләм". [12+]**
**10.00 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.00 "Бишек. Колыбельные моего народа". [6+]**
**16.00 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**17.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.00 "Бал джигитов". Финал проекта. [12+]**
**20.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**22.15 "Новогодние маршруты". Огонек. [12+]**
**23.50 Новогоднее поздравление Главы Республики Башкортостан Радия Хабирова. [12+]**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В.Путина.**
**0.00 "Башкорт йыры-2020". [12+]**
**3.00 Х/ф "Рождественские каникулы". [12+]**
**4.45 "Йондоҙ". [12+]**
**6.45 "Весело живем!" [12+]**

### 1 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Новогодний календарь. [0+]
7.05 Х/ф "Золушка". Кино в цвете. [0+]
8.25 Х/ф "Девчата". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Х/ф "Ирония судьбы, или С легким паром!" [6+]
13.20 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
16.40 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
18.20 Премьера. "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
21.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. Финал. [16+]
23.20 Д/ф Премьера. "Викторина". [16+]
1.25 Дискотека 80-х. [16+]
3.25 Х/ф "Джентльмены предпочитают блондинок". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Х/ф "Карнавальная ночь". [0+]
6.15 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
8.40 Х/ф "Служебный роман". [0+]
11.15 Х/ф "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". [6+]
12.40 "Песня года".
14.50 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
16.30 Х/ф "Одесский пароход". [12+]
17.55 "Юмор года". [16+]
20.00 Вести.
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
23.10 Х/ф "Заповедник". [16+]
1.05 Х/ф "СуперБобровы. Народные мстители". [12+]
2.30 Х/ф "Сваты". [12+]
4.52 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С Новым 2021 Годом!" Концерт. [12+]**
**7.30 Кустәнәс. [12+]**
**8.00 Х/ф "Снежная королева". [6+]**
**9.30 М/с "Джинглики". [0+]**
**10.30 "Йома". [0+]**
**11.00 "Звездная гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Кускар". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00 "Башкорт йыры-2020". [12+]**
**17.45 Посмотрим... [6+]**
**18.30 "Курай-шоу". [12+]**
**21.00 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**22.30 "Башкорт йыры-2019". Гала-концерт. [12+]**
**1.00 Х/ф "Эта замечательная жизнь". [12+]**
**3.15 "Весело живем!" [12+]**
**3.30 Д/ф "Енмеш". [6+]**
**4.00 Х/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**
**5.30 "Любовь и звезды". [12+]**

### 2 ЯНВАРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Х/ф "Финист-Ясный сокол". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Х/ф "Старик Хоттабыч". [0+]
8.30 М/ф "Ледниковый период: Континентальный дрейф". [0+]
10.10 Х/ф "Морозко". [0+]
11.45 Х/ф "Один дома". [0+]
13.40, 15.10 Х/ф "Один дома-2". [0+]
15.00 Новости (с субтитрами).
16.20 Х/ф Премьера. "Щелкунчик и четыре королевства". [6+]
18.00 "Точь-в-точь". Новогодний выпуск. [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон". [16+]
0.20 Х/ф "Анна и король". [0+]
2.45 Х/ф "Давай сделаем это легально". [16+]
4.00 Первый скорый. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки". [12+]
8.10 Х/ф "Свадьбы не будет". [12+]
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.15 Х/ф "Развода не будет". [12+]
13.05 "Песня года".
15.30 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
17.40 "Юмор года". [16+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Т/с "Анна Каренина". [12+]
0.50 Т/с "Ликвидация". [16+]
3.15 Т/с "Одесса-мама". [16+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Кустәнәс. [12+]**
**8.00 Х/ф "Паника в Альпах". [12+]**
**9.30 М/ф "Снежные приключения Солана и Людвига". [0+]**
**11.00 "Звездная гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Мир потеряшек". [0+]**
**12.15 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Дарю песню". [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00 Церемония награждения победителей "Башкорт йыры-2020". [12+]**
**17.00 Д/ф "От Уфы до Хуаншаня". [6+]**
**17.45 Посмотрим... [6+]**
**18.30 "Во имя народа". Концерт, посвященный 125-летию со дня рождения Шайхзады Бабич. [12+]**
**20.30, 3.15 "Яңы йыл-караоке". [12+]**
**21.30 "Zainetdin". Концерт Загира Зайнетдина. [12+]**
**23.00 "Байык-2019". Гала-концерт. [12+]**
**1.30 Х/ф "Последний король". [12+]**
**4.00 Х/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**
**6.00 Д/ф "Виртуоз". [6+]**
**6.45 "Весело живем!" [12+]**

### 3 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Х/ф "Старик Хоттабыч". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Х/ф "Марья-искусница". [0+]
8.25 Х/ф "Морозко". [0+]
10.10 Х/ф "Щелкунчик и четыре королевства". [6+]
12.00 Д/ф "Викторина". [16+]
14.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
15.40 Ледниковый период. [0+]
19.25 "Лучше всех!" Новогодний выпуск. [0+]
21.00 Время.
21.20 "Три аккорда". Новогодний выпуск. [16+]
23.50 Х/ф Премьера. "Хороший доктор". [16+]
1.30 Х/ф "Зуд седьмого года". [0+]
3.10 Дискотека 80-х. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Т/с "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". [12+]
8.15 Х/ф "Золотая невеста". [12+]
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.15 "Смотреть до конца". [12+]
12.15 Х/ф "Теория невероятности". [12+]
15.50 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Т/с "Анна Каренина". [12+]
1.05 Т/с "Ликвидация". [16+]
3.15 Т/с "Одесса-мама". [16+]

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**7.30 Кустәнәс. [12+]**
**8.00 Х/ф "Выжить в Арктике". [12+]**
**9.30 Х/ф "Эмма и Санта-Клаус". [6+]**
**11.00 "Звездная гора новостей". [6+]**
**11.15 Х/ф "Балкас". [0+]**
**12.00 М/ф "Нурбостан". [0+]**
**12.15 "Ете егет". [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.15 Юбилейный концерт композитора Валерия Скобелкина. Исполняет НСО РБ. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). КХЛ.**
**19.00 "Урал-Батыр". [12+]**
**19.30 Юлдаш-хит-2019. [12+]**
**23.00 Концерт Сагидуллы Байегет. [12+]**
**1.30 Х/ф "Паника в Альпах". [12+]**
**3.15 Бирешмә, Кыш Бабай! [12+]**
**4.00 Х/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**
**5.45 Д/ф "Первый чемпион Габдрахман Кадыров". [6+]**
**6.30 "Урал-Батыр". Открытый Республиканский турнир по силовому экстриму. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Декабрь - Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (13) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 29 (14) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 30 (15) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 31 (16) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 1 (17) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 2 (18) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 3 (19) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХУШ КИЛӘҺЕҢ, ЯҢЫ ЙЫЛ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**50-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Заряд. Бикбаев. Наган. Ҡаҙаҡ. Эвенк. Ишембай. Паровоз. Әтлек. Атлант. Танат. Ҡот. Нәнәй. Ел. Ритм. Заман. Шин. Куба. Аҡһаҡал. Рәсәй. Ғарипов. Назаров.

**Вертикаль буйынса:** Пайтәхет. Ҡырсынташ. Валторна. Буҙа. Ҡурған. НизаҒ. Закон. Ҡумта. Бина. Гимнастерка. Ул. Диван. Эйә. Назар. Тәкә. Еңгә. Күк. Йәнәй.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 декабрь "Йөрәктәр ҡушылды"** 12+

**2 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 12.00 6+

**"Әҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 12+

**3 ғинуар "Серле коршаҡ"** (З. Биишева), хикәйәт. 11.00, 13.00 0+

**"Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 ғинуар "Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.30, 12.30, 14.00 0+

**"Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00, 15.00, 17.00 0+

**3 ғинуар "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 10.00, 12.00 0+

**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00, 12.30, 14.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 декабрь "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 11.00 0+

**2-3 ғинуар "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 11.00, 14.00, 17.00 0+

## Х. Әхмәтов ис. Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 ғинуар "Главный новогодний утренник Уфы"**, тамаша. 14.00 0+

**3 ғинуар "Главный новогодний утренник Уфы"**, тамаша. 12.00 0+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - Биби Шәрәфетдинова, **Сибай ҡалаһынан** Нурғәли Юнысов, **Мәләүез ҡалаһынан** Вилиә Фәхретдинова, **Ҡариҙел районы** Иҫке Аҡбүләк ауылынан Сәлимә Ниғмәтова һәм башҡа гәзит уҡыусыларыбыҙҙы күркәм ғүмер байрамдары менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы сәләмәтлек, бай бәхетле оҙон ғүмер, шатлыҡ-ҡыуаныстарға тулы көндәр теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КӘРӘКЛЕ КӘҢӘШТӘР



**Пандемия осоронда күпселек ковид сирлеләрҙең медицина страховкалау компанияларына мөрәжәғәттәре өйгә табип саҡыртып булмауы, ҡулда йүнәлтмә була тороп та диагностика тикшеренеүҙәре үтә алмау, сирләгән хәлдә лә ауырыуҙарҙы дауаханаға һалыуҙан баш тартыуҙары менән бәйле. Страховкалаусыларҙың Бөтөн Рәсәй берлеге эксперттары кемгә һәм ниндәй ваҡытта ярҙам ителергә тейешлеге хаҡында һөйләй.**

**➔ Өйгә ниндәй осраҡтарҙа табип саҡырырға була?**

Тән температураһы 37,2 градустан юғары күтәрелһә йәки ОРВИ билдәләре: йүтәл, тымау башланһа, тын алыу ауырлашһа, тын ҡыҫылһа, күкрәктә ауыртыу, хәлһеҙлек булһа, баш ауыртһа, ес-тәм тойоу юғалһа, өйгә табип саҡыртырға мөмкин. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының яңыртылған методик кәңәштәрендә, табип ауырыу өйөнә 24 сәғәт эсендә килергә тейеш, тип әйтелә. Әгәр шулай булмаһа, үҙегеҙҙең страховкалаусы ойошмаға һис һүҙһеҙ шылтырата алаһығыҙ. Страховка номеры полиста күрһәтелергә тейеш. Табипты саҡыртыу ҡәтғи кәрәк булған шарттар ҙа бар:

- әгәр пациент 65 йәштән өлкән булһа,
- башҡа төр сирҙәр менән дә яфаланһа, йәғни коронавирусты ҡатмарландырыуға сәбәп булырҙай хроник сирле иҫәпләнһә. Тәү сиратта был шәкәр диабеты, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, бөйөрҙәр, тын юлдары һәм яман шеш сирҙәре.
- COVID-19 раҫланған кешеләр менән аралашыу булғанда йәки коронавирус киң таралған көсөргәнешле эпидемия төбәгенән килгән осраҡта.

**➔ Тиҙ ярҙам бригадаһын ҡасан саҡыртырға?**

Сирҙең ауыр билдәләре барлыҡҡа килгәндә: тән температураһы 38,5-тән юғары булһа, күкрәк тәңгәлендә ауыртыныу һиҙелһә, һауа етмәһә. Һорауҙарға яуап алғас, тиҙ ярҙам операторы пациентҡа тиҙ ярҙам бригадаһын ебәрә. Пациент ғүмеренә хәүеф янағанда, ҡағиҙә буйынса, ул 20 минут эсендә килергә тейеш. Әгәр пациент ғүмеренә әллә ни ҡурҡыныс янамай, ләкин яҡын араларҙа медицина ярҙамы кәрәк икән, ике сәғәт эсендә килеп етергә тейеш.

**➔ Өйҙә дауаланыусыға табип ниндәй анализдар тәғәйенләй?**

Ниндәй лаборатор тикшеренеүҙәр үтеү кәрәклеген табип билдәләй. Анализды медицина ойошмаһының күсмә бригадаһы өйгә килеп, йәки поликлиника табибы тәү медицина ҡарауы үткәргәндә ала. Һаулыҡ һаҡлау министрлығының методик күрһәтмәләре буйынса, коронавирус менән өйҙә енелсә сирләүселәргә КТ йә МРТ кеүек юғары технологик тикшеренеүҙәр талап ителмәй. Әгәр ҙә пациентты дауаханаға һалалар икән, дауалау учреждениеһы уны ҡабул иткән саҡта ҡанға дөйөм һәм биохимик анализ, үпкәләргә КТ үткәрә һәм башҡа тикшеренеүҙәр эшләй. Анализ һөҙөмтәләре пациентҡа оҙаҡҡа һуҙмай 2-3 көн эсендә хәбәр ителергә тейеш.

**➔ Дауаханаға һалыу ҡасан тейеш?**

COVID-19 диагнозы раҫланған сирләүсенең өс көн дауамына 38,5 булған тән температураһы төшмәһә, уны дауаханаға һалалар. Участка табибы йә тиҙ ярҙам табибы йүнәлтмәһе буйынса. Уртаса ауыр хәлдәге ауырыуҙарҙа түбәндәге күрһәткестәрҙең икеүһе күҙәтелгәндә шулай уҡ дауаханаға һалына: сатурация - 95 процент; температура - 38 градус; тын алыу йышлығы - 22; ике яҡ үпкәһендә лә таралыусы 25 процент үҙгәрештәр менән (КТ тикшереүе булған хәлдә) пневмония билдәләре булғанда. Бынан тыш, сиренең ауырлығына ҡарамаҫтан, хәүеф төркөмөнә түбәндәге ковид пациенттар инә: 65 йәштән өлкәндәр; ҡан баҫымы, хроник йөрәк сирҙәре, яман шеш ауырыуы, бауыр циррозы кеүек өҫтәмә сирҙәре булғандар; ятаҡта, күп кешеле фатирҙарҙа, 65 йәштән өлкәндәр менән йәки үпкә-ҡурылдай, йөрәк-ҡан тамырҙары, эндокрин системаһы сирҙәре менән яфаланған хроник ауырыуҙар менән йәшәгәндәр.

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# ТЕТРӘНЕҮҘӘР...

## фәһем-һабаҡ булһын кешелеккә

**Һәр Яңы йылға матур теләктәр, зәңгәр хыялдар артмаҡлап, тормошобоҙға ниндәйҙер үҙгәрештәр килеренә, мөғжизәләр ысынбарлыҡҡа әүерелеренә ышанып аяҡ баҫабыҙ. Ләкин... Көткәндәр тормошҡа ашһын өсөн үҙебеҙ ниндәй һынауҙар аша аҡыл төйнәйбеҙ һуң?**

Мәҫәлән, бөгөн беҙ барыбыҙ ҙа кешелеккә көтмәгәндә ябырылған сир афәтенән нисек, ҡасан ҡотолорбоҙ, тигән һорау алдындабыҙ. Әммә тажзәхмәт биргән һабаҡтарҙан аҡыл алдыҡмы? Эйе, Ер йөҙөндә, әйләнә-тирәлә иманлы әҙәмдәрҙе һуңғы сиккә еткергән кире күренештәр бихисап. Хоҙайҙың ошо сир менән иҫкәртеүе фәһем-һабаҡ ҡына булһын ине лә, йәнде әрнеткән, ҡулды һәлендергән, бөтә ғәйрәтте ҡайтарған ғәҙелһеҙлектәр, йәмһеҙ күренештәр һис юғы кәмей төшһөн ине - был күптәрҙең хыялтеләгелер бөгөн.

Һис һүҙһеҙ, күптәр күңелен үҙгәртте был сир. Иң мөһиме, йәшәүҙең, тормоштоң, яҡындарыңдың, хәләл көсөң менән йыйылған мал-мөлкәтеңдең - булғандың ҡәҙерен белергә, нәфсеңде, асыуыңды, туйып һикереп шашыныуҙарҙы ауыҙлыҡларға өйрәтте. Күрәһең, йәшәү ҡәҙерен белеү өсөн, артыҡ уҙынып китмәҫ өсөн ошондай тетрәнеүҙәр кәрәктер кешегә. Шул тетрәнеүҙәрҙән һабаҡ алып, таҙарынып, изгерәк, мәрхәмәтлерәк, ғәҙелерәк булып йәшәй башлаһаҡ ине. Былар иң яҡшы Яңы йыл теләге булып яңғырай, шулай бит?

Ошо тажзәхмәт пандемияһынан һуң тағы шундай һығымталар яһала һәм улар ҙа Яңы йыл теләге булып ҡабул ителә: бынан ары кешеләр үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлыраҡ булыр, уны һаҡлауҙың, нығытыуҙың төрлө сараларына мөрәжәғәт итер; эске тауышҡа ҡолаҡ һалып, ундағы "табип"тың изгелектәр ҡыл, рәхмәтле бул, уйҙарыңды яҡтырт, асыуыңды, үпкәләүҙәреңде онот, барыһын да ғәфү ит, йөрәгеңде мөхәббәт хисе менән тултыр, тигән бик тә мөһим талаптарын үтәй башлар... Халыҡ, моғайын, медиктарҙы, уҡытыусыларҙы әрләүҙән туҡтар... Уҡыуға, белем алыуға ынтылыш көсәйер... Себерҙәрҙә йөрөгән ир-егеттәребеҙ ғаиләләренә ҡайтыр, үҙе йәшәгән ерҙә эш табыр... Ауылдарҙың абруйы күтәрелер, уларҙа төпләнеп ҡалыусылар күбәйер... Кешеләр үҙ ҡулдары менән етештергән, үҫтергән ризыҡҡа өҫтөнлөк бирә башлар... Күктәрҙә яралған никахтар тығы ла нығый бирер, ялған тойғолар менән ҡоролғандары емерелер... Нисек кенә булмаһын, аңлылар, иманлылар алған һабаҡтарҙан барыбер үҙгәрер ул... Ә яман уйлылар, бысраҡ эслеләр, көнсөлдәр, ғәйбәтселәр, дан артынан, вазифа артынан ҡыуыусылар, битарафтар үҙгәрмәҫ, ахры. Ана бит, ҡалай бысрағын сәсәләр ундайҙар интернет донъяһында. Ошо сир афәтен еңеү өсөн быға саҡлы башҡа ла килмәгән саралар күрелә. Беҙгә бары тик өйҙә ултырыу, ситтән тороп эшләү, булғанына шөкөр итеп, билде ҡыҫып быуып булһа ла түҙемлек күрһәтеү генә кәрәк. Түҙмәйҙәр. Бысраҡтарын эстәрендә тотоп тыя алмайҙар. Эйе, ундайҙар үҙгәрмәҫ...

...Ә беҙ, милли баҫмаларҙа ижад итеүселәр, уҡыусыларыбыҙҙы һаман яҡты уйҙарға, изге эштәргә әйҙәйбеҙ, тормошобоҙҙа булып ятҡан һәр ваҡиғаны, ишеткән һәр хәбәрҙе дөрөҫ ҡабул итергә, дөрөҫ һығымталар яһарға кәрәк, тигән саҡырыуҙар, иҫкәртеүҙәр ташлайбыҙ. Әммә бөгөн беҙҙе бик аҙҙар ишетә. Башлаған һүҙемдең әрәсәһе лә шул ине ул: ниңә беҙҙе уҡымайҙар, ниңә тираждарыбыҙ кәмей, ниңә гәзит-журналдарға яҙылыусылар кәмегәндән кәмей бара? Бына әле лә яҙылыу кампанияһы тамамланды, әммә ул беҙгә әллә ни шатлыҡ килтермәне. Аҡ ҡағыҙ битенә хеҙмәткәрҙәребеҙ, авторҙарыбыҙ ҡәләме менән күпме йылылыҡ, халҡыбыҙҙың йәшәйеш һәм тәрбиә мәктәбе ҡанундары, рухы, сәме, ғәме күсерелә, тик улар һәр милләттәшкә барып етмәй. Аҡ ҡағыҙ битенән уҡымағанға ла әҙәмдәр һайыға, наҙанлана, фекер йөрөтөү һәләтенән яҙа бара түгелме икән, тип тә уйланыла әле...

Бөгөн ҡағыҙ баҫмаларҙы интернет сығанаҡтарға алыштырыу тураһында хәбәр ҡуйыртыусылар ҙа бар ул. Әммә был яҡшы идея түгел. Кешелеккә әленән-әле үткәндәргә әйләнеп бағыу, ата-бабалары яулаған ҡиммәттәрҙе, хазиналарҙы, тәжрибәне кире ҡайтарыу кеүек ғәҙәт тә ят түгел. Мәҫәлән, әгәр ҙә беҙ бөгөн тарихи тамырҙарыбыҙҙы барлайбыҙ, милли кейемдәребеҙгә, милли һөнәрҙәребеҙгә ҡайтабыҙ икән, был быны раҫлай түгелме? Шуның һымаҡ, ҡағыҙ баҫмаларҙы уҡыусылар кәмеүенең дә ваҡытлы күренеш булырына инанып йәшәлә. Ә бөгөн иһә ошо инаныуҙы нығытыусы, беҙҙән айырылмаусы, "Киске Өфө" баҫмаһындағы аҫыл һүҙҙе һанлаусы аңлы уҡыусыларыбыҙға, тоғро авторҙарыбыҙға рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерәбеҙ.

Әйткәндәй, **Әхмәр Үтәбай, Бәҙри Әхмәтов, Хәлил Һөйөндөков, Әғләм Шәрипов** кеүек иң әүҙем авторҙарыбыҙ беҙҙең икеләтә, өсләтә рәхмәт һүҙҙәребеҙгә һәм бүләктәребеҙгә лайыҡ икәнен дә билдәләп ҡуйайыҡ. Яңы йыл менән!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**







АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕР КИҪЕЛГӘН ИКМӘК...

## кире йәбешмәй

Ҡатының яҡшы булһа, арғымаҡ менерһең, ҡатының яман булһа, һарғайып киберһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙ бары тик бер серҙе генә һаҡлай ала: үҙ йәше тураһындағы серҙе.

**(Вольтер).**

Йәшлек тиҙ генә үтеп китә торған ауырыу һымаҡ ул.

**(Иоганн Вольфганг Гете).**

Ҡайһы бер ирҙәр, идара итеүе еңелерәк булыр, тип, ахмаҡ ҡатын-ҡыҙға өйләнә лә үҙе ахмаҡ хәлендә ҡала.

**(Сэмюэл Джонсон).**

"Ниңә һыу эсеү гонаһ түгел икән, - тигән бер итальян, - ул саҡта ул шундай тәмле булыр ине".

**(Георг Кристоф Лихтенберг).**

Кешенең бөйөклөгө уның буйы менән үлсәнмәгән кеүек, милләттең бөйөклөгө уның иҫәбе менән үлсәнмәй.

**(Виктор Гюго).**

Еңеүҙәр нәфрәт тыуҙыра ла инде: еңелгәндәр ҡайғы-хәсрәт эсендә йәшәй. Еңеүҙәрҙән һәм еңелеүҙәрҙән азат кеше бәхеттә йөҙөп йәшәй.

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарттың ике улы була. Улдарының кеçеһе бер ваҡыт атаһынан уның байлығының үҙенә тейешле өлөшөн һорай. Атаһы уның теләген ҡәнәғәтләндергәс, улы ситкә сығып китеп, аҙып-туҙып йөрөп, булған байлығын туҙҙырып бөтөрә. Тиҙҙән улы йөрөгән яҡтарҙа аслыҡ башлана, һәм ул бер байға сусҡа көтөргә яллана. Барыбер мандый алмай, асыға. Шунда ул атаһын хәтергә төшөрә: "Атайымдың күпме хеҙмәтсеһе бар, улар барыһы ла икмәк ашай, минең кеүек асыҡмай. Ҡайтайым, атайымдан ғәфү үтенәйем, "Хоҙай һәм һинең алдыңда ғәйеплемен, улың тип аталырға хаҡым юҡ, мине хеҙмәтсең итеп ҡабул ит", тип әйтәйем", - тип уйлай һәм тыуған яҡтарына юл тота. Улы ҡайтып килгәнен ишетеп ҡалған атаһы уның ҡаршыһына йүгерә, уны ҡосаҡлап үбә. Улы: "Атай, мин Хоҙай һәм һинең алдыңда ғәйеплемен. Минең һинең улың тип аталырға хаҡым юҡ", - ти. Атаһы шунда хеҙмәтселәренә: "Иң шәп кейемдәрҙе килтерегеҙ һәм улымды кейендерегеҙ. Өҫтәл әҙерләгеҙ, хәҙер күңел асасаҡбыҙ. Улым үле ине, хәҙер терелде, юғалғайны, табылды", - тигән. Кешегә Хоҙайҙан китергә ярамай. Әгәр ҙә китә ҡалһаң, бөтә йөрәктән Хоҙайға яңынан ҡайтырға тырышырға кәрәк".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 1048/12